ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-4 апрель - май (алағарай - һабанай)

2018

№ 17 (799)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тыуған телебеҙҙә...

диктант һынауын үттек



6

Йәш атай-әсәйҙәрҙең...



тыуған телдә яҡлап күтәрелгәне... 8-9

Илһөйәрлекте...

атай-әсәй балаһына күсерә



11

Аҡсаң булһа...

файҙалы эшкә йүнәлт



12-13

ТВ-программа 14

***Рюмка – юлдың башы, ашаған ваҡытта бер-ике рюмка эсеү – юлдың уртаһы. Ә юлдың аҙағы – эскән килеш үлтергән өсөн төрмәлә ултырыу, психиатрия дауаханаһына барып эләгеү, еңел ауырып үлеп китеү... Бик күп аҡыл эйәләре, алданып, ошо юлға баҫа, үлемгә табан алып барған юлға...***

**(Джек Лондон).**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Ниңә хәҙерге заман балалары хеҙмәтте үҙ итмәй үҫә? Әллә ғаилә, атай-әсәй, мәктәп тәрбиәһе етмәйме?*

***Руслан ШӘҢГӘРӘЕВ, психолог:***

Йәш быуындың эшләргә яратмауында ғаиләне лә, мәктәпте лә ғәйепләргә мөмкин, ләкин был мәсьәләгә бер яҡлыраҡ ҡараш булыр ине. Йәмғиәттә барған үҙгәреш-тәрҙе лә иҫәпкә алыу кәрәк-тер, минеңсә. Совет йылдары заманында хеҙмәт иң почетлы урында, ә эш кешеһе - теге йәки был һөнәр эйәләре бер тигеҙ кимәлдә ихтирамға лайыҡ булдылар: һауынсымы ул, шахтер йә металлургмы, уҡытыусы йә ғалиммы... Токарь, слесарь, механизатор, зоотехник, ашнаҡсы кеүек төрлө һөнәрҙәргә уҡытып сығарыусы һөнәрселек урта уҡыу йорттары, техникумдар күп ине. Завод-фабрикалар, колхоз-совхоздар бөтөрөлгәйне, әлеге уҡыу йорттары ла юҡҡа сыҡты. Был кешеләр психологияһында ла сағылыш тапмай ҡалманы. Ата-әсә, уларҙың балалары аңында эшсе - уңмаған, уҡымаған, аҡсаһыҙ, ҡара эш башҡарыусы ҡиәфәтендә тороп ҡалды. Хәҙер ата-әсә, теләге, һәләте бармы-юҡмы, балаһын этеп-төртөп юғары уҡыу йортона индерергә тырыша. Диплом алып сыҡһа, балаһы кеше була, йәнәһе. Ләкин ана шул йәштәрҙең күпселеге уҡыған һөнәре буйынса эшләмәй. Белгестәр фекеренсә, Рәсәйҙә лә хәҙер шулай тип аталған "итальян синдромы" башланған, имеш. Йәғни баяғы балалар "өлгөрөп етеп", бер ҡайҙа ла эшләргә теләмәй, ашап-эсеп, күңел асып ҡына ятырға ғәҙәтләнә. Европала ундай ҡатлам күптән нығынды, хәҙер бындай әрәмтамаҡлыҡ тенденцияһы беҙҙең йәмғиәткә янай.

Бындай хәлдең тағы бер сәбәбе - маҡсат һәм идея булмауҙа. Ата-әсә балаларын әҙер тормош шарттары менән тәьмин итә: йорт һалып бирә, фатир, машина һатып ала, башҡа кәрәк-яраҡ менән туҡтауһыҙ тәьмин итә - шунан ниңә эшләһен улар? Эш юҡ, аҙ түләнә, был һөнәр оҡшамай, хатта, көн дә иртән тороп йөрөргә кәрәкме ни, тигәнерәк ризаһыҙлыҡ һәм һылтауҙар менән нисек тә эшкә урынлашмау яғын ҡарайҙар. Ә инде бер ҡайҙа ла эшләмәйенсә өйҙә ултырыу - ул кешене кеше булараҡ юҡҡа сығара, тарҡата башлай. "Аҙ аҡсаға бил бөккәнсе, эшһеҙлек пособиеһы алып ятам", тигәндәрен дә йыш ишетергә тура килә.

Әйткәндәй, бындай әрәмтамаҡлыҡҡа дәүләт үҙе лә юл ҡуя түгелме һуң? Халыҡты эш менән тәьмин итеү, яңы предприятиелар асыу, эш урындары булдырыу мәсьәләһендә бер ниндәй ҙә ыңғай үҙгәреш юҡ. Шул гонаһты юйыу йөҙөнән, күрәһең, РФ Хеҙмәт министрлығы эшһеҙлек буйынса пособие күләмен арттырырға тәҡдим итә. Бер яҡтан, был кәрәкле тәҡдим булһа ла, миҙалдың икенсе яғы ла бар - ҡайһы бер хәйләкәрҙәргә эшләмәйенсә генә пособие алып ятыу юлы асыла. Өҫтәүенә, унын күләмен дә арттырһалар. Яңыраҡ икенсе бер тәҡдим яңғыраны: бюджет тәртибендә уҡыған студенттарҙы, вуз тамамлағас, дәүләт компанияларына эшкә ебәреү буйынса закон проекты ҡараласаҡ. Ул яҡлана ҡалһа, стажы, тәжрибәһе булмау сәбәпле эшкә урынлаша алмай йөрөгән йәштәр проблемаһы ла үҙенән-үҙе хәл ителер ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 апрелдән 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһармановaның "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" һәм башҡа матур китаптарға эйә була алыр. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru.

**Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыктарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма ул "Киске Өфө". Алдырығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



*"Апай, афоризмдары бигерәк ҡыҙыҡ..."*

12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШЕ БУЛҒАНДАР БӘХЕТЛЕ

***Нажиә АЛЛАЯРОВА, Башҡорт АССР-ының халыҡ, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Иң борсолдорғаны: йәштәр тыуған телебеҙ - башҡорт телен онотмаһын ине, тигән уй. Өйҙә башҡортса һөйләшһендәр, балаларына тыуған телгә ҡарата һөйөү тәрбиәләһендәр. Бына минең өс ейәнсәрем, ике бүлә-бүләсәрем бар һәм беҙ улар менән өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ. Балалар баҡсаһында ла тәрбиәне башҡортса алалар, әммә унан барыбер телдәре боҙолоп ҡайта. Мәскәүҙә йәшәгән ҡыҙымдың ҡыҙы бер ваҡыт "Һин кем, башҡортмо?" тип һорағас, "А я русская", тип яуап ҡайтарҙы. "Атай-әсәйең башҡорт, һин урыҫ ҡыҙы була алмайһың, Рәсәйҙә йәшәгән башҡорт ҡыҙы мин, тип әйт", тип өйрәтеп ебәрҙем. Хәҙер "Һин кем?" тигән һорауға шулай тип яуап ҡайтара, ти атаһы. Бына шулай бәләкәйҙән балаға уның кем булыуын аңлатып, тыуған телендә һөйләштереп үҫтерергә кәрәк.

Йәштәргә әйтер тағы бер кәңәшем - тырышып уҡып, эшләп йәшәгеҙ. Сөнки бөгөн тормош нәҡ шундай аҡыллы, уңған, маҡсатлы кешеләр ҡулында. Донъялар хәҙер еңеләйҙе, ашарға аҙыҡ күп, эшләйем тиһәң, эше бар, кейәм тиһәң, кейемдең ниндәйе генә юҡ. Беҙ үҫкән заманда уныһы ла булмай торғайны, Мәскәүгә уҡырға киткәндә костюм-юбканы үҙем тегеп кейеп киттем. Үҙеңсә матур итеп йәшәргә тырышһаң, эш тә табыла, бер ниндәй эштең дә ғәрлеге юҡ, иҙән йыуыусы булып та тамағыңа етерлек аҡса эшләргә мөмкин хәҙер. Үҫмерҙәр ата-әсәһенә генә ҡарап ултырмаһын, йәштән үҙенә кәрәкле аҡсаны үҙе эшләп алырға, хеҙмәткә күнегеп үҫһен ине.

Беҙ нәҡ шулай иттек. Каникул ваҡытында ауылда китапханасы ялға киткәндә уның урынына тороп ҡалып, аҡса эшләй инем. Өҫтәп, Верхнеурал, Тирләнгә барып, йыйылған еләк, сейәне һатып, яңы уҡыу йылына кейем, кәрәк-ярак-тар ала торғайным. Егерме саҡрым алыҫлыҡтағы Белорет ҡалаһына еләк-емеште көйәнтәләп йәйәү алып барған ваҡыттар ҙа булды. Әхирәтем Сәлихә бик оҫта тегенсе ине һәм мин уға эйәреп, кейем тегергә өйрәндем. Әсәйем май һатып, урыҫтарҙың аҡ йәймәһен (простыня) һатып алып, күк, ҡыҙыл буяу менән буяп, күлдәктәр тегергә өйрәткәйне. Ауылда бер ниндәй махсус күңел асыу урындары юҡ: радио китапханала ғына, һигеҙ әхирәткә бер мандолина, киноны айына бер тапҡыр Сәфәр тигән бер ағай алып килә торғайны. Ул күрһәткән фильмдарҙа бөҙрә сәсле ҡыҙҙар бейек үксәле туфлиҙар кейеп, бейеп, йырлап йөрөй. Уларға ҡарап һоҡлана һәм хыяллана торғайным, ә туфлиҙарҙы сейә һатып алып кейҙем. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ дәртләндереп уңыштарға өлгәштек, береһе лә ярҙам итмәне. Бөгөн иһә, үҙ йүнен үҙе күреп, юҡтан бар итергә торған кешегә мөмкинлектәр ҙә күп. Шуға күрә, йәштәребеҙ ололар һүҙенә ҡолаҡ һалып, күңелдәрен төшөрмәй, тырышып ҡына донъя көтөп йәшәһендәр. Күңелде уҡыуға, эшкә һалып үҫкән балалар бәхетле була.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ниңә хәҙерге заман балалары хеҙмәтте үҙ итмәй үҫә? Әллә ғаилә, атай-әсәй, мәктәп тәрбиәһе етмәйме?



**(Башы 1-се биттә).**

***Ынйы ВӘЛИЕВА, Өфө районы Шамонин дөйөм урта белем биреү мәктәбенең һынлы сәнғәт һәм технология уҡытыусыһы:*** Баланың хеҙмәткә мөнәсәбәте иң тәүҙә ғаиләлә формалаша, уны бәләкәйҙән тәртипкә, йыйнаҡлыҡҡа, эшкә өйрәтеп үҫтерергә кәрәк. Ата-әсәһе өлгөһөндә йә булмаһа уларҙың һорауы буйынса бала ниҙер эшләргә, ҡушылған йомошто үтәргә тырыша. Ата-әсәнең хуплауынан, маҡтауынан күңеле үҫә. Ә был үҙ сиратында хеҙмәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙың үҙенән-үҙе тәбиғи күнекмәгә әүерелеүенә булышлыҡ итә.

Хеҙмәт тәрбиәһенә мәктәптә ҙур иғтибар бирелә ул барыбер. Уҡырға, яҙырға өйрәнеүҙән башлап, төрлө яҡлап белемле, аҡыллы фекер эйәһе булыр өсөн бик күп көс түгергә, тырышырға кәрәк. "Уҡыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу" тип юҡҡа ғына әйтмәгән бит халҡыбыҙ. Тап ана шул тырышлыҡ тигән сифат баланың хеҙмәткә мөнәсәбәтенә бәйле лә инде. Тырыш, теремек, ихтыярлы һәм уңған бала яҡшы ла уҡый, өлгәшә, ә инде эшләргә яратмаған, хеҙмәт күнекмәләре алмаған ялҡауҙарҙың уҡырға ла рәте булмай. Шунан сығып, аҡыл хеҙмәте менән физик эштең бер-береһен тулыландырып килеүе, бер-береһенә йоғонтоһо мәктәптә хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙең нигеҙе, асылы тип ҡаралырға тейештер, тигән фекерҙәмен.

Балалар ялҡауланды, тигән фекер менән бигүк килешә алмайым, сөнки үҙебеҙҙең мәктәп балаларына ҡарап, улай тип әйтмәҫ инем. Ниндәй генә өмә, дөйөм эш ойоштормайыҡ, берәүҙең дә, теләмәйем, тип торғаны, ҡатнашмай ҡалғаны юҡ. Мәктәп территорияһын йыйыштырыу, сәскә түтәлдәрен утау, һыу һибеү булһынмы, класс бүлмәһен таҙалыҡта тотоу, иҙән йыуыумы - берәү ҙә ҡарышмай. Бәләкәй кластарҙа ғына иҙәнде йыйыштырыусы йыуа, ә өлкәндәр үҙҙәре лә булдыра ала быны. Ә инде хеҙмәт дәрестәренең үткәне лә һиҙелмәй ҡала: айырыуса бер йәнлелек, ихласлыҡ менән килә уға балалар. Минеңсә, хеҙмәт күнекмәләре биреү өсөн иң тәүҙә балала ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, уларҙы нимәгәлер өйрәтер алдынан өй шарттарындағыса йылылыҡ, ихласлыҡ булдырыу мөһим. Беҙҙең мәктәптә хеҙмәт дәрестәре, башҡа дөйөм урта белем биреү учреждениеларындағы кеүек үк, ҡыҙҙар өсөн - айырым, үҫмерҙәргә айырым алып барыла. Ҡыҙ баланы бит буласаҡ йорт хужабикәһе, әсәй итеп тәрбиәләргә тейешбеҙ, шуға ла улар тәмле итеп бешерергә өйрәнә. Бәләкәй генә кухнябыҙ, унда электр плитәһе, башҡа кәрәкле аш-һыу йыһаздары бар. Тегенсе оҫталығына ла үҙебеҙҙә өйрәнә ҡыҙҙар. Теген машиналарында үҙҙәренә күлдәктәр тегеп кейәләр, бәйләм бәйләйҙәр, сигеү сигәләр. Малайҙар өсөн дә столяр станоктары менән йыһазландырылған махсус оҫтахана бар. Улар ағас менән эш итергә өйрәнә. Бөтәһе лә һәйбәт, әлбиттә, ләкин балаларҙа мәктәп йылдарында уҡ теге йәки был һөнәр төрө менән ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, шуға ярашлы күнекмәләр биреү өсөн былар ғына аҙ, тип уйлайым. Өлкән класс уҡыусыларына үҙҙәре теләгән эш урынында көстәрен һынап ҡарау мөмкинлеге биреү файҙалы булыр ине. Мәҫәлән, кемдер уҡытыусыһы менән бер ҡатарҙан тороп дәрес үткәрә, кемдер урындағы етештереүсе предприятиеға барып, бер нисә сәғәт күнекмә ала - һөнәр һайлай. Хеҙмәт дәрестәре программаһын ошондай методикаға көйләп, мәктәп уҡыусының киләсәгенә йүнәлеш бирә алыр ине. Һеҙҙең һорауҙа күҙҙә тотолған "эш яратмаған" балалар - улар, минеңсә, үҙҙәренең нимәгә һәләтле булыуҙарын аңламаған, тәғәйен һөнәр һайлай алмай аптыраған, "аҙашҡан" йәштәр. Яратҡан эше, тимәк, маҡсаты бар икән, ундайҙар хаҡында ялҡау тип әйтеп булмай.

***Марат ҒӘЙНУЛЛИН, өс бала атаһы:*** "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында ҡуйылған әлеге һорауҙы ишеткәс, бер нисә йыл элек балаларыбыҙ уҡыған мәктәптә үткәрелгән ата-әсәләр йыйылышында, ҡала ерендә хеҙмәт тәрбиәһе өсөн мөмкинлек юҡ, тип сығыш яһаған бер атай менән бәхәсләшеп китеүебеҙ иҫкә төштө. Теләмәгән - һылтау эҙләр, тиҙәрме әле, шуның кеүек килеп сыға был. Эшләйем, тигән кеше бөтөн ерҙә лә шөғөл таба ала. Мин үҙем, мәҫәлән, ике улымды ағас, төҙөлөш эштәренә өйрәтер өсөн генә тигәндәй, ер участкаһы һатып алып, шунда бәләкәй генә йорт төҙөп ултырттыҡ, хәҙер мунса һала башланыҡ. Балта эштәренә үҙем ағайҙарым менән атай "мәктәбендә" өйрәндем. Улдарымдың береһе - 9-сы класта, икенсеһе 7-selә уҡый, йорт һалыу эштәрен башынан аҙағына тиклем үҙләштерҙеләр, ул ғына ла түгел, бына тигән балта оҫталары: үҙ ҡулдары менән бәләкәй ултырғыс, йәшелсә үҫентеләре, гөл ултыртыу өсөн ағас һауыттар, китап шкафы эшләп ҡуйҙылар. Баҡса мәшәҡәттәре тураһында әйтеп тә тормайым инде, уларһыҙ эш бармай. Картуф ултыртыу, уны утау, күмеү, көҙ еткәс, уңышын йыйып алыу тулыһынса уларҙың өҫтөндә. Ә ҡыҙыбыҙҙы йорт эштәренә әсәһе өйрәтә: өйҙә таҙалыҡ һәм тәртип булдырыу, төрләндереп ашарға бешереү, бәйләү кеүек эштәрҙе үҙләштерә әле ҡыҙыбыҙ. Аш-һыуҙан йәшелсә турамалары еңелерәк бирелә уға. Бәләкәй бит: 11 генә йәш әле, бөтәһенә лә өлгөрөр. Яңы йыл өҫтәленә былай ҙа дүрт төрлө турама әҙерләп, ғәжәп итте ағаларын. Иң мөһиме - балаларҙа ҡыҙыҡһыныу, ниҙер эшләп, үҙҙәрен һынап ҡарау теләге, ынтылыш бар. Уларға тик шарттар ғына булдыр, ҡалғанын үҙҙәре белер. Тик һәр саҡ эргәләрендә булып, бергәләшеп-кәңәшләшеп эшләү, уларҙың бәләкәй генә эшен дә күреп алып, баһалап, дәртләндереп тороу мөһим. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, ғаиләләге хеҙмәт тәрбиәһе - үҙебеҙҙең йәшәү рәүеше, көндәлек тормош мәшәҡәттәре һәм уға мөнәсәбәтебеҙ ул, тип әйтер инем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Инвестиция мөхитен яҡшыртыу һәм экспортты үҫтереү буйынса йәмәғәт советының ултырышы уҙҙы. Уны төбәк етәксеһе Рөстәм Хәмитов үткәрҙе. Ултырышта, атап әйткәндә, республикалағы алдынғы предприятиеларҙың инвестиция пландары ҡаралды. "Инвестицияға килгәндә, былтыр был юҫыҡта өмөттәр аҡланманы, - тине Рөстәм Хәмитов. - Инвестиция ағымы байтаҡҡа - 20 проценттан ашыуға төштө. Был хәл шул иҫәптән эре предприятиелар менән һөҙөмтәле берләштерелгән эш төҙөп булмау, инвестиция өлкәһендә ағымдағы мәсьәләләрҙе тиҙ арала хәл итә алмау сәбәпле килеп тыуҙы".

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илшат Тажетдинов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһының Ҡытай Халыҡ Республикаһына сәфәре Ҡытайҙағы "Sinoma-Group" милли сәнәғәт корпорацияһы вәкилдәре менән осрашыуҙарҙан башланды. Тяньцзинь цемент сәнәғәте проект-тикшеренеү институты корпорацияһының структура бүлеге вице-президенты Сун Дзинлян әфәнде менән осрашыу барышында Салауат районында цемент заводы төҙөү буйынса өҫтөнлөклө инвестиция проектын тормошҡа ашырыуҙа файҙаланырға күҙалланған технологик һәм инжиниринг ҡарарҙар тикшерелде.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Ағиҙел" хоккей командаһының өлкән тренеры Денис Афиногенов менән әңгәмәлә уйынсыларҙы һәм тренерҙар штабын Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы кубогы финалында ышаныслы еңеүе менән ҡотланы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ағиҙел" хоккей командаһы финал серияһында өсөнсө еңеү яуланы һәм үҙ тарихында тәүгә Ҡатын-ҡыҙҙар хоккей лигаһы кубогын яуланы һәм Рәсәй чемпионы булды. Мәскәү өлкәһенең "Торнадо"һына ҡаршы матч Дмитровта өфөләр файҙаһына 4:1 иҫәбенә тамамланды. Серияла аҙаҡҡы иҫәп - 3:0.

✓ Өфөлә Мәскәүҙең белем биреү департаменты вәкилдәре өс көнлөк визит менән булып китте. Улар "Балалар баҡсаһы - мәктәп - вуз" йүнәлеше буйынса алып барылған эшмәкәрлек менән таныштты. "ӨДНТУ-ның М. Пинский исемендәге 83-сө инженер лицейы" IT-технологиялар үҫеше тәжрибәһе менән уртаҡлашты һ.б. Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Мәғариф идаралығында үткән пленар ултырышта Хеҙмәттәшлек тураһында ике яҡлы килешеү төҙөлдө.

✓ ***Мосолмандың ураҙа айындағы иң тәүге, иң оло маҡсаты - ай буйы ураҙа тотоу һәм Ҡөрьәнде уҡырға, аңларға, аңлағаны менән ғүмер итергә, тәҡүә булырға өйрәнеү.***



БЫЛ АЙҘА...

# "АТАСАҠ ТАҢ, КИЛӘСӘК ЯҘ ӨСӨН,

## Яҙын япраҡланыр гөл өсөн..."

**Байрамдарға бай, сағыу, ҡояшлы һабанай ҙа килеп етте. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тигәндәй, крәҫтиән өсөн яуаплы осор башланды. Баҡсасылар ҙа оҙайлы ялдарҙы һөҙөмтәле файҙаланып ҡалырға тырыша: ер эшкәртә, ашлай, иртә культураларҙы ултырта.**



Миҙгелдең миҙгелгә тап килмәгән, тәбиғәт ҡанундарының боларған бер заманында Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы (**1**) ла үҙенең элекке оһоллоғон, тантаналығын юғалта төштө, буғай. Хеҙмәт абруйы эш хаҡына ҡарап баһаланған мәлдә был ғәжәп тә түгел, ә шулай ҙа элекке шаулап торған хеҙмәт энтузиазмы, хеҙмәт романтикаһы һағындыра. Фәҡәт тамаҡ ялына эшләүгә ҡайтып ҡалған, йән аҫрау сараһына әүерелгән хеҙмәт менән байрам араһы алыҫлашҡандан-алыҫлаша бара. Хеҙмәт кешеһе лә һөнәрҙәре буйынса касталарға бүленеп ҡарала башланы кеүек, улар араһында "элиталы" (нефть һәм газ өлкәһе эшселәре, мотор эшләүселәр, IT-программасылары һ.б.), уртаса (сауҙа, бюджет өлкәһе) һәм ҡара эшкә ялланып көн күреүсе ҡатламдар барлыҡҡа килде. Эш күләме арта, ә уның өсөн түләү үҙгәрмәүсән дәүмәлгә әйләнде. Хеҙмәт кодексына ла, хеҙмәт кешеһе хоҡуҡтарына ла һан юҡ, эш биреүсе шым-шым ғына үҙенә уңайлы эске корпоратив закондарын булдырыу юлында: хәҙер йәйге ялға сығыу йә булмаһа, Хоҙай һаҡлаһын, сирләп китеү тигән нәмәнең эштән китеүгә сәбәпсе булыуы ла "һә" тигәнсе... Сөнки был бер ҙә генә юғалтыу булмаясаҡ, эшһеҙҙәр менән донъя тулы, теләһә ниндәй шарттарға ла риза булып килергә әҙер торалар: эшкә алһындар ғына. Бизнесмендар, урта һәм бәләкәй эшҡыуарҙар, фермерҙар ҙа ил ҡеүәте өсөн тип түгел, ә шәхси байыу, күберәк килем, үҙ кеҫәһе мәнфәғәтендә тырыша. Шуға күрә, бер заман календарҙа был көн Яҙ байрамы ғына булып тороп ҡалһа ла, аптырарға түгел...

Әммә ләкин "өмөтһөҙ - шайтан" тигәнде лә беләбеҙ, тик ваҡыт-ваҡыты менән барыбер күңелһеҙ уйҙар биләп ала күңелде. Илдә генә түгел, донъя кимәлендәге тотороҡһоҙлоҡтоң шойҡанылыр был. Ә бит яңыраҡ ҡына күпселек тауыш менән ил Президенты итеп һайланып, ҙур ышаныс күрһәтелгән Владимир Путиндың сығыштарын тыңлаһаң, күңел бер талай күтәрелеп, һәүетемсә киләсәккә ышаныс осҡоно ла ҡабынып киткәндәй. Әгәр ҙә ул яңыраҡҡы ғына Мөрәжәғәтнамәһендә һәр беребеҙҙең күҙенә ҡарап, иң тәүге бурысыбыҙ - халыҡтың тормош сифатын яҡшыртыу, тип белдергән икән, тимәк, Америка һәм уның ҡуштандарының тоҙаҡ артынан тоҙаҡ ҡороуына ҡарамаҫтан, үҙендә ил абруйын һәм халыҡ мәнфәғәтен яҡларлыҡ көс барлығына ышана! Нисек кенә булмаһын, илдең тышҡы һәм эске сәйәсәтенең артабанғы йүнәлеш параметрҙары тиҙҙән, май айының тәүге аҙнаһында В. Путиндың инаугурацияһынан (**7**) һуң төҫмөрләнә башлар, шәйт. Хәлдәребеҙ ниндәй генә ҡатмарлы көрсөккә килеп терәлгәндә лә илебеҙ халыҡтарын берләштереүсе илһөйәрлек идеяларыбыҙ менән көслө булыуыбыҙҙы онотмаһаҡ ине. Бынан өс йыл элек кенә Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын тантаналы билдәләү ваҡиғаһы ошо һүҙҙәргә ҡеүәт. Ә "Үлемһеҙ полк" бөтөн халыҡ парады һуң! Иҫ китмәле рухи күтәрелеш, илебеҙ халҡының берҙәмлеккә, тарихы, бөгөнгөһө, иртәгәһе ҡаҙаныштарын, намыҫын һаҡлау һәм яҡлау хаҡына бөйөк күтәрелеш булып ер һелкетмәнеме ул парад?! Быйыл беҙ 1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Германияның фашист илбаҫарҙарын еңеүгә 73 йыл (**9**) тулыуҙы билдәләйәсәкбеҙ. Президенттың тап ошо бөйөк көн алдынан Рәсәйгә, уның халҡына, бөтөн прогрессив кешелек донъяһы мәнфәғәтенә, Ер йөҙөндә тыныслыҡ һәм тотороҡлолоҡ булдырыу юлында тоғро хеҙмәт итеүгә ант биреүе үҙе бер еңеү тантанаһына торошло булыр, тип өмөтләнәйек.

Бөтөн донъя Ҡояш көнөнөң (**3**), Халыҡ-ара кендек инәһе (**5**) һәм Шәфҡәт туташы (**12**), Халыҡ-ара әсәйҙәр (**13**) һәм Халыҡ-ара ғаилә (**15**) көндәренең дә тап ошо айҙа билдәләнеүе бер ҙә осраҡлы түгелдер, сөнки улар ғүмер, тереклек, ғәҙеллек, йылылыҡ, тотороҡлолоҡ һәм именлек символдары бит. Май ахырында һуңғы мәктәп ҡыңғырауы (**25**) сыңын ишетеп тә, берсә һөйөнөрбөҙ, берсә күҙҙәргә йәш алып, моңһоу мәлдәр кисерербеҙ. Хистәр мыҫҡалының һөйөнөстәр кәсәһе тосораҡ та, тулыраҡ та булһын, әйҙә, тип теләйек ысын күңелдән. Ҡыңғырау сыңы именлек һәм тыныслыҡ набатына әйләнеп, бөтөн ҡитғаларҙы айҡаһын, ә йәштәрҙе артабан да белем эстәүгә саҡырып торһон.

Май календарында билдәләнә торған ғәҙәти байрамдарыбыҙ ҙа байтаҡ. Шулар араһынан Бөтөн донъя ирекле матбуғат (**3**), Радио һәм элемтә тармаҡтары эшсәндәре (**7**), Урман ултыртыу (**12**), РСФСР пионер ойошмаһы (**19**), Филолог (**25**), Рәсәй эшҡыуары (**26**), Химик (**27**), Бөтөн донъя китапханасы (**27**), Сик һаҡсыһы (**28**), Халыҡ-ара тәмәкеһеҙ (**31**) көндәрҙең һәр береһе айырым иғтибар менән, төрлө тәрбиәүи саралар үткәреп билдәләнеүгә лайыҡ.

Һабанайҙағы тағы бер ҙур ваҡиға хаҡында айырым әйтеп китеү фарыздыр: **16 майҙа** изге Рамаҙан айы тыуа һәм ураҙа башлана. Мәғлүм булыуынса, был айҙа Ҡөрьәндең изге аяттары индерелә башлай, шуға күрә Рамаҙан иң элек Ҡөрьән айы. Шуның өсөн дә мосолмандың ураҙа айындағы иң тәүге, иң оло маҡсаты - ай буйы ураҙа тотоу һәм Ҡөрьәнде уҡырға, аңларға, аңлағаны менән ғүмер итергә, тәҡүә булырға өйрәнеү. "Әгәр ҙә ғилем алырға теләһәгеҙ, Ҡөрьән уҡығыҙ, сөнки унда тәүгеләрҙең дә, һуңғыларҙың да бөтә ғилеме тупланған",- тип өйрәтә дин ғилеме. Рамаҙан, шулай итеп, һәр ваҡыт ғилемгә өйрәнеү, ғилем алыу айы булараҡ билдәле. Мосолмандың төп ниәттәренең тағы ла береһе - гонаһтарға һәм шайтан ҡотҡоһона бирелеүҙәргә ҡаршы тора белеү. Исламда ураҙа бәндәләрҙә төрлө ҡотҡоларға ҡаршы тороу, гонаһтарға бирелмәү ихтыяры тәрбиәләй. Әгәр ҙә ул Аллаһ тарафынан рөхсәт ителгән хәләл ризыҡтарҙан да тыйылып тора ала икән, тимәк, ул Аллаһ тыйғандарҙан да тыйыла белергә тейеш. Ай буйына һуҙылған ураҙа көндәрендә ул үҙенең әҙәбендә ишәйә башлаған керҙән арына, холҡон камиллаштыра, сабырлыҡҡа өйрәнә. Хәйерле булһын, ҡото, әжере, сауаптары менән килһен Рамаҙан, иншалла!

**Һабанайҙа тыуғандар:**

**1** - рәссам, педагог, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы **Фәүзиә Усмановаға** - 75 йәш (1943).

**6** - М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич исемендәге премия лауреаты **Алмас Әмировҡа** - 50 йәш (1968).

**30** - шағир һәм драматург **Ҡол-Дәүләттең** (Рәмил Ҡолдәүләтов) тыуыуына - 60 йыл (1958-1998).

**31** - ветеринар табип, "Аҡбуҙат" ипподромының баш ветеринары, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре **Хәлис Килдеғошовҡа** - 60 йәш (1958).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Үткән аҙналағы дөйөм ҡала өмәһендә 105 меңдән ашыу өфөлө ҡатнашты. 5,7 мең кеше юл селтәрен таҙартыуға йәлеп ителһә, 1045 берәмек техника сүп-сар сығарҙы. Өмә барышында 412 квадрат метр юл ҡатламы ремонтлана, 4800 кубометр сүп-сар йыйыла, 200-ҙән ашыу ағас һәм ҡыуаҡ ултыртыла.

✓Яҙҙың һуңғы календарь айына ярҡынса һаяу торошо фараздары билдәле булды. "Гисметео Өфө" сервис мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостандың баш ҡалаһында май уртаһында термометр бағанаһы +20 градус билдәһенә етәсәк. Әммә, синоптиктарҙың фараздары буйынса, йылы һауа торошо ай дауамында яуым-төшөм менән оҙатыласаҡ. Ысын ҡояшлы көндәр аҙ буласаҡ - ете-ун градус. Майҙа уртаса һауа температураһы - нулдән 13-15 градусҡа юғары.

✓Республика ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын утилләштереүҙең яңы системаһына күсә. Бының өсөн ул биш территориаль зонаға бүленә. Уларҙың һәр ҡайһыһында ҡалдыҡтарҙы йыйыу, ташыу, эшкәртеү, утилләштереү, күмеү менән айырым оператор шөғөлләнәсәк. Өфө һәм яҡын-тирәләге 14 район беренсе зонаға инә. Был зонаның операторы "Өфө ҡалаһын таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ" МУП-ы буласаҡ. БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығы уның менән 10 йылға килешеү төҙөгән дә инде. Килешеү 2019 йылдың 1 ғинуарына көсөнә инәсәк.

✓Өфөлә Рәсәй Йәмәғәт палатаһының "Берләшмә" төбәк форумы барышында Волга буйы федераль округы төбәктәренән коммерцияға ҡарамаған берләшмә вәкилдәре, шулай уҡ субъекттарҙың Йәмәғәт палаталары етәкселәре илдә социаль тигеҙлек һәм рәсәйҙәрҙе лайыҡлы тормош менән тәьмин итеү темаларын күтәрҙе. Һуңғы йылдарҙа Рәсәйҙә социаль тигеҙһеҙлек нығыраҡ күҙгә ташланыуы, тикшереү мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәй төбәк тигеҙһеҙлеге буйынса донъялағы 82 ил араһында өсөнсө урында тороуы билдәләнде.

✓29 апрелдән Башҡортостанда баҡсасылыҡ ширҡәттәренә автобустар хәрәкәте башлана, тип хәбәр итә республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты. Ун биш маршруттан торған баҡса селтәре Сәрлетамаҡ янында урынлашҡан. Нефтекамала - өс, Салауатта - бер маршрут. Иң оҙон баҡса маршруты - 139-сы "Өфө - Тәкәй" ҡала яны маршруты, уның оҙонлоғо 65,5 саҡрым тәшкил итә. Иң ҡыҫҡа маршрут 65-се "Салауат - Аллағыуат баҡсалары" - 7,4 километр.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Ағиҙел күперендәге ремонт темаһы ла оперативка һайын тигәндәй көн үҙәгенә сығарыла. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә. Ремонт эштәрен июнь башына тамамлау, ә инде хәрәкәтте Ҡала көнөнә асыу күҙаллана.*



ҠЫҪҠАСА

# БЕЙЕЙБЕҘ!

✓ **Өфөлә Мэр кубогына спорт бейеүҙәре турниры үтте.** Ул 2005 йылдан алып ойошторола. Быйыл сарала республиканың Өфө, Октябрьский, Туймазы, Салауат, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Белорет һәм башҡа ҡалаларынан, шулай уҡ Ырымбур, Һарытау, Һамар, Нижегородка, Мәскәү, Силәбе, Пенза өлкәләре, Пермь крайы, Татарстан, Удмурт Республикаларынан 700-ҙән ашыу спорт пары ҡатнашты. Спорт бейеүҙәре менән ҡалала уҙған быуаттаң 80-се йылдары уртаһында ғына шөғөлләнә башлауға ҡарамаҫтан, бөгөн республиканың Бейеү спорты федерацияһына 30 клуб инә, шуларҙың яртыһы Өфөлә урынлашҡан.

✓ **Мәскәүҙә, РФ Йәмәғәт палатаһында Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына әҙерлеккә арналған "Еңеү байрағы 2018-2020" Йәмәғәт мәҙәни-патриотик программаның ойоштороу комитеты ултырышы үтте.** Уның эшендә Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡатнашты. Йыйылыусылар идеологияһы яңы мәҙәни-патриотик стратегияға нигеҙләнеп төҙөлгән атап үтелгән программаның Бөтә Рәсәй штабын, юл картаһын формалаштырыу һәм ойоштороу буйынса фекер алышты. Стратегияның теоретик һәм ғәмәли өлөшө йәштәрҙә илһөйәрлек тәрбиәләүҙе барлыҡ граждандарҙы бергә туплауға йүнәлтелгән. Маҡсаты - илдең һәм һәр төбәктең ҡаһарман данын һаҡлау һәм арттырыу, юғары рухи-этник һәм рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе формалаштырыу, Рәсәй халыҡтарының этник-ара татыулығын, берҙәмлеген һәм дуҫлығын нығытыу.

✓ **Баш ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре яҙғы комплекслы таҙартыу эштәре сиктәрендә махсус бионорд-шампунь ҡулланып, юлдарҙы йыуа башланы.** Ҡала районларын төҙөкләндереү буйынса һәр муниципаль учреждениела техника ике сменала: көндөҙ һәм төнөн эшләй. Һәр 8 кубометр һыуға 5 литр шампунь һалына. Белгестәр уның һөҙөмтәлелеген билдәләй ҙә инде: юлдар һәм бордюрҙар ҡыш буйына ултырған май, бензин, туҙан ҡатламынан тиҙ һәм сифатлы таҙара. Уның тирә-яҡ мөхит, граждандар, автомобилдәр өсөн зыяны юҡ. Шулай уҡ махсус шампунь юлдарға яңы билдәләр эшләүҙе лә еңелләштерә һәм уларҙың хеҙмәт итеү ваҡытын арттыра.

✓ **Баш ҡала фонтандары - граждандарҙың һәм ҡунаҡтарҙың яратҡан урыны.** Бигерәк тә улар эргәһендә ял көндәрендә һәм кискеһен кеше бик күп була. Шуға күрә муниципалитет фонтандарҙы һәм уларҙың тирә-яғын тәртиптә тотоуға ҙур иғтибар бүлә. Бөгөн Өфөлә 19 объект файҙаланыуға әҙер. Улар рәсми рәүештә 1 майҙа асылһа ла, ҡайһы берәүҙәре алдараҡ эшләй башлаясаҡ. Мәҫәлән, С. Орджоникидзе исемендәге Мәҙәниәт һарайы алдындағы музыкаль фонтан 27 апрелдә үк "йырлаясаҡ" һәм төрлө төҫтәре менән тирә-яҡты балҡытасаҡ. Мостай Кәрим исемендәге, Ҡурай, "Мотор эшләүсе" скверҙарындағы фонтандар 28 апрелдә асыласаҡ. 30 апрелдә өфөләрҙең иң яратҡан урындарының береһе булған Салауат Юлаев исемендәге майҙандағы иң ҙур - Европа кимәлендәге фонтан һыуҙары ла күккә ынтылып урғыясаҡ. "Театр", "Орион" скверҙарындағы, "Ете ҡыҙ", "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркындағы фонтандар 1 майҙа эшләй башлаясаҡ.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһе Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың 19 апрелдәге телевидение аша тура бәйләнеше темаһы менән башланды. Муниципалитет башлығы Ирек Ялалов был сараны аҙнаның иң мөһим ваҡиғаларының береһе тип билдәләп, уның барышында Өфөгә ҡағылышлы һорауҙар ҙа булыуына туҡталып китте. "Эфирҙа яңғырамаған мендәрсә һорау артабан беҙгә үтәү һәм яуаптар биреү өсөн төшөрөләсәк. Шуға күрә барлыҡ структура бүлексәләрен, ҡала районлары хакимиәттәре башлыҡтарын, урынбаҫарҙарын һорауҙарҙы айырым контролгә алыуҙарын һорайым. Һәр хеҙмәт улар буйынса аныҡ һәм тиҙ яуап бирергә тейеш", - тине ул.**

# ХАЛЫҠ ӘЙТКӘНДЕ...

## ишетәләр, хәл итәләр

Шулай уҡ Ирек Ишмөхәмәт улы ҡеүәте секундына 20-22 метрға еткән көслө ел арҡаһында баш ҡалала килеп тыуған хәл-торошто анализлап, Мәскәүҙәге фажиғәнән һабаҡ алырға саҡырҙы. Унда көслө ел ныҡлап беркетелмәгән ҡулайламаларҙы ҡуптарып алып ташлау, ағас ҡолау һөҙөмтәһендә үлем осраҡтары ла теркәлде. Өфөлә лә ағастар ҡолау, ботаҡтар һынып төшөү, йорттарҙың фасадынан йөҙләү элементтары, ҡыйыҡ фрагменттарының аҡтарылып төшөү һ.б. осраҡтар күҙәтелде. Старичный урамында электр линияһына ағас ҡолау сәбәпле, шәхси йорттарҙа йәшәүселәр ваҡытлыса утһыҙ ҡалды. Авария-ҡотҡарыу хеҙмәте граждандарҙан алынған мәғлүмәт буйынса бер нисә урынға сығып, хәүеф янаған элементтарҙы алыу менән шөғөлләнде. Ҡыҫҡаһы, тәбиғәт ҡаланың барлыҡ хеҙмәттәрен аяҡҡа баҫтырҙы, бер генә мөрәжәғәт тә иғтибарһыҙ ҡалдырылманы.

Шулай уҡ Ағиҙел күперендәге ремонт темаһы ла оперативка һайын тигәндәй көн үҙәгенә сығарыла. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, әле бында эштәр графикка ярашлы алып барыла, 11-се терәүҙә зыянлаған ялғау алмаштырыла, шулай уҡ бындай эште 1-се, 8-се терәүҙәрҙә лә атҡарырға кәрәк. Ремонт эштәрен июнь башына тамамлау, ә инде хәрәкәтте Ҡала көнөнә асыу күҙаллана.

Ирек Ялалов үткән шәмбе ҡаланың иң "ҡарт" парктарының береһе булған Иван Якутов паркында үткән күсмә кәңәшмә һөҙөмтәләре менән дә таныштырҙы. Мәғлүм булыуынса, Якутов паркын реконструкциялау өс йылға иҫәпләнә. Былтыр бында йәйәүлеләр юлдары реконструкциялана, 1500 метр оҙонлоғондағы велосипед юлы төҙөкләндерелә, Һалдат күленең тирә-яғы һәм аллея тулыһынса яҡтылыҡ сығанағы менән йыһазландырыла. Шулай уҡ ағастар ултыртыла, газондар һалына, клумбалар һәм сәскә түтәлдәре эшләнә. Барлыҡ эштәр ҙә ҡаршылыҡһыҙ мөхитте, йәғни хәрәкәт итеү мөмкинлектәре сикләнгән категория граждандарын иҫәпкә алып, улар өсөн уңайлыҡтар булдырыуҙы күҙ уңында тотоп башҡарыла.

"Парк халыҡ төҙөлөшө ысулы менән реконструкциялана. Ике йыл дауамында алып барылған эштәр халыҡ тарафынан ыңғай ҡабул ителә. Ял итеүсе ғаиләләр, йәштәр, ололар бик күп. Быйыл да реконструкция эштәре дауам итәсәк. Шуны билдәләп китер инем: кәңәшмә барышында йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре һәм халыҡ менән осраштыҡ. Улар паркта төрлө фекерҙәре менән уртаҡлашты, "Салауат Юлаев" хоккей, "Өфө" футбол командаларының фан-зоналарын булдырыу, 3D фонтан асыу, тактиль парк, тирмә ҡуйыу, уҡтан атыу, башҡорт халҡының йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, көнкүреше менән танышырға мөмкин булған этник зона булдырыу һ.б. идеялар тәҡдим итте. Был инициативаларҙы мөмкин тиклем ҡулланырға һәм әүҙем өфөләрҙе хупларға кәрәк. Әлбиттә, беҙ уларға ярҙам итәсәкбеҙ һәм проекттарҙы тормошҡа ашырасаҡбыҙ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ФАЙҘАҺЫ БУЛҺЫН...



**Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Жуйчан ҡалаһының Халыҡ хөкүмәте етәксеһе Чжу Фабин етәкселегендәге рәсми делегация вәкилдәре менән осрашты.**

Әңгәмә барышында Ирек Ишмөхәмәт улы ҡунаҡтарҙы баш ҡаланың иҡтисади, сәнәғәт һәм мәҙәни ҡеүәте менән таныштырҙы, муниципалитеттың туғандаш ҡалалар менән халыҡ-ара бәйләнештәргә ҙур иғтибар биреүен, дүрт ҡаланың - Наньчан, Цицикар, Хэфэй, Шэньян - Ҡытай Халыҡ Республикаһынан булыуын билдәләне. "Беҙ был осрашыуҙың артабанғы хеҙмәттәшлек өсөн ыңғай этәргес биреренә өмөтләнәбеҙ. ҠХР менән бәйләнештәр һәм хеҙмәттәшлек - өҫтөнлөклө һәм төп йүнәлеш булып тора, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды муниципалитет башлығы. - Йәштәр араһында Ҡытайға иғтибар арта. Бер нисә йыл инде Өфө мәктәптәрендә ҡытай теле факультатив рәүешендә өйрәнелә".

Һөйләшеү сиктәрендә Жуйчан ҡалаһы вәкилдәре өсөн йылылыҡ менән тәьмин итеү өлкәһендә Өфөнөң тәжрибәһе файҙалы булыуы билдәләнде. Республика баш ҡалаһында йылытыу миҙгеле 220 көн дауам итә, ә ҡалалағы биналарҙың 98 проценты үҙәкләштерелгән йылытыу системаһы аша тормошҡа ашырыла. Шулай уҡ Чжу Фабин үҙҙәре өсөн мәғариф, ауыл хужалығы һәм сәнәғәт өлкәһендә хеҙмәттәшлек ҡыҙыҡлы буласағын белдерҙе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда Күмертау авиация етештереү предприятиеһы яңы Ка-226Т медицина вертолетын етештерәсәк. Еңел күп маҡсатлы Ка-226Т вертолетының медицина төрө Рәсәй авиацияһында хуплау тапты. Тейешле документ быйыл март айында тапшырылды. Вертолет медицина-эвакуация һәм медицина-реанимация төрҙәрендә сығасаҡ.

✓Өфө, Сибай, Нефтекама, Октябрьский, Межгорье ҡалаларында, Мишкә, Өфө, Бәләбәй, Бишбүләк, Бөрө, Борай районларында "Еңеү өсөн 100 балл" акцияһы үтте. Йыл һайын акция сиктәрендә йөҙ балл йәки юғары балл йыйғандар оҫталыҡ дәрестәре уҙғара һәм өлкән класс уҡыусылары менән имтиханға һөҙөмтәле әҙерләнеү тәжрибәһе һәм серҙәре менән уртаҡлаша, тип хәбәр иттеләр төбәк Мәғариф министрлығында.

✓Башҡортостан ЮХХДИ суд приставтары һәм һалым хеҙмәте менән түләнмәгән штрафтары булған водителдәрҙе асыҡлауға йүнәлтелгән берләштерелгән рейдтар уҙғара. Транспорт ағымында бурыслыларҙы билдәләргә "Юл приставы" автоматлаштырылған комплексы ярҙам итә. Был прибор хәрәкәт иткән автомобилдең номеры буйынса уның хужаһына ҡарата башҡарыу эше барлығын асыҡлай. Система ошо хаҡта тауыш бирә һәм бер үк ваҡытта экранға автомобилдең номерын сығара. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре был автомобилде туҡтатыу өсөн кәрәкле саралар ҡабул итә. Шунан һуң суд приставтары транспорт сараһын ҡулға ала һәм эвакуациялай.

✓25 апрелдә "Юлдаш" радиоһы хеҙмәткәрҙәре Архангел районының Максим Горький ауылында сираттағы акция ойошторҙо. Акция Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 73 йыллығы алдынан уҙғарыла. "Шәфҡәтлелек" ҡарттар һәм инвалидтар өсөн йорт-интернаттағы 125 кеше араһында инде өлкәнәйгән һуғыш балалары, тыл ветерандары йәшәй. Юлдаштар ойошма биләмәһендә алмағастар ултыртты. Үҫентеләрҙе Кушнаренко емеш-ләк культуралары, виноград селекцияһы үҙәгенән, шулай уҡ шәхси баҡсасы Ғәлиә Мөғәллимованан алғандар.

✓2018 йылда навигация осоро күҙалланған ваҡыттан бер аҙна алдан тиерлек асылды - паром кисеүҙәре 25 апрелдә эшләй башланы. Өфөнөң "Йылға кисеүҙәре хеҙмәте" мәғлүмәттәре буйынса, кисеү хеҙмәттәре менән файҙаланған ҡала халҡының күбеһе - ул Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары аръяғында баҡса участкалары хужалары. Улар өсөн ҡалала ете паром кисеүе һәм бер эске дөйөм ҡулланыштағы һыу транспорты маршруты эшләй.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!



**Баш ҡалала Еңеү көнөн байрам итеүгә әҙерлек бер нисә төп йүнәлеш буйынса алып барыла. Беренсенән, ветерандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн лайыҡлы йәшәү шарттары булдырыу; икенсенән, ветерандарҙы, ветерандар хәрәкәте активистарын, оло йәштәгеләрҙе, шулай уҡ ҡала мәктәптәре, урта, һөнәри һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыусыларҙы бөйөк датаға арналған граждандыҡ-патриотик сараларға йәлеп итеү.**

Бөгөн Өфөлә 9649 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны йәшәй, шуларҙың 564-е - һуғыш ветераны һәм инвалиды, 72 кеше "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән наградланған, 68 кеше концлагерҙарҙың балиғ булмаған тотҡоно, 2555 кеше - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың һәм ветерандарҙың тол ҡалған ҡатындары, 6390 кеше - тыл ветераны.

Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының тормош сифатын күтәреүгә йүнәлтелгән саралар маҡсатлы, һәр ветеранға шәхси ҡараш ингеҙендә алып барыла. Бында төп эшмәкәрлек булып ярҙам итер йәштәге балалары булмаған яңғыҙ ветерандарҙың, тол ҡалыусыларҙың фатирҙарын депутаттар корпусы һәм ҡала бюджеты средстволары иҫәбенә ремонтлау тора. Әлегә дөйөм суммаһы 37 миллион һум тәшкил иткән 885 фатир ремонтланған. Комиссия ҡарарына ярашлы, тағы ла 13 ветерандың йәшәгән урынында ремонт эштәрен атҡарыу талап ителә. Мохтажлығы булған ветерандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу федераль бюджет иҫәбенә башҡарыла. Уны ветерандар үҙҙәре һайлай: сертификат алаһы, әллә үҙ милкенә йәки социаль ҡуртым килешеүе буйынса торлаҡ алаһы. Һуңғы ике йылда Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына 85 сертификат тапшырылған.

Бөйөк Еңеүҙең 73 йыллығына Өфөлә тантаналы митингылар, сәскәләр һалыу, рәсми, мәҙәни, спорт, социаль-хәйриә һәм башҡа саралар, хеҙмәт коллективтарында байрам программалары, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарын тәбрикләү тантаналары үтәсәк. Мәктәптәрҙә ветерандар ҡатнашлығында Ҡаһарманлыҡ дәрестәре, ҡаланың иҫтәлекле урындары буйлап экскурсиялар, тематик конкурстар һәм кластан тыш һәм башҡа бик күп саралар, акциялар, конференциялар, фестивалдәр, конкурстар, күргәҙмәләр ойоштороласаҡ.

**9 апрелдән 8 майға тиклем** ҡаланың белем биреү учреждениеларында "Еңеү байрағын ҡаршылау" һәм "Үлемһеҙ полк" Бөтә Рәсәй патриотик эстафеталарын тапшырыу дауам итә.

**24 апрелдән 9 майға тиклем** "Георгий таҫмаһы"н таратыу акцияһы ойоштороla.

**4 майҙа** Ҡала мәҙәниәт һарайында Башҡортостан Республикаһы Хәрби комиссариатының, 63494 хәрби часының (Әлкә) һәм мәҙәниәт усағының тынлы оркестрҙарының "Еңеү йырҙары" тип аталған концерты үтәсәк.

**4 марттан 9 майға тиклем** Ҡала мәҙәниәт һарайы менән Фәрит Камаев исемендәге 2-се Балалар сәнғәт мәктәбе Һуғыш ветерандарының республика клиник дауаханаһында һәм Өфө Ҡарттар һәм инвалидтар йорто-интернатында хәйриә концерттары менән сығыш яһаясаҡ.

**6 майҙа** традицияға әйләнгән 70-се еңел атлетика эстафетаһы уҙғарыласаҡ. Сара быйыл сәғәт 11-ҙә Еңеү паркынан башланып, Орджоникидзе районы урамдары аша үтәсәк.

Шулай уҡ **6 майҙа** сәғәт 4-тә Өфөнөң мәҙәни-ял үҙәгендә инвалидтарҙың "МИР" ҡала үҙәге менән берлектә инвалидтар, һуғыш ветерандары, тыл хеҙмәткәрҙәре өсөн "Тере хәтер" сараһы ойоштороласаҡ.

**8 майҙа** сәғәт 5-тә Өфөнөң мәҙәни-ял үҙәгендә "Иҫләйбеҙ! Данлайбыҙ! Ғорурланабыҙ!" тип аталған байрам концерты көтә.

Бөйөк Еңеүҙең 73 йыллығына арналған төп байрам саралары **9 майҙа**, сәғәт 11-ҙә Еңеү паркында ҡала округы Советы етәкселегенең Мәңгелек утҡа сәскәләр һалыуынан башланасаҡ. Тантананан һуң төп сығыштар Ленин исемендәге майҙанда барасаҡ. Бишенсе йыл рәттән Өфө ҡала хакимиәте "Үлемһеҙ полк" йәмәғәт хәрәкәтендә ҡатнаша. Быйыл ул сәғәт 11-ҙә башланып, Дан бульварынан СССР-ҙың 50 йыллығы урамына тиклем һуҙыласаҡ.

Иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 7-гә тиклем Рус академия драма театры алдындағы майҙанда "Һалдат бутҡаһы" Бөтә Рәсәй акцияһы ойоштороласаҡ. Шунда уҡ Георгий таҫмалары таратыласаҡ, майҙанда хәрби ваҡиғалар сәхнәләштереләсәк.

Сәғәт 5-тән киске 10-ға тиклем ҡаланың профессиональ һәм үҙешмәкәр коллективтары, артистары ҡатнашлығында байрам концертын тамаша ҡылырға мөмкин буласаҡ. Тантаналар киске 10-да фейерверк менән тамамланасаҡ.

Еңеү көнөндә байрам саралары ҡала райондарының барлыҡ майҙандарында ла үтәсәк: Дим районында - Ял һәм мәҙәниәт паркында, Калинин районында - "Моторҙар эшләүсе" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда һәм "Беренсе Май" паркында, Киров районында - Ленин исемендәге паркта, Ленин районында - "Тулҡын" скверы алдындағы майҙанда, Октябрь районы - Мәжит Ғафури исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркында, Орджоникидзе районы - Еңеү паркында, Совет районы - Иван Якутов исемендәге паркта. Барлыҡ район мәҙәниәт йорттарында концерттар ҡуйыласаҡ. 3 майҙа - Федоровка ауылында, 7 майҙа - Иҫке Турбаҫлыла, 8 майҙа - Яңы Черкассыла, 9 майҙа - Нуғайҙа.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫНАН...

**Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе икенсе балалары 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған йә уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынған ғаиләләрҙән, улар мохтажлыҡ кисергән хәлдә, әсәлек капиталы аҡсаһынан айлыҡ түләүҙәргә ғаризалар ҡабул итә. Сертификат хужаларынан 108 ғариза ҡабул ителеп, 90 ғаилә айлыҡ түләүҙәр ала башланы ла инде, тип хәбәр итә БР буйынса РФ Пенсия фонды бүлексәһе етәксеһе Фоат Хантимеров.**

Ғаиләнең бындай түләү алырға хоҡуғын билдәләү өсөн һуңғы 12 айҙағы ғаилә килемен ҡушып, уны 12-гә, шунан яңы тыуған баланы ла иҫәпкә алып, ғаилә ағзалары һанына бүлергә. Әгәр килеп сыҡҡан һан 14 247 һумдан кәмерәк булһа (Башҡортостанда хеҙмәткә яраҡлы граждандың 1,5 йәшәү минимумы) айлыҡ түләү өсөн ғариза яҙырға мөмкин. Ғаиләнең айлыҡ килемен иҫәпләгәндә эш хаҡы, премия, пенсия, социаль пособие, стипендия, һәр төрлө компенсациялар һәм уларҙы раҫлаусы тейешле документтар булған хәлдә, иҫәпкә алына. Ғәҙәттән тыш хәлдәр менән бәйле федераль бюджеттан бер тапҡыр түләнгән матди ярҙам, банк депозиттарынан һәм күсемһеҙ милекте ҡуртымға тапшырыуҙан алынған килемдәр дөйөм килем иҫәбенә инмәй. Пенсия фондына ғаризаны икенсе бала тыуғандан алып йыл ярым ваҡыт эсендә яҙырға кәрәк. Тәүге 6 ай эсендә мөрәжәғәт иткән хәлдә түләү бала тыуған көндән алып иҫәпләнә, ә инде 6 айҙан һуң - ғариза бирелгән ваҡыттан түләнә башлай. Аҡса граждандарҙың Рәсәй кредит ойошмаһында асылған иҫәбенә күсереләсәк. Беҙҙең республикала түләү күләме 2017 йылдың II кварталына ҡарата балалар өсөн тәғәйенләнгән йәшәү минимумы - 8892 һумға тиң.

Айлыҡ түләү балаға 1,5 йәш тулғансы дауам итә, ләкин тәүге түләү осоро бер йылға иҫәпләнгән. Бер йылдан һуң сертификат хужаһы ҡайтанан ғариза яҙырға бурыслы. Әсәлек капиталы тулыһынса файҙаланып бөткән хәлдә йә булмаһа, ғаилә йәшәү урынын алыштырһа һәм балаға 1,5 йәш тулһа, түләүҙәр туҡтатыла.

**РФ Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

## ТАҒЫ ТҮЛӘҮ АРТА...



**"1 июлдән ил һәм ресурстар буйынса уртаса 4 процент тирәһендә үҫеш булыуы мөмкин, һуңғы 2-3 йылда был тармаҡтағы иң түбән артыуҙарҙың береһе", - тип билдәләне РФ Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Михаил Мень "Известия" гәзитенә интервьюла.**

Башҡортостанда торлаҡ майҙаны һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәргә граждандарҙың иң ҙур рөхсәт ителгән сығымдар өлөшө буйынса төбәк стандарттары раҫланған. Бында ғаиләнең уртаҡ килеме иҫәпкә алына: күп балалы һәм тулы булмаған ғаиләләр өсөн - 15 процент, пенсия алыусы яңғыҙ йәшәгән 60 йәшлек ирҙәр һәм 55 йәшлек ҡатындар өсөн - 18 процент, башҡа граждандар өсөн 20 процент. Әгәр был категория граждандар өсөн торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә түләү артып киткәндә, улар субсидия өсөн йәшәү урыны буйынса Республика халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарына һәм бүлектәренә мөрәжәғәт итә ала. Бында граждандар субсидияға дәғүә итеү-итмәүҙәрен үҙаллы тикшерә ала.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Подагра

❖ 100 грамм бәпембә сәскәләрен ваҡ итеп турарға, бер аҙға ултыртып торғас, өҫтөнә сыҡҡансы йод тәнөтмәһе ҡойорға, 4 көн төнәтергә. Кисен подагра шешектәре булған аяҡтарҙы йылы һыуҙа торорға, ҡоророрға, проблемалы урындарға төнәтмәнән сатраш эшләргә. Организм дауаға өйрәнә башлағас, иртән дә ҡабатларға. Дауаланыу курсы - 2 аҙна.

### Һары һыу ауырыуы

❖ Һары һыу ауырыуын (асцит) петрушка дауалай. 800 грамм петрушканы эмаль һауытҡа һалып, 1 литр һөт ҡойорға, ҡайнау хәлена еткерергә, һөҙөргә һәм сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

### Радикулит

❖ 3-4 ҡалаҡ кипкән ҡара мәрүәт (черная бузина) сәскәһен эмаль һауытҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут талғын утта ҡайнатырға ла, ярты сәғәт төнәтергә. Һыуынғас, һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Көн һайын төнәтмәне яңынан әҙерләргә.

### Йүткереү

❖ Йүткереүҙе банан дауалай. 2 ныҡ бешкән бананды эмаль һауытта иҙеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, болғатырға һәм бер аҙ талғын утҡа ҡуйып йылытырға. Бал өҫтәргә һәм йотмолап эсергә.

### Йоҡоһоҙлоҡ

❖ 3 өлөш ҡомалаҡ тубырсыҡтары, 2 өлөш ҡаҙаяҡ (папоротник), 1 өлөш лавр япрағын марлянан тегелгән мендәргә тултырығыҙ һәм йоҡлаған урынығыҙҙа баш осона элеп ҡуйығыҙ.

### Авитаминоз

❖ 600 мл һалҡын һыуға 4 стакан шыршы энәһе, 1 лимон һуты өҫтәргә, 2 көн ҡараңғы урында торорға, көн һайын 1-әр стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Иблестең Әҙәмде һағалауы

Алла: "Эй, Әҙәм, ҡатының менән ожмахта рәхәтләнеп йәшә. Нимә теләйһегеҙ - шуны ашағыҙ. Бер хәсрәтһеҙ, ыҙа-яфалар күрмәй йәшәү өсөн ожмахта һеҙҙең өсөн барыһы ла бар. Тик бынауы ағастың ғына емешен ҡапмағыҙ. Юғиһә, күңелегеҙгә гонаһ алырһығыҙ, үҙ-үҙегеҙгә ҡарата ғәҙел ҡарашығыҙ юғалыр, тыңламауығыҙ арҡаһында яуап биреү язаһына дусар булыуығыҙ бар", - тип бер ағасҡа күрһәтә. Унын ниндәй ағас булыуы тураһында төрлө фараздар бар. Кемдәрҙер уны бер шәлкем йөҙөм булған, тиһә, икенселәре пальма ағасылыр, ти һ.б. Ә ожмахтан ҡыуылған мәкерле, көнсөл Иблес Әҙәм менән Һауанан бик көнләшкән һәм таҫма телләнеп, уларҙы юлдан яҙҙырыу өсөн тыйылған ағастың емешен ашарға өгөтләгән. Шулай итеп, Әҙәм менән Һауа шайтан ҡотортоуына бирелеп, ағастың емешен ашай һәм тәненең емешкә үрелгәндә күренгән яланғас ерҙәрен унын япраҡтары менән ҡаплай. Иблес уларҙы гонаһҡа батырып, Алла биргән ожмах рәхәтлегенән мәхрүм иткәс, Әҙәм менән Һауа ауыр хеҙмәт, ҡайғы-хәсрәттәр менән тулы ергә төшөргә тейеш була. Алланың бер илсеһе: "Һеҙҙең атайығыҙ Әҙәм, кәүҙәгә алтмыш терһәк бейеклегендәге пальмалай мыҡты, ә тәне тотошлай йөн менән ҡапланған ине. Гонаһ ҡылғандан һуң оят ерҙәре асыҡ күренеү сәбәпле, оялыуынан ни эшләргә белмәгән Әҙәмдең Ожмахты ҡалдырып, ергә төшөп барғанында, бер ағасҡа эләгеп тороуын күргән Алла: "Ожмахты ташлауың минән ҡасыуыңмы?" тип һорай. "Юҡ, гонаһ ҡылып, Һинең алдыңда оятлы булғаным өсөн Бөйөк Аллам", ти Әҙәм. Улар шайтан ҡотҡоһона бирелеп, гонаһ ҡылыуҙары өсөн үкенеп, Уны тыңламағандары өсөн Алланың кисереүен үтенәләр. Әҙәм бик ныҡ үкенеүен белдерә һәм Алла уны ғәфү итә.

## Нух бәйғәмбәр тарихы

Һынташтарға табынып, халыҡ динһеҙлек һәм хаталаныуҙар упҡынына тәгәрәгәс, Алла ер халыҡтарына беренсе илсе сифатында Нухты төшөрә. Нухҡа эйәргән халыҡ Бану Расиб, йәғни Расибтың улдары тип аталған.

Ибн-Әббәс һүҙҙәренә ҡарағанда, Әҙәм менән Нух араһында ун быуат ваҡыт үтә һәм ошо арауыҡта Ислам дине хакимлыҡ иткән. Ҡөрьән аятында: "Аллаларығыҙға табыныуҙан бер ваҡытта ла баш тартмағыҙ һәм Суваны, Йагусты, Йәүкәне, Насрҙы ташламағыҙ", тиелә. Аятта телгә алынған был исемдәр Нухҡа эйәргән халыҡтың иң тоғро диндарҙары була. Улар үлгәс, Иблес ҡотортоуы арҡаһында, халыҡ шул изгеләр тере саҡтарында ял итеп ултырырға яратҡан ергә уларҙың исемдәрен ҡушып, таш һындар ҡуя башлай һәм диндән ситләшеү сәбәпле, шул һындарға табынырға ғәҙәтләнә. Мәҫәлән, Вадда исемле изге диндарҙың үлеменә ныҡ ҡайғырған кешеләрҙе күргән мәкерле Иблес: "Унын таш һынын эшләп бирәм, тере сағындағы кеүек табынырһығыҙ",- ти. Кешеләр ризалаша һәм унын аҙҙырыуы арҡаһында Аллаға табынаһы урынға, таш һындарҙы хуп күргәс, Алла уларҙы хаҡ юлға ҡайтарыр өсөн ергә Нухты ебәрә һәм Нух бәйғәмбәр арымай-талмай халҡын фәҡәт Аллаға ғына табынырға өндәй. Ләкин Иблес аҙҙырыуы арҡаһында аңы томанланған күптәр уға һәм диндарҙарға ҡаршы көрәш башлай. Нух бәйәмбәр бик күп йылдар халыҡты Алла юлынан барырға өгөтләй. Аятта: "Нух улар араһында 950 йыл йәшәне... һәм Аллаһы Тәғәләнән килгән туфан һыуы ҡалҡып, улар гонаһлы көйө һәләк булды", тиелә. Нух кәмә төҙөгәндә лә кешеләр мыҫҡыллап көлгәс, ул: "Әгәр һеҙ Алла нимә вәғәҙә итә - шул мотлаҡ буласағын аңламауығыҙҙан беҙҙе мыҫҡыллап маташаһығыҙ икән - беҙ ҙә һеҙҙән көләсәкбеҙ", ти. Шулай итеп, Туфан һыуы ҡалҡҡас, Нух бәйғәмбәр Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы менән ерҙәге төрлө йән эйәләрен артабан үрсетеү өсөн парлап алып ҡотолдора, ә иманһыҙҙар һәм башҡа боҙоҡ күңелле әҙәм аҡтыҡтары барыһы ла һыу аҫтында ҡалып, үлеп бөтә.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘҘӘ...

## диктант һынауын үттек

**Үткән аҙнала Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты ойоштороған "Башҡорт теленән региональ диктант" акцияһы үтте. Диктант яҙыуға быйыл Башҡортостандың төрлө ҡала, ауылдарында ғына түгел, Мәскәү ҡалаһында, Силәбе, Ырымбур өлкәләрендә, Пермь крайында, Ямал-Ненец автономиялы округында, Төркиә, Польша, Болгария илдәрендә йәшәгән милләттәштәр ҙә ҡушылды.**



Дүртенсе тапҡыр үткәрелгән "Башҡорт теленән региональ диктант" акцияһы йола буйынса уны ойоштороусы Башҡорт дәүләт университеты ректоры Николай Морозкиндың сәләмләүе менән башланып китте. "Башҡорт дәүләт университеты Рәсәйҙең иң яҡшы вуздары рәтендә, беҙ ысынлап та төрлө инициативаларҙы күтәрмәләйбеҙ һәм үҫешәбеҙ. Башҡорт телен үҫтереүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ, беҙҙә башҡорт теле буйынса берҙән-бер диссертация советы эшләй. Рәсәйҙә милли телдәрҙе һәм мәҙәниәттәрҙе үҫтереү өҫтөнлөклө бурыс. Туған тел, туған мәҙәниәт, сәнғәт əсə һөтө менән кеше күңеленә һалына һәм тормош көтөү өсөн көс сығанағы булып тора", - тине Николай Данилович.

Диктант яҙырға теләүселәр быйыл да күп булды, Башҡорт дәүләт университетының төп бинаһында ике ҙур аудитория уҡыусылар, белем алған һәм эшләп йөрөгән йәштәр, оло йәштәге кешеләр менән шығырым тулы ине. Ойоштороусылар әйтеүенсә, беренсе йылда диктантты 3505 кеше яҙһа, икенсе йылда 3929, өсөнсө йылда 7741 кеше яҙған. Быйыл туған телде һаҡлауға йүнәлтелгән акцияға ҡушылыусылар һаны тағы ла күберәк булды: 12 меңгә барып етте. Акцияға БР Мәғариф министрлығы ла ҡушылды. Ведомство етәксеһе Гөлназ Шафиҡова БДУ-ға килеп диктант яҙҙы һәм "Теле барҙың - иле бар" тигән хаҡ һүҙҙәрҙе бөтә илгә күрһәтәйек, тигән саҡырыу ташланы. Әйткәндәй, диктант яҙыу тамамланғас, башҡорт теленең киләсәге өсөн борсолған ҡатнашыусылар уға мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыу буйынса бер-ике һорау ҙа биреп өлгөрҙө. Яуаптар ыңғай яңғыраған кеүек булһа ла, йәмәғәтселеккә ата-әсәләр менән тығыҙ эшләргә, аңлатырға һәм өгөтләргә тәҡдим ителде.

Быйыл диктант Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ" китабынан алынған өҙөк буйынса яҙылды, тексты М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының художество етәксеһе Олег Ханов уҡыны. Диктант тамамланғас, бик күп ҡатнашыусылар үҙҙәрен театрҙа тамаша ҡылып ултырған кеүек хис итеүҙәре, моңло тауышты тыңлап яҙыуы һис ауыр булмауы тураһында фекерҙәрен еткерҙе. "Икенсе тапҡыр йәштәр менән бергә диктант яҙырға киләм, былтыр "бишле"гә яҙғайным, быйыл да яҡшы баһа алырға өмөтләнәм", - ти Нәилә Үзбәкова исемле ҡатнашыусы. Унын кеүек йыл да был сараға йөрөгән кешеләр күп булды, шулай уҡ тәүге тапҡыр туған телен белеү кимәлен һынарға теләп килгәндәр ҙә бар ине. Оло йәштәгеләр был сараны йәштәрҙе туған телен өйрәнеүгә, онотмаҫҡа этәргес тип ҡабул итһә, йәштәр унын практик әһәмиәтен баһаланы. "Мәктәптән алып башҡорт теленән диктант яҙған юҡ. "Башҡорт теленән региональ диктант" тап ошо йәһәттән әһәмиәтле, күптән алған белемдәрҙе хәтергә төшөрҙөк", - тине БДУ студенты Гөлдәр Солтангилдина.

Диктант тексы "моң" төшөнсәһен асыҡлауға, кеше булмышына унын йоғонтоһона арналғайны. Китабында бәйән иткән фекерҙәренә өҫтәп, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева туған тел - туған моң, кешелек донъяһына үҙ-ара туғанлыҡ ептәрен таныу өсөн бирелгән иҫ киткес бер мөғжизә булыуы тураһында һөйләне. Ил инәһенең һәр һүҙе диктант яҙырға килгән аңлы, ғәмле, илһөйәр һәм рухлы милләттәштәрҙең йөрәгенә үтеп инмәле булды. Уны онлайн-бәйләнеш аша тыңлай алған һәр аудитория, моғайын, туған башҡорт теленә ҡарата тағы ла иғтибарлыраҡ булырға, үҙен һәм балаларын туған мондан, тимәк, асылынан айырмаҫҡа күңелендә генә ант итеп ултырғандыр.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ЭСӘК АРТЫУ НИМӘ БУЛА?



**Уралдың көньяҡ-көнсығыш итәктәрендә йәшәгән Баймаҡ башҡорттарында ҡышҡылыҡҡа һуғым һуйғанда ҡатын-ҡыҙ "эсәк артырға" йыйыла, йәғни һуғым малының эсәген йыуып-таҙартып, киптерергә элеп ҡуялар. Был эштең эстәлеге - эсәктәрҙе йыуыу, таҙартыу. Тик, нишләптер, халыҡ бер ҡасан ул эште "эсәк таҙартыу" йәки "эсәк йыуыу" тимәйенсә, һаман булһа "эсәк артыу" ти.**

Эҙләнә торғас, был һүҙбәйләнештең мәғәнәһен бик боронғо дәүерҙәрҙә Көньяҡ Уралда йәшәгән һәм аҙаҡ башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашҡан арийҙарҙың (һинд-иранлыларҙың) теленән таптым. Баҡтиһәң, улар "таҙартыу", "таҙалау" тигәнде "арта-", "арт-" тигән икән. Ошо мәғәнәлә был һүҙ санскрит телендә һәм ведаларҙа һаҡланып ҡалған. Баймаҡ (йәғни бөрйән ырыуы) ҡатын-ҡыҙҙары ҡышҡылыҡҡа һуйылған һуғым малының эсәген йыуырға, таҙартырға йыйылышып, "эсәк артырға" йыйылабыҙ, тиҙәр икән, тимәк, халыҡ телендә әле булһа ата-бабаларынан ҡалған бик тә боронғо һүҙ йәшәп ята, тиергә була. Һүҙҙең бындай боронғолоғо әлеге һүҙбәйләнештең йола менән бәйле булыуындалыр. Сөнки ҡышҡылыҡҡа һуғым һуйыу беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән бик боронғо йола. Йола менән бергә һүҙ ҙә килеп еткән һәм баймаҡтарҙың телендә әле булһа һин дә мин йәшәп ята. Тик мәғәнәһе тураһында ла, тарихы тураһында ла уйланыусы юҡ. Уйланған көндә лә тормоштоң көндәлек ығы-зығыһы эҙләнергә, соҡсоноп ултырырға мөмкинлек бирмәйҙер.

Башҡорт Уралда бик боронғо дәүерҙәрҙә формалашҡан һәм бер ҡасан да ошо ерҙәрҙән күсенеп китмәгән халыҡ. Киреһенсә, матур, тыныс тормош эҙләп килеп сыҡҡан төрлө телле халыҡтарҙы яйлап үҙ ҡуйынына һыйындырған. Был туралағы мәғлүмәттәрҙе тарихи дөрөҫлөктө күрә белгән совет һәм Рәсәй археологтары хеҙмәттәренән табырға була. Мәҫәлән, С. Плетнева тигән донъяға билдәле урыҫ археологы башҡорттоң борондан килгән юғары мәҙәниәтен, тотороҡло үҫешен был халыҡтың бик боронғо дәүерҙәрҙә Уралда формалашып, төрлө тарихи осорҙарҙағы ауырлыҡтарға ҡарамайынса, илен бер ҡасан ташлап китмәүе менән аңлата.

"Эсәк артыу" тигән һүҙбәйләнеш тә ошо боронғо мәҙәниәттең бер сағылышылыр.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

ЗАТЫҢ КЕМ?

**Йәй көндәре, 7-8-се синыфтарҙа уҡыған саҡта, тракторсы ярҙамсыһы булып эшләнем. Яланда ҡурай үләне күреп ҡалһам, күңелемдә ниндәйҙер моң сыңлап китер ҙә, шул үләнде өҙөп алып, һыҙғыртып ҡарағы килә башлай торғайны. Күп тапҡырҙар маташҡандан һуң, ҡурайҙа өрөргә өйрәнеп алдым. Ә инде ҡулыма Ғата Сөләймәновтың "Ҡурай" тигән китабы килеп эләккәс, шатлығымдың сиге булманы. Уның ярҙамында бер аҙ көй сығара башланым. Һәр хәлдә, көйгә оҡшашыраҡ ауаз сыҡһа, түбәм күккә тейерҙәй булып ҡыуана торғайным. Ҡурай моңона, башҡорт йырҙарына һөйөү бына шулай бала саҡтан һалынды.**

# МИЛЛӘТТЕ...

## күңелдәге моң билдәләй

Ҡурай моңо, башҡорт халыҡ йырҙары беҙҙең ғаилә өсөн үтә яҡын ине. Күмәкләшеп ашарға ултыра ла, Өфө радиоһынан Мәғәфүр Хисмәтуллин, Ишмулла Дилмөхәмәтов, Рамаҙан Йәнбәков, Ғабдрахман Хәбибуллин йырҙарын, ҡурай моңон кинәнеп тыңлай торғайныҡ. Атайым минең ҡурай менән ҡыҙыҡһыныуымды күргәс, элек өләсәйемдең дә үҙенең бер апаһы менән бергәләп ҡурайҙа уйнауы тураһында һөйләне. "Ҡурайға тартылыу быуындан, ата-бабаларҙан ҡалған", - тиер ине. Миндә генә түгел, ағайым Альбертта ла бар ине был тартылыу. Ул Өфөлә уҡый башлағас та данлыҡлы ҡурайсы Әҙһәм Исҡужиндың ҡурай түңәрәгенә йөрөнө. Шунда оҫтарып алды һәм мине лә өйрәтте. Беҙ уның менән икәүләшеп һыҙҙыра инек ҡурайҙа.



Ҡурайға, боронғо башҡорт көйҙәренә ҡарата һөйөү арткандан-арта барҙы. Шуныһы ғәжәп: ул көйҙәрҙе мин ишетеп кенә өйрәнмәнем, ә тойҙом, йөрәгемдең иң төрөнән сығарып, моңға һалдым. Минең бөтөн булмышым башҡорт моңо менән һуғарылғайны. Мәскәүҙә архитекторлыҡҡа уҡыған осорҙа ла ҡурайым һәр саҡ үҙем менән бергә булды. Иң һағынғаным - башҡорт моңо була торғайны. Минең менән бер бүлмәлә йәшәгән монгол егете лә ҡурай һыҙғыртыуымды яратып тыңлай торғайны. Әле лә ҡурайҙа бер нисә көй уйнап алһам, көйәфем күтәрелеп китә, эшкә илһамым арта.

Илеш районындағы тыуған ауылымдың - Яңы Күктауҙың беҙ йәшәгән урамын "башҡорттар осо" тиҙәр. Әсәйем менән атайым гел генә "Беҙ - башҡорттар" ти торғайны. Әсәйем Әржүдә Ҡәнзелғилем ҡыҙы - Исәмәт ауылынан, бүләр ырыуы башҡорттары нәҫеленән. Мин атайым менән әсәйем әйткәндәрен архив документтары менән дә раҫланым: унда ла беҙҙең аҫаба башҡорттары булыуыбыҙ теркәлгән.

Сығышымды былай ныҡышып тикшереп-төпсөшөүем шунан: беҙ башҡорт булғас, ни эшләп татар телендә Ҡазан дәреслектәрен уҡыйбыҙ, ни эшләп ҡайһы бер ауылдаштар үҙҙәрен татар тип иҫәпләй, тигән һорау борсой ине мине. Ә бит беҙ бала саҡта уҡ ауылыбыҙҙа башҡортлоҡ һаҡланғаны тойола ине. Мәҫәлән, уҡытыусылар мәктәптә әрләй-әрләй беҙҙең һөйләште татарсаға төҙәтәрә торғайны. Ауылыбыҙҙа башҡорттарҙағыса "Тартай", "Котой", "Йүкәгәс", "Вәлид" тигән аралар бар. Йүкәгәс, тигәне ырыу ағасынан килә. Ырыу ағастары башҡорт ырыуҙарына ғына хас күренеш. Тирә-яҡта бик күп топонимик атамаларҙа саф башҡортса "иш" һүҙе бар. Иш тауы, Иш йылғаһы. Иш тауының ике түбәһе бар, Иш йылғаһы ике ҡушылдыҡтан тора. Илеш атамаһының да килеп сығышы "иш"кә бәйләнгән булыуы ихтимал.

Ғалимдар билдәләүенсә, беҙҙең төбәктә борон-борондан башҡорттар йәшәгән: йыланлы, ҡыр-йыланлы, гәрәй, йәнәй, йәлдәк, бүләр, байлар, ҡырғыҙ ырыуҙары төйәге булған был яҡтар. Районыбыҙҙың ун ете ауылы иң ҙур ҡырғыҙ ырыуына ҡарай. Хатта районға исем биргән Илеш ауылы халҡы ла ошо ырыуҙыҡы. Ҡырғыҙ ауылында волость үҙәге урынлашҡан. Атайымдың әсәһе - йыланлы ырыуынан. Ғалим Әнүәр Әсфәндиәровтың мәғлүмәттәрендә беҙҙең ауыл хаҡында былай тип яҙылған: Яңы Күктау ауылында 1796 йылда - 85 башҡорт, 1859 йылда - 63 башҡорт, 1870 йылда - 467 башҡорт, 1917 йылда - 1279, 1920 йылда - 773, 1989 йылда 337 башҡорт йәшәгән. Һуңғы йылдарҙағы кәмеү татарлашҡан башҡорттар иҫәбенә ҡағылғандыр.

Яңы Күктау ауылына биш ғаилә нигеҙ һалған. Уларҙың береһе - минең етенсе быуын ҡартатайым Ураҙман булған. Улар хәҙерге Баҡалы районының Туҡтағол ауылынан күсеп килгәндәр. Иҫке Күктау ауылынан айырылып күсеп килгәндәр, тигән фараз да бар. Дәүләт архивында эҙләнеүҙәрем дә бушҡа булманы. Ураҙмандың улы Шәмсетдин тураһында мәғлүмәттәр таптым. Уның улы Шәрәфетдин, уның улы Фәтхетдин булған. Фәтхетдиндың ун балаһы булған. Уларҙан ҡала минең ҡартатайым Әфсәхетдин Фәтхетдинов 1868 йылда тыуған. Уның улы - минең атайым Рәфәғетдин дә унынсы бала булған, 1917 йылда тыуған. Был мәғлүмәттәрҙе мин: "Ревизская сказка о башкирцах 6-ой юрты, 11 кантона Бирского уезда от 18.06.1850 г." тигән документтан таптым. Артабан аҡтарам документтарҙы. 1896 йылдың 26 майында төҙөлгән бер документ былай тип башлана: "1986 года, мая 26 дня, Уфимской губернии Бирского уезда, Илишевской волости башкиры вотчинники Киргизской дачи, Карабашевской тюбы, деревни Ново-Куктавской, от 191 ревизских душ, 122 старших домохозяев на сходке было 85 человек. Из них 19 расписались..." Ҡул ҡуйған кешеләрҙе ҡарайым: уларҙың дүртәүһе ҡартатайымдың ағай-энеләре. Береһе лә тамға менән ҡуймаған, барыһы ла хәрефтәр менән яҙған. Ауылыбыҙҙа ике мәсет, бер дини училище булған ул заманда уҡ. Ауылдаштарым сәйәси тормошта ла, башҡа сараларҙа ла һәр ваҡыт әүҙем ҡатнашҡан. Ҡартатайым был ваҡытта Польшала 25 йыллыҡ хеҙмәттә булған. Түше тулы миҙалдар һәм ордендар тағып, 13 йыл хеҙмәт иткәс, һаулығы ҡаҡшау арҡаһында өйөнә ҡайтҡан. Әгәр 25 йыл хеҙмәт итһә, атайымдар тыумай ҡалыр ине. Ир-егеттәрҙең иң гәйрәтле сағында сирек быуат хеҙмәт иттереү халҡыбыҙҙың сифатын да ҡаҡшатҡан, һанына ла йоғонто яһаған, әлбиттә. Ҡартатайым Бөйөк Ватан һуғышында Башҡорт атлы кавалерия дивизияһында хеҙмәт иткән. Варшава, Краков, Винницы ҡалаларында һуғышыуы тураһында һөйләй торғайны, рус, поляк, украин телдәрен яҡшы белә ине. Бик матур, һомғол буйлы кеше ине, 88 йәшендә вафат булды.

Баяғы архив документтарынан минең ата-бабаларым аҫаба башҡорттар булғанлығын белгәс, ғәжәпләнеүемдең сиге булманы. Сөнки минең замандаштарымдың байтағы Илеш районы ерҙәрендә аҫаба башҡорттар йәшәүен инҡар итә. Имеш, ысын башҡорттар фәҡәт Урал арьяғында ғына йәшәй. Әммә фактарға күҙ йомоп булмай, архив документтары был хаҡта асыҡ һөйләй. Ә иң мөһиме - халыҡтың холоҡфиғеле, ғөрөф-ғәҙәт-йолалары башҡортса.

Тик ни өсөн, ҡасан беҙҙең төбәктә йәшәгән аҫаба башҡорттар татар теллегә әйләнгән һәм ҡасан, ни өсөн үҙҙәрен татар тип иҫәпләй башлаған? Шул башыма һыймай. Мин үҙем булмышым менән интернационалиспын. Минең дуҫтарым араһында ниндәй генә милләт вәкиле юҡ. Әммә илһам сығанағым - тамырымда, ауыр саҡтарҙа һыйыныр моңом да тамырымда. Быныһы инде минең ҡаныма һалынған. Уйып ҡына ташлай торған нәмә түгел. Тәбиғәт мөғжизәһе. Әгәр мин үҙемдең кем икәнлегемде асыҡламаһам, тәүҙән үк ҡулыма ҡурай алып, күңел йыуатыр сараһының ниҙә икәнлеген асыҡламаһам, күңелемдә бушлыҡ ҡалыр ине. Эс бошорғос был ниндәй бушлыҡтың ниҙән икәнлеген дә белмәҫ инем. Ул үҙ асылыңды юҡһыныуҙан килеп сыҡҡан бушлыҡ икәнлеген аңламаҫ инем. Шөкөр, Хоҙай аралаған мине ошо фажиғәнән.

Тимәк, кешенең милләтен һөйләшкән теле генә билдәләмәй. Кешенең милләтен күңел тойомо билдәләй. Йәһүдтәр, мәҫәлән, ҡайһы төбәктә йәшәһә, шул милләттең телен һәм хатта мәҙәниәтен ҡабул итәләр, шул төбәк мөхитенә яраҡлашалар. Әммә йәһүд булыуҙарынан бер ваҡытта ла баш тартмайҙар. Ә беҙ ни өсөн икенсе милләт мәҙәниәтенә яраҡлашабыҙ? Үҙ тамырыбыҙҙы инҡар итәбеҙ, һанға һуҡмай маташабыҙ? Бөгөнгө көндә минең тыуған яҡтарҙа таланттарға ҡытлыҡ булыуы илһам алыр тамырҙарыбыҙҙың өҙөлөп ҡалыуынан түгелме икән?

Бына ни өсөн мин үҙ тамырҙарымды юллап табып, булмышымдың асылын төшөнгәндән һуң, берсә ҡыуандым, берсә бошондом.

**Рудоль ӘФСӘХОВ,**
**архитектор.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Мөджәддидиә медицина шәйехтәренең татар мөриттәре үксәһенә баҫып тигәндәй, Нәкшбәндиә йәмғиәтенең бер тармағы булған Хәлидиә шәйехтәре килә. Үҙе Мөджәддидиә-Нәкшбәндиәнең ян тармағы ғына булыуына ҡарамаҫтан, Хәлидиә XIX быуатта суфыйсылыҡтың иң тормошсан һәм йоғонтоло төркөмөнә әүерелә. Татар мөхитенә Хәлидиә тәүләп Мәүлән Хәлид Бағдадиҙың Мәккәләге вәкиле Абдулла Мәккиҙең бер хәлфәһе тарафынан индерелә. Был хәлфә Фәткулла бән Сәфәр Ғәли әл Мөнәүәзи булып, 1852 йылда Ҡазан янындағы бер ауылда һикһән йәшендә донъя ҡуйған. Чистайҙан Шәйех Мөхәммәт Закир әфәнде шулай уҡ Хәлидиә пропагандисы булып танылыу тапҡан. Уның тураһында шулай һөйләгәндәр: "Ҡазан тарафтарында Мөхәммәт Закир әфәнденең өҫтөнлөгөн танымаған бер имам да булманы".

Шуға ҡарамаҫтан, Волга-Урал төбәгендә Хәлидиә шәйехтәре араһында башҡорт шәйехе Зәйнулла Рәсүлевтың лидерлығы бәхәсһеҙ. Ырымбурҙа нәшер ителгән "Ваҡыт" журналы Рәсүлевтың вафаты айҡанлы баҫылған некрологта уны "үҙ халҡының рухи короле ине", тип нарыҡлаған. XIX быуаттағы башҡорт һәм татарҙарҙың интеллектуаль-рухи яңырыуын тикшереүсе тарихсылар, был процесс бары тик диндән айырымланған рационалистар тарафынан башҡарылған, тип иҫәпләп, З. Рәсүлевты бер ниндәй нигеҙһеҙ онота килде. З. Рәсүлев үҙ йоғонтоһонон кимәле һәм киңлеге буйынса башҡа күп шәхестәрҙән өҫтөн булды, һәм уның карьераһы Нәкшбәндиә йәмғиәтенең башҡорт һәм татарҙар араһында большевистик инҡилабҡа тиклем үк йоғонтоло булып ҡалыуының дәлиле ул.

Зәйнулла әл Хәлиди, Зәйнулла ишан, Зәйнулла Рәсүлев исемдәре аҫтында билдәле булған Зәйнулла бән Хәбибулла бән Рәсүлдең донъяға килеүе лә сауаплы ваҡытҡа - һижри буйынса 1250 йылда Ҡорбан байрамы көнөнә тура килә (1833 йылдың 9 апрелендә Ырымбур губернаһы Златоуст өйәҙенең Шәрип тигән башҡорт ауылында (хәҙер - Учалы районы. - **Ред.**). Ул ун йәшендә Муйнаҡ (Малай Муйнаҡ. - **Ред.**) ауылында дамелла Мөхәммәт Бохариҙан һабаҡ ала башлай. Зәйнулла, Бохара мөғәллиме вафат булғас, белемен тәрәнәйтеү ниәтендә 1851 йылда Троицкиға китергә рөхсәт алғансы, Муйнаҡта тағы ла ике йыл Яҡуп бән Әхмәт әл Ахундиҙа уҡый. Уның Троицкиҙағы уҡытыусылары араһында Ҡаһирәлә уҡып ҡайтҡан, Ҡөрьән уҡыуҙағы оҫталығы ягынан юғары баһаланған икенсе Таш мәсет имамы Мөхәммәт Шахбән Мираҫ була. Әммә уның Троицкиҙағы төп остазы, беренсе Таш мәсеттең имамы, Бохараның даны сыҡҡан Күклеташ мәҙрәсәһен тамамлаған Әхмәт бән Хәлид әл Минкари була. Талапсан мөғәллим мотлаҡ башҡарылырға тейешле көндәлек биш намаҙ уҡыуҙы үҙенең шәкерттәре менән бергә теүәл үтәгән.

Күрәһең, Зәйнулла уның яратҡан шәкертенә әйләнгән, һәм ул, "Әхмәт бән Хәлидтең эзотерик тәғлимәте буйынса эйәрсәндәренең иң билдәлеһе һәм иң тырышы", тип ҡылыҡһырланған. Зәйнулла бер ни тиклем ваҡыт Стәрлебашта Хәсәнетдин бән Шәмсетдиндә ғәрәп грамматикаһын өйрәнеүен дауам итһә лә, уның дөйөм белем алыуы Әхмәт бән Хәлидтә тамамланған, тип әйтергә була.

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙ белгестәр түгел, бары тик рухлы атай-әсәйҙәр. Шуға, үҙебеҙҙең эргәбеҙгә шундай уҡ атай-әсәйҙәрҙе, белгестәрҙе тупларға тырышабыҙ. Әгәр урындарҙан бәйләнешкә сыҡһалар, бик шат булыр инек.*



# ЙӘШ АТАЙ-

## туған телде

**Башҡортостан мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу буйынса проблемалар килеп сығып, уның тыуыуына баш ҡалалағы "Рус телен яҡлау буйынса ата-әсәләр комитеты" вәкилдәренең ҡәнәғәтһеҙлеге сәбәп булып торғаны асыҡланғас, "Ә ни өсөн Өфөлә башҡорт телен яҡлаусы шундай комитет юҡ?" тигән һорау тыуғайны. Ниһайәт, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендә Республика ата-әсәләр комитеты ойошторолдо. Ошо комитетты ойоштороу инициативаһы менән сығыш яһаусы ныҡлы "өс таған" - "Хазина-Бал" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт хеҙмәткәре Эльвира БАЙНАЗАРОВА, юрист Руслан БИККИНИН, төҙөүсе Радмир МӨХӘМӘТШИН яңы ойошманың маҡсаттары хаҡында һөйләй.**

**Бер төркөм йәш башҡорт атай-әсәйҙәренең энтузиазмы һоҡландыра. Ләкин һеҙҙе башҡалар ҙа ишетһен өсөн үҙегеҙҙең маҡсатты хәҙер ҡысҡырып ишеттерергә кәрәк бит инде...**

**Эльвира:** Шуға ла беҙ Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы Башҡарма комитетына үҙ инициативабыҙ менән килеп, уларҙан үҙ ҡанаттары аҫтына алыуҙарын һораныҡ инде. Аңлау таптыҡ, сөнки беҙ бер үк маҡсатҡа хеҙмәт итәбеҙ бит. Бөгөн ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙең шул тиклем битарафлығы, ысынбарлыҡтан алыҫ тороуы һәм мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу буйынса килеп тыуған проблеманы күрмәүе Ҡоролтайҙы ла борсой. Шундай башҡорт ата-әсәләренең күҙен асыу, телебеҙҙе киләсәк быуынға ла алып барып еткерергә тейешлегебеҙҙе аңлатыу - беҙҙең берлектәге бурыс. Быны мәктәп, ғаилә тәрбиәһе, дәүләт яҡлауы аша эшләргә кәрәк. Ата-әсәләрҙең бер өлөшө уянды, башҡалары әле һаман да йоҡлай. Бөгөн телде һаҡлау һәр беребеҙгә бәйле. Әгәр һәр кем: "Баламды башҡорт телендә уҡытам", - тип ғариза яҙһа, сафтарыбыҙ арта, ул ваҡытта инде дәүләт тә тел уҡытыуҙы иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаясаҡ, тип уйлайым.

**Руслан:** Ғөмүмән, төп маҡсат - туған телде һаҡлап ҡалыу өсөн атай-әсәйҙәр менән эшләү. Мәҫәлән, ауылға ҡайтҡанда аралашҡанда күптәрҙең йә битарафлыҡҡа батҡан, йә төшөнкөлөккә бирелгән икәне күренә: "Беҙҙән генә торһа икән, өҫтән нимә тиҙәр, шуны эшләйҙәр инде", - тип, ҡул һәлендергәндәр. Шуға, барған еремдә: "Һәр кем үҙенән башлаһын, мәҫәлән, һин мәктәпкә барып, баланды башҡортса уҡытыу тураһында ғариза яҙһын, шул турала өс күршеңә әйттең, улар ҙа барып ғариза яҙҙы, улар тағы өсәр танышына әйтте - шулай геометрик прогрессия менән ғаризалар арта", - тип аңлатып йөрөйөм. Ун кешегә әйтеп, уларҙың береһе генә тыңлаһа ла, тимәк, һүҙең, тырышлығың бушҡа булмай.

Мәғариф өлкәһендә генә түгел, ғөмүмән, милләтте яҡлап эш алып барыусы ойошмалар байтаҡ. Әммә власть әллә ишетмәй, әллә ишетергә теләмәй. Власть менән йәмғиәт, халыҡ араһында диалог юҡ. Ауылда халыҡ бөтөнләй битараф: малым бар, ашарға өҫтәлдә икмәгем бар - тағы нимә кәрәк, тигән принцип хөкөм һөрә улар аңында. Шуға ла беҙ халыҡ менән власть араһын бәйләп тороусы, халыҡ менән эшләүсе, уларға ярҙам итеүсе, хоҡуҡтарын, иң элек башҡорт теленең кәрәклеген аңлатыусы звено булырбыҙ, тип уйлайым.

**Барыбыҙ ҙа, балаларыбыҙ туған телде белергә, уҡырға тейеш, тибеҙ, шул турала йыш һүҙ күтәрәбеҙ. Тик ни өсөн башҡаларға ошо хәлдең әһәмиәтен аңлата алмайбыҙ? Сәбәбе нимәлә?**

**Эльвира:** Бөгөн мөхит шундай бит: йәнһүрәттәр ҡараған балаларҙың теле русса асыла, урамда аралашыу рус телендә, мәктәптә аралашыу рус телендә. Мин үҙем 18 йыл Себерҙә эшләп, рус телендә аралашырға өйрәнгәнмен. Бында ҡайтһам, "Апай, башҡортса һөйләшмәсе, шул тиклем көлкө килеп сыға", тип, ҡустыларым минән көлә торғайны. Әгәр туған телендә даими аралашмаһаң, һөйләшмәһәң, тел, һүҙҙәр онотола, аң русса уйлай башлай. Шуға күрә, телде һаҡлау өсөн мотлаҡ мөхит кәрәк. Беҙҙең шул тиклем матур эпостарыбыҙ бар, улар халҡыбыҙҙың тиңһеҙ байлығы. Уларҙы юғалтырға ярамай, уларҙы төп нөсхәһендә уҡып аңларға кәрәк. Сөнки уларҙа ата-бабаларыбыҙҙың быуын-быуындан тапшырған аҡылы, белеме ята. Тел - ата-әсәләр балаларына тапшырған тауышлы сигнал системаһы. Шуға беҙ ҙә ошо тәжрибәне мирас итеп тапшырырға тейешбеҙ. Әгәр ошоно эшләмәһәк, быуындарҙың мәңгелек сылбырын өҙәсәкбеҙ. Был ата-әсәләр өсөн бөгөн иң ҙур яуаплылыҡ.

**Руслан:** Башҡорт - тәбиғәт балаһы, ҡурай тартып, көтөү-көтөү малын әйҙәп, ялан яңғыратып йырлап йөрөгән. Шуға ла телебеҙ бөгөнгө шарттарға яраҡлаша алмайҙыр, тип уйлайым. Сөнки әлеге донъя аҡсаға табына. Элек ауылдарҙа өмәләр үтһә, хәҙер эштәрҙе аҡсаға эшләйҙәр. Балалар бала саҡтан уҡ аҡса тураһында уйлай, ауылда эш юҡ, аҡса эшләү өсөн ҡалаға китергә кәрәк. Ә унда аралашыу теле - рус теле, шуға уның күңелендә, башҡорт теле кәрәкмәй, тигән фекер нығына. Улар шулай тип уйламаған хәлдә лә, төпкө аңда шундай программа ята. Йәнәһе лә, рус теле киләсәктә барлыҡ ишектәрҙе лә асасаҡ.

Әле ҡалала үҫкән тиңдәштәрем - "телһеҙ башҡорттар" менән аралашам, яйлап башҡортса концерттарға, төрлө сараларға йөрөй башланылар. "Яйлап аңлай башланыҡ", тиҙәр. Кемдәр: "Һүҙлек һатып алып, аңламаған һүҙҙәрен ҡарайым, оҡшай башланы башҡорт теле, нилектән икән?"- ти. "Өлкәнәйә бараһың, тамырҙарың, ҡан хәтерен асылыңа тарта", - тием. Әле йәштәрҙең был хәҡиҡәтте аңламауы ла мөмкин, сөнки матди байлыҡ артынан сабалар, ә инде өлкәнәйә башлағас, һуң булыуы ла бар.

**Атай-әсәй балаһында туған телгә һөйөүҙе, тәү сиратта, ғаиләлә һалырға тейеш икәнен аңлағанһығыҙ, үҙегеҙ шулай итәһегеҙ, ошо хаҡта башҡаларға аңлатырға теләйһегеҙ, әммә балалар бөтөнләй икенсе төрлө уйлай һәм ололарҙың ҡарашын ҡабул итергә теләмәй. Ике быуын араһындағы ошо проблеманы нисек бөтөрөргә, нисек яйларға?**

**Эльвира:** Эште бала биләүҙә ятҡанда уҡ башларға кәрәк. Был эш ғаиләлә ата-әсәнең башҡортса аралашыуынан ғибәрәт булырға тейеш. Шул саҡта бала туған тел мөхитендә әсә телен яратып үҫәсәк. Шунан инде башҡортса йәнһүрәттәр, башҡортса йолалар күрһәтеү, башҡорт балалар баҡсалары асыу, мәктәптә башҡортса уҡытыу буйынса дәүләт ярҙамы кәрәк. Республиканың икенсе дәүләт теле булараҡ, ярҙам етди булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына телде һаҡлап алып ҡала аласаҡбыҙ. Балаларҙы өйҙә туған телгә өйрәтеүен өйрәтербеҙ ҙә ул, әммә өйҙән ситтәге мөхиттә ул барыбер башҡаларға эйәрәсәк бит. Шуға, беҙгә йәмғиәттә телгә һөйөү уятырға кәрәк. Башҡорттар үҙ телендә ғорурланып, рәхәтләнеп һөйләшерлек булһын. Былтырҙары-быйылдары нимәгә ҡыуанам - балалар ҙа, йәштәр ҙә бөтөн ерҙә лә тырышып-тырмашып башҡортса һөйләшергә тырыша. Күңелгә рәхәт булып китә.

**Руслан:** Эйе, башҡорт теленә һөйөү ғаиләнән башлана. Ҡайһы берәүҙәр балаларҙың теле русса асыла тип зарлана. Ә бит барыһы ла үҙеңдән тора, тимәк, балаңа тейешле иғтибар биреп еткермәгәнһең, уның менән шөғөлләнмәгәнһең. Көнө-төнө компьютер алдында ултырһын өсөн уға кем компьютер алып биргән, күршеңме ни? Алып биргәнһең икән, унда ултырыу ваҡытын билдәлә. Балаларҙы ҡыҙыҡһындырһаң, улар ҡыҙыҡһынырға ғына тора. Компьютерынан айырып, урамға алып сығып, саңғы-сана шыуғанда, йәйгеһен башҡа уйындарҙы улар менән ҡуша уйнағанда, бала саҡтағы уйындарҙы иҫкә төшөрөп, уларҙың ҡағиҙәләрен аңлатып биргәндә, улар хәҙер ылығырға ғына тора. Әлбиттә, һәр ваҡыт бала менән бергә уйнап йөрөргә ваҡыт булмай, әммә бер башлап ебәрһәң, артабан улар үҙҙәре дауам итә. Шуға күрә, төп тәрбиә ғаиләнән башлана һәм шулай булырға тейеш. Бәләкәй ҡыҙыма 3 йәш, телевизорҙан ниндәйҙер тапшырыу бара. Бала ҡарап торҙо-торҙо ла, "Нишләп апай башҡортса һөйләшмәй ул?" тип һорай. Күрәһең, башына ныҡ һеңдереп ташлағанмындыр инде. Урамда, мәктәптә рус мөхите ҡушыла инде ул, башҡорт мәктәбенә бирһәң дә күбеһенсә русса һөйләшәләр барыбер. Шулай булһа ла, ғаиләлә ныҡлы нигеҙ һалынһа, бала барыбер телде яратасаҡ. Шуға, һәр ваҡыт үҙебеҙҙән башларға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Хөкүмәттән, етәксенән, күршенән көтөп ултырырға кәрәкмәй.

**Радмир:** Әгәр бөтөн нәмәне баланың ихтыярына ҡуйһаҡ, уларға башҡорт теле генә түгел, башҡа фәндәр ҙә кәрәкмәй. Уҡыусыларҙың 20 проценты ғына был тормошта үҙҙәренә нимә кәрәклеген: кем булғыһы килеүен, нисек йәшәргә тейешлеген, нимә менән шөғөлләнәсәген белә, аңлай. Башҡалары битараф. Беҙҙән бит берәү ҙә сит тел булған рус, инглиз телдәрен уҡығың киләме, тип һорамай. Ғөмүмән, тыуғанда бала бер телде лә белмәй тыуа һәм уның менән һөйләшмәһән, ул бер телде лә белмәйәсәк. Шуға, ата-әсәләр менән балалар араһындағы шул проблеманы нисек хәл итеү кәрәклеген тәү сиратта ата-әсә аңларға тейеш. Тел кәрәк, сөнки ул мәҙәниәттең башланғысы. Тап мәҙәниәт хайуан менән кешене айырып тора. Кеше киләсәктә рухи йәһәттән бай булһын өсөн уға мотлаҡ мәҙәниәт кәрәк. Ә башҡорт мәҙәниәтен киләһе быуындарға бары тик башҡорт телендә генә бирә алабыҙ.

**Төп көс әлеге ваҡытта баш ҡалала тупланған, әммә урындарҙа - райондарҙа, ауылдарҙа ла эштәр алып барырға кәрәк. Артабанғы аҙымығыҙҙы нисек күҙаллайһығыҙ? Ойошма төҙөнөк тә тынысландыҡ йәки баш ҡаланан ғына эш ҡушып яттыҡ түгелдер бит?..**

**Эльвира:** Башҡортостан ҙур, уны тиҙ арала ғына урап сығыу мөмкин түгел. Шуға, ойошмабыҙға әүҙем ата-әсәләрҙе саҡырабыҙ, йыябыҙ. Улар үҙ райондарында, ауылдарында беҙҙең менән бәйләнештә эш алып барһалар, яҡшы булыр ине. Ниндәйҙер мәсьәләне хәл итергә кәрәк булһа, беҙ ошо өлкәләге белгестәрҙе алып, барып етеп, бергәләшеп эш башлап китербеҙ, тибеҙ. Хәҙер төпкөл ауылдарҙан да интернет селтәре аша тиҙ генә бәйләнешкә инеү мөмкин. Әлеге көндә барыбер тарҡаулыҡ бар, шул сифаттан ҡотолоп, берләшә башларға ваҡыт. Бәләкәй генә төркөмдәр түгел, ә ҙур ойошма булып, балаларыбыҙҙың башҡорт телен, башҡортса уҡыуын теләйбеҙ, тиһәк кенә ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Беҙҙең талап: балалар баҡсаларында - башҡортса төркөмдәр, мәктәптәрҙә башҡорт кластары булһын, мәктәптән тыш саралар ойошторолһон. Сөнки башҡорт мөхитен булдырыу зарур - унда балалар башҡортса ғына аралашырға тейеш. Милләттең рухын күтәрергә кәрәк.

**Радмир:** Беҙ белгестәр түгел, бары тик рухлы атай-әсәйҙәр. Шуға, үҙебеҙҙең эргәбеҙгә шундай уҡ атай-әсәйҙәрҙе, белгестәрҙе тупларға тырышабыҙ. "Бәйләнештә" селтәрендә телефондарыбыҙ ҙа яҙылған. Әгәр урындарҙан бәйләнешкә сыҡһалар, бик шат булыр инек. Беҙҙән аҡыллыраҡ, беҙҙән рухлыраҡ кешеләр менән республикабыҙ тулы тип уйлайым. Табышайыҡ, берләшәйек, бер-беребеҙгә, туған телебеҙгә таяныс булайыҡ. Ҡулдан килмәҫлек эштәр ҡырырға саҡырмайбыҙ, һеҙ бары тик, балаларымды башҡортса уҡытам, тип ғариза яҙығыҙ,

***Әлеге көндә барыбер тарҡаулыҡ бар, шул сифаттан ҡотолоп, берләшә башларға ваҡыт. Бәләкәй генә төркөмдәр түгел, ә ҙур ойошма булып, балаларыбыҙҙың башҡорт телен, башҡортса уҡыуын теләйбеҙ, тиһәк кенә ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Беҙҙең талап: балалар баҡсаларында - башҡортса төркөмдәр, мәктәптәрҙә башҡорт кластары булһын, мәктәптән тыш саралар ойошторолһон. Сөнки башҡорт мөхитен булдырыу зарур - унда балалар башҡортса ғына аралашырға тейеш. Милләттең рухын күтәрергә кәрәк.***

*✓ Сифат - ул беренсе мәсьәлә, икенсеһе - башҡорт теле уҡытыусылары башҡа уҡытыусылар араһында үҙен икенсе сортлы итеп түгел, ә лайыҡлы тоторға тейеш. Әгәр ул үҙен-үҙе хөрмәт итмәһә, уны башҡалар ҙа хөрмәт итмәй.*



туғандарығыҙҙы өгөтләгеҙ. Беҙгә шул ғына кәрәк.

**Руслан:** Ойошма булараҡ, хатта ябай гражданин булараҡ та, мәҫәлән, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға, Мәғариф тураһындағы законға шундай-шундай төҙәтеүҙәр индерергә кәрәк, тип, инициатива менән сыға алабыҙ. Республика парламенты депутаттарының иһә, артабан закон проекттарын Дәүләт Думаһына тәҡдим итергә мөмкинлектәре бар. Киләсәктә шундай мөмкинлектәрҙе файҙаланырбыҙ тип уйлайым.

**Ысынында, халыҡ бөгөн үҙенең хоҡуҡтарын яҡшылап белмәй, хоҡуҡ даулап йөрөмәй, ғөмүмән, юридик яҡтан хоҡуҡи нигилизм көслө… Мәҫәлән, бөгөн бер генә ҡанун да башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы килмәй…**

**Эльвира:** Мин һеҙҙең менән килешмәйем. Эйе, ҡанундар мөмкинлек бирә, әммә башҡорт телен һәм шул иҫәптән башҡа туған телдәрҙе уҡытыу буйынса норматив акттар, йәғни закондар сиктәрендә эшләнгән өҫтәмә акттар йыш ҡына минең һәм минең баламдың хоҡуғын боҙа. Мин ярамай, тигән рекомендацияһын өҫтөн ҡуйып, "Президент әйтте бит", ти ҙә ҡуялар. Президент - ул Конституцияның гаранты, уның һүҙҙәре бер нисек тә Конституциянан өҫтөн була алмай.

**Беҙҙең Оло Башҡортостан территорияһы ҙур бит, күрше өлкәләрҙә күпме башҡорттар йәшәй, әммә бөгөн улар үҙ телдәрендә уҡыу түгел, хатта өйрәнеүҙән мәхрүм ителәләр…**

**Эльвира:** Беҙ уларҙың да проблемаларын күтәрергә ниәтләйбеҙ. Юҡһа, тотош бер Бөгөн башҡорттарға "Ҡарауыл!" ҡысҡырып, телде ҡотҡарып ҡалырға кәрәк. Бында проблема миндә һәм минең быуынымда. Әгәр бөгөн ошо өҙөлөргә торған нескә епте нығытмаһам, быуындан-быуынға килгән тел менән бәйләнеште өҙәсәкмен бит.

**Радмир:** Башҡорт милләтенән булған таныштарым, дуҫтарым менән, улар туған телен аңламаһа ла, русса һөйләшмәйем, миңә оят. Хатта улар русса һүҙ ҡушһа ла, башҡортса яуап ҡайтарам. Русса белмәгәндән түгел, ә үҙ телемдән икенсе телде өҫтөн ҡуйыбан ул үҙе уҡый башлай. Ана шуны ғәҙәткә индерергә кәрәк. Ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанырға ярамай. Шунан балаларҙы башҡорт балалар баҡсаларына бирергә кәрәк. Әле башҡорт-инглиз балалар баҡсаһы асырға тигән тәҡдим индерҙек. Сөнки рус телен балалар анһат өйрәнә, ә балалар баҡсаһында бөтөн тәрбиә эштәрен инглиз-башҡорт телендә алып барғанда, бала өс телде беләсәк.

**Руслан:** Килешәм. Баланы тәрбиәләйем тиһәң, үҙеңдән башла, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Мин, мәҫәлән, үҙем ата-



# ӘСӘЙҘӘРҘЕҢ...

## яҡлап күтәрелгәне...

туған тел булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙы һорап ғариза яҙҙым. Бер йәки алты бала өсөн уҡытыусы юҡ, тип, факультатив итеп уҡытырға тәҡдим иттеләр. Бында минең хоҡуғым боҙола.

**Руслан:** Закон, ысынлап та, мөмкинлектәр бирә. Әммә күптәр уларҙы файҙаланмай, был беҙҙең дөйөм Рәсәй халҡының менталитеты, наҙанлығы сағылышы. Шуға күрә, алда әйтеп китеүебеҙсә, ата-әсәләр менән эшләргә кәрәк. Башҡорт телен уҡырға теләүсе балалар һаны күп булһа, уҡытыусы ла, кабинет та табыла. Әммә бына Эльвира апай осрағында уның хоҡуғы боҙолған, сөнки "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында"ғы законда "мөмкинлек булғанда" ("при наличии возможности") тигән юлдар бар. Эйе, РФ Конституцияның 68-се статьяһында республикаларҙың үҙ телдәрен уҡытыу хоҡуғы яҙылған, ләкин ни өсөндөр Төп Законды һанға һуҡмай, мәғариф тураһындағы ҡанундың әле әйтелгән юлдарын нигеҙ итеп ала ла ҡуялар.

**Радмир:** Конституцияла ла, мәғариф тураһындағы законда ла күп хоҡуҡтар теркәлгән. Улар беҙгә юлдар, мөмкинлектәр аса, һис ҡаршылыҡ юҡ һымаҡ. Ләкин башҡорт теленә ҡаршы килгән башҡа милләт ата-әсәләре Владимир Путиндың 20 июлдә әйткән, милли телдәрҙе көсләп уҡытырға быуынды юғалтасаҡбыҙ. Мин уҡығанда, уҙған быуаттың 80-се йылдарында, мәктәптә өс параллель класс ине, шуларҙың береһе генә башҡорт класы булды. Хатта Баймаҡта ла, рус телен яҡшыраҡ белер, анһатыраҡ аралашыр, кеше булыр, тип, балаларын рус кластарына бирергә тырышып тора ине атай-әсәйҙәр. Шул синфатарҙа уҡыған балалар бөгөн башҡортса аңлай, әммә һөйләшә белмәй, русса аралаша. Беҙ ҙә ирем менән ошо проблеманы әле саҡ аңлап, хәҙер үҙебеҙҙе көсләп тигәндәй башҡортса һөйләшергә мәжбүр итәбеҙ. Ул миңә, нимә ҡаңғырып алып тик йөрөйһөң, тип аптырай. Башҡорт телен яҡлап йөрөйөм, тием. Башҡорт теленә нимә булған, тип һорай. Ә һин үҙеңдең башҡортса түгел, русса һорау биреп ултырғаныңды аңлайһыңмы, тием. Шуның кеүек, күптәр хатта русса аралашҡанын да тоймай. Мин хәҙер ғаиләмде ҡабаттан башҡортса һөйләшергә өйрәтәм.

уы оят. Атай-әсәйҙәрҙең балаларын туған телендә уҡытырға теләмәүе шулай уҡ оят ғәмәл һаналырға тейеш.

Милләттәштәрҙең күбеһе, беҙ бөйөк халыҡ, беҙҙең шундай батырҙарыбыҙ бар, беҙ берәүгә лә баш эймәнек, тип ҡабатларға ярата. Ә бөгөн ғаризалар яҙып тороп, кемдең телендә уҡыйбыҙ? Шулай булғас, үҙеңде нисек бөйөк халыҡ улымын тип атарға мөмкин!

йымдан күреп, китап уҡырға яратам. Әле өлкән ҡыҙым үҙе уҡый, бәләкәйенә өс кенә йәш, йоҡлар алдынан бер-ике бит булһа ла уҡыйым. "Китап" магазинынан һәр саҡ яңы сыҡҡан балалар китаптары алып ҡайтам, үҙе лә китаптарын килтереп, уҡырға ҡуша. Шуға бөтөн нәмә үҙебеҙҙән тора, тиер инем. Тәү сиратта, үҙеңде тәрбиәләйһең, һиңә ҡарап, бала тәрбиә ала.

***Беҙ, ата-әсәләр, белем биреү эшмәкәрлегендә ҡатнашыусылар. Беҙгә шундай мөмкинлек, хоҡуҡ бирелгән. Йәғни, ата-әсәләр - хеҙмәт күрһәтеүгә заказ бирә, Мәғариф министрлығы - башҡарыусы. Тимәк, беҙ үҙебеҙҙе ҡәнәғәтләндермәгән хеҙмәттәрҙе күрһәтеп, министрлыҡҡа дәғүәләребеҙҙе белдерә алабыҙ. Ҡулланыусы һәр саҡ хаҡлы һәм хеҙмәт күрһәтеүсе уның теләктәрен иҫәпкә алырға, һорауын ҡәнәғәтләндерергә бурыслы.***

**Бөгөн күп ата-әсәләр балаларҙың китап уҡымауына зарлана. Ғаиләлә балаларҙы башҡорт китаптарын уҡырға нисек өйрәтергә? Бының әҙер, барыһы ла ҡуллана алған рецебы бармы?**

**Эльвира:** Мин балаларыма дүрт йәштәренә тиклем көн һайын кискеһен әкиәттәр уҡый торғайным. Бөгөн уларҙы мәктәптә өлгө итеп ҡуялар - грамоталылар. Көн һайын бер үк нәмәне ҡабатлау бала күңеленә һеңә. Шуға ата-әсә бала бәләкәй саҡта уҡ йә башҡортса йәнһүрәт күрһәтергә, йә башҡортса китаптар уҡырға тейеш. Бала үҙе уҡырға өйрәнгәнгә тиклем уҡыһағыҙ, арта-

**Бөгөнгө тел проблемаһы - ул бары тик айсбергтың өҫкө өлөшө генә. Төп проблема - бөгөн үҙен аҡламаған мәғариф системаһында ла икәнен кире ҡағып булмай. Шулай уҡ башҡорт теле уҡытыусыларының эшенә лә ниндәйҙер дәғүәләр белдерелә башланы хәҙер…**

**Радмир:** Эйе, башҡорт теле уҡытыусыларының да төрлөһө бар. Йәшерен-батырыны юҡ, былтырғы уҡыу йылы башындағы башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы шау-шыуҙарға ҡайһы бер уҡытыусыларҙың эшенән ризаһыҙлыҡтар ҙа сәбәпсе булды бит. Ни өсөн беҙҙә Мәғариф министрлығы, Хөкүмәт уҡытыусыларҙың профессиональ кимәле буйынса ҡәтғи талап ҡуймай. Башҡорт теле уҡытыусыһы үҙе телде белмәгән осраҡтар тулып ята. Һөҙөмтәлә, ул уҡытҡан бала мәктәпте алтын миҙалға тамамлай, өлгөргәнлек аттестатында башҡорт теле буйынса 5 билдәһе тора, ләкин ул башҡортса бер һүҙ белмәй. Әгәр телгә шулай төкөрөп ҡарамаһалар, хәл-торош бөтөнләй икенсе булыр ине. Был башҡорт теленә генә ҡағылмай, беҙҙә, ғөмүмән, телдәрҙе уҡытыу методикаһы аҡһай. Күптән түгел генә Өфө авиация техник университетында уҡытҡан инглиз теле уҡытыусыһы менән таныштым. "Мәктәптән инглиз телен белмәй сыҡтым", - тигәйнем, "Хәҙер ҙә шундай кимәл, хатта алфавит белмәй киләләр. Бишенсе курсҡа тиклем алфавит ятлатһаң - һәйбәт", - ти. Шул уҡ хәл рус теле менән - ни өсөн бөгөн рус телен уҡытырға тырышалар, сөнки балалар мәктәптән рус телен йүнләп белмәй сыға икәнен саҡ аңлап ҡалдылар. Тимәк, телдәр уҡытыуға тейешле иғтибар юҡ һәм уларҙы мәктәптән тейешле кимәлдә белмәй сығалар, тиергә мөмкин.

**Руслан:** Сифат - ул беренсе мәсьәлә, икенсеһе - башҡорт теле уҡытыусылары башҡа уҡытыусылар араһында үҙен икенсе сортлы итеп түгел, ә лайыҡлы тоторға тейеш. Әгәр ул үҙен-үҙе хөрмәт итмәһә, уны башҡалар ҙа хөрмәт итмәй, балалар ҙа уны әҙәмгә лә һанамаясаҡ, һөйләгәнен дә тыңламаясаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙен "Мин башҡорт ҡына шул" тип кәмһенеүселәр уҡытыусылар араһында ла осрап тора...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында Эльвира Байназарованың: "Беҙ, ата-әсәләр, белем биреү эшмәкәрлегендә ҡатнашыусылар. Беҙгә шундай мөмкинлек, хоҡуҡ бирелгән. Йәғни, ата-әсәләр - хеҙмәт күрһәтеүгә заказ бирә, Мәғариф министрлығы - башҡарыусы. Тимәк, беҙ үҙебеҙҙе ҡәнәғәтләндермәгән хеҙмәттәрҙе күрһәтеп, министрлыҡҡа дәғүәләребеҙҙе белдерә алабыҙ. Һөҙөмтәлә нисек килеп сыға: беҙ заказ бирәбеҙ һәм уларҙың шарттарына ризалашабыҙ, ә улар бына шулай эшләй алабыҙ, тегеләй эшләй алмайбыҙ, тип, үҙҙәренә уңайлы вариантты һайлай. Әммә был беҙҙе ҡәнәғәтләндермәй, беҙ үҙебеҙгә кәрәкле хеҙмәтте һайларға теләйбеҙ. Әгәр уртаҡ фекергә килә алмайбыҙ икән, тимәк, ҡара-ҡаршы ултырып, һөйләшеүҙәр алып барырға, килешергә тейешбеҙ", - тиеүе барлыҡ һорауҙарға яуап биргән кеүек булды. Ни тиһәң дә, ҡулланыусы һәр саҡ хаҡлы һәм хеҙмәт күрһәтеүсе уның теләктәрен иҫәпкә алырға, һорауын ҡәнәғәтләндерергә бурыслы. Тап ошо ҡараш бөгөн туған телде уҡытыуҙа, уны дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙә, белем биреү процесын башҡорт телендә алып барыуҙы талап итеү йүнәлешендә этәргес көс булып торорға тейештер ҙә.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Баланың холҡо ата-әсәнең икеһенә лә оҡшарға мөмкин, ә интеллект балаға тик Әсәнән (!) генә күсә, тип иҫбатлай генетиктар. Инә ятҡылығындағы 91 көнлөк балаға ҡан аша йән инә.***




## Кеше

*Кешеләргә ҡарап ҡайғым арта,*
*Наҡыҫайҙы әҙәп, самалар.*
*Олимп тауына күтәү ебәргәндәр.*
*Зыяратта бесән сабалар.*
*Мостай Кәрим.*

...Кеше яҡты донъяға ни өсөн килә? Уға тыуған сағында кемдер, ниндәйҙер маҡсат йөкмәтәме? Үҙенең ерҙәге бурысын бәндә нисек төшөнә һәм яҙмышын ни рәүешле билдәләргә кәрәклекте ҡайҙан белергә тейеш? Был иртәмеһуңмы һәр кемдең алдына баҫа торған һорауҙар. Тыуым менән үлем араһы - шул тиклем ҡыҫҡа. Бер ҡараһаң, Ер өҫтөн бүтән бер ҙә күрмәҫ өсөн ҡалдырып китеүгә дусар бәндә тәҡдире - ҡотолғоһоҙ фажиғә, мәғәнәһеҙлек кеүек күренергә һәм кеше күңел төшөнкөлөгөнә, сараһыҙлыҡ хәсрәтенә бирелергә тейеш кеүек. Миллиардлаған йылдар тереклек иткән кешелек цивилизацияһы һаман булһа йәшәүҙең төп мәғәнәһен аныҡ ҡына аңлата алмай әле.

Ә шулай ҙа... Донъялағы иң серле һәм, әйтер инем, иң аңлайышһыҙ субстанция - ул кешенең үҙе. Уй-зиһендән мәхрүм түгел, күрер күҙгә бер-береһенән әллә ни айырылмаған кешеләр солғанышында йәшәйбеҙ беҙ. Бер үк төрлө шарттарҙа формалашабыҙ. Ейгән ризығыбыҙ, кейгән кейемебеҙ оҡшаш. Бер үк мәктәптәрҙә, бер үк программаны үҙләштерәбеҙ. Замандаш булыуыбыҙ сәбәпле, бер үк идеология һәм инаныстар эсендә йәшәйбеҙ. Тик... Нишләп һуң бер-беребеҙҙән бигерәк тә ныҡ айырылабыҙ? Ни өсөн бер-беребеҙҙе аңлай алмауҙан интегәбеҙ, хатта фажиғәләр, һағыш кисереүҙәргә тиклем барып етәбеҙ? Ни өсөн беҙҙең класташтар араһында фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн (блат буйынса дан яулаусыларҙы әйтмәйем) миҙал, орден таҡҡандар, фәндә асыштар яһағандар, әҙәби ижадта, сәнғәттә уңыш яулағандар, композитор, рәссамдар, иген игеүселәр, балалар уҡытыусылар, кешеләрҙе дауалаусылар, малсылар булған кеүек, ҡараҡтар, енәйәтселәр, кеше үлтереүселәр, педофилдар, педерастар (хәйер, һуңғы икәүһе башҡорттар араһында юҡ тиерлек) барлыҡҡа килә һуң? Мин бына ярайһы өлкән йәшкә еткән, ғүмер эсендә байтаҡ кешеләр менән аралашҡан, тормош тәжрибәһе туплаған, хатта ки, үҙ инаныс-кисерештәрем хаҡында китаптар яҙып, күп уҡыусыларҙың фекерҙәремде ҡабул итеүенә өлгәшкән кешемен, әммә, әле булһа, ҡайһы бер яҡшы белəм тип уйлаған кешеләремдең яңынан-яңы, йә ыңғай, йә кире сифаттары асылыуынан аптырашҡа ҡалғаным бар. Күп аралашҡан таныш-белеш, дуҫтар ғына түгел, туғандарыңдың холоҡ-фиғеле лә төрлө-төрлө була, ҡайһы саҡта ошондай аңлашылмаусанлыҡ килешкеһеҙ ситуациялар тыуҙыра. Күп ярҙамыңды күрһәтеп, яуабына ниндәйҙер дәғүәләр ишетеү - рәнйетә. Һин төшөнкөлөккә бирелəһең.

Минең ҡыҙым Неля бер шундай рәнйешем хаҡында уртаҡлашҡанда аңлатҡайны: "Беләһеңме, әсәй, кемдәндер изгелек күргән кеше был хаҡта онотмай ул. Кешенән күргән изгелек төпкө аңда һаҡлана. Әммә изгелекте ҡабул иткән кеше изгелек күрһәтеүсе алдындағы бурысын бер ваҡытта ла ҡайтара алмауын аңлауы сәбәпле, изгелек күрһәткән кешеһенә ҡарата агрессив ҡарашлы була башлай. Был уның, асылда, үҙ бурысынан үҙенең оялыуын танырға көсө етмәүгә бәйле". Бәй, ысынға оҡшаған бит бындай һығымта. Тимәк, кеше зиһене генә түгел, төптәге аңы аша ла идара ителә һәм шул төптәге аң ваҡытываҡыты менән, моғайын, кешенең үҙ иркенән тыштыр ҙа әле, барлығын, ябай төшөнсә түгеллеген белдереп-белдереп ҡуя. Ғөмүмән, күрәһең, кешенең йәмғиәт талаптарына яраҡлашҡан тышҡы тәртибенән былай, эске аңындағы булмышы - асылы, кешенең ысын сифаты булып сыға. Шуға ла бит, эскән кешенең, мейеһе томаланыу сәбәпле, төпкө аңды контролдә тотоу һәләте юғалғандан-юғала бара һәм эскесе ысынында кемлеген йәшерә алмай башлай.

Мин оҙаҡ йылдар бер ҡатын менән дуҫ булдым. Уның хаҡында мәҡәләләр яҙҙым, ғаиләһенең, балаларының проблемаларын белә, ҡулымдан килгәнсә ярҙам итә инем. Ауыр сиргә тарығас (яман сиргә түгел), ҡайһы бер дуҫтарым күтәреп тигәндәй больницанан-больницаға йөрөттө. Ярҙам итте. Теге дуҫымдың шылтыратыуын көттөм. Үҙем шылтыратһам, хәлем хаҡында һөйләргә тура килер ҙә, ул мәшәҡәтләнер, ярҙамға ташланыр, тип йәлләп, тыйыла торҙом. Бер йыл үткәс, бер аҙ кеше була төшкәс кенә шылтыратып ебәрҙем. Күрешкем килеүен, уны һағыныуымды белдерҙем. Яуабы: "Ишеттем мин һинең ауырығаныңды, шылтыратмағас аңлағанһыңдыр, сирле кеше янына барырға теләгем булманы..." Шаңҡып киттем. Бына һиңә утыҙ йыллыҡ әшнәлектең һөҙөмтәһе. Үҙемдең дуҫлығыбыҙ хаҡына ҡылған яҡшылыҡтарым, шулай була тороп та төп башына ултыртылыуым һәм асыҡ ауыҙлығым өсөн үҙемде йәлләү тойғоһо дуҫымдың ҡылыҡтарын барлағанда уның йыш осраҡта эгоист булыуын "иҫбатларға" тотондо. Улары барланып бөткәс, үҙ-үҙемдән "дуҫыма" адвокат эҙләргә тотондом...

Драматургияның төп ҡанундарының береһе булған геройҙың ҡылығындағы мотив, уны тегеләй йә былай булырға этәреүсе сәбәпте табырға һәм дуҫымдың ҡылығын аҡларға кәрәк ине миңә. Оҙаҡ табылманы. Ә мин эске аңымда ҡаҙындым да ҡаҙындым: барҙыр, тап, булмауы мөмкин түгел. Эҙләгән кешегә табыла. Табылды. Эскесе иренән айырылып, икенсе кеше менән яңы тормош башлаған икән. Өр-яңы тормош. Етешлектә. Тимәк, мин, уның оҙаҡ йылдар ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен белеүсе шаһит, уның был тормошонда күҙле бүкән буласаҡмын. Быны ғәфү итергә мөмкин. Дөрөҫ, мин үҙем ундай юлға бара алмаҫ инем дә...

Кеше... Ай-һай ҡатмарлы йән эйәһе шулай ҙа. Уның булмышына ҡан хәтере лә, тарихи хәтер ҙә, милли үҙаң да, йәшәгән замана ла йоғонто яһай. Бәрелештәр, конфликттар тиктомалдан килеп сыҡмай шул. Һәр бер аңлашылмаусанлыҡтың үҙ сәбәбе бар. Һәм алдараҡ телгә алынған һәм унан башҡа бик күп үҙенсәлектәр кешенән кеше формалаштыра, әммә форма үҙе, билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында (һәр хәлдә, мин аңлай алмаған сәбәптәр) донъяны, бүтән кешеләрҙе тик үҙенсә генә ҡабул итергә мәжбүр итә. Әммә мин шундай һығымтаға килдем: кеше кемгәлер яманлыҡ ҡылайым әле тип яман юлға баҫмай. Уны эске аңы, үҙенең хаҡлы булыуына инаныуы (убежденность), ышаныуы теге йәки был юлға, һығымталарға, ҡарарға, аҙаҡ килеп, ҡылыҡҡа этәрә шикелле ул.

Кешенең холҡона уның милли үҙаңы ныҡ йоғонто яһай. Кеше ана ҡарынында уҡ, йә атаһының, йә әсәһенең генә ҡанын ҡабул итә икән. Беҙ йыш ҡына ҡайһы бер кешеләрҙе ҡан буталыуҙан тыуғаны өсөн бер төрләрәк тип яңылышабыҙ. Баҡһаң, бер кешенең ҡаны икенсенеке менән аралашмай икән. Бала ата-әсәһе бер милләттән булһа ла, ҡатнаш милләттеке булһа ла, тик уларҙың береһенең генә ҡанын алып, артабан йәшәүен дауам итә. Әйткәндәй, баланың холҡо ата-әсәнең икеһенә лә оҡшарға мөмкин, ә интеллект балаға тик Әсәнән (!) генә күсә, тип иҫбатлай генетиктар. Инә ятҡылығындағы 91 көнлөк балаға ҡан аша йән инә һәм Аллаһ тарафынан индерелгән шул йән буласаҡ кешенең раса энергетикаһын, милләтенең генетик энергетикаһын да бүләк итеп ала. Был иң тәүге Аллаһ бүләге кешене ғүмере буйы ташламай. Ғөмүмән, йән төшөнсәһенә әле булһа ғалимдар аныҡ ҡына аңлатма бирә алмай. Ислам дине йәндең барлығын инҡар итмәй, уның кеше үткәндән һуң Хаҡ Тәғәләбеҙ ҡаршында яуап бирәсәген иҫкәртә, христиан дине лә йәндең барлығын инҡар итмәй, ләкин христиандар "спасение души" тигән төшөнсәгә ныҡ инана. Кемдән һәм нимәнән ҡотҡарырға кәрәк һуң уны? Күрәһең, беҙҙең кеүек үк, гонаһтан ҡотҡарырға теләйҙәрҙер. Будда берҙән-бер Раббы барлығын танымай. Буддистар йән менән тәндең нирвана аша камиллашыуы, берҙәмлеккә өлгәшеүе өсөн тырыша. Шундай дәрәжәгә еткән Итигелов тигән бер ламаларын ергә күмелгән еренән ҡаҙып алғайнылар, ул хәҙер, тере кеше кеүек, уның хаҡына ҡоролған ҡорамда ултыра. Врачтар ҙа аптыраша. Был ни хәл? Ниндәй рухи көскә эйә булды икән ул Итигелов? Тимәк, рухи юғарылыҡҡа өлгәшеү юлдары күп. Ислам дине ҡушҡан ҡанундар, христиан диненең ҡағиҙәләре һәм башҡа дини конфессияларҙың күрһәтмәләре миф түгел. Тимәк, кешегә инаныс, ышаныстарҙан тыш йәшәргә ярамай. Ләкин йәшәү дауамында кешенең матдимы, рухимы ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирә башлауы арҡаһында, уның яҙмышы, уға юғарынан йөкмәтелгән бурыстарҙан тайпылыуы ла ихтимал. Аллаһ бәндәгә матди ҡиммәттәрҙән тотош азат булыу талабын ҡуймай, әммә кеше 90 процент рухиәткә, 10 процент ҡына ғүмерен матдилыҡҡа йүнәлтергә тейеш, шул талаптарҙың дисбалансы шәхес-ара, хатта илдәр араһындағы килешмәүсәнлеккә, конфликтҡа юлыҡтыра. Ләкин ғәжәп, меңәр йылдар кешегә хеҙмәт иткән дини тәғлимәттәр, кешелек тәжрибәһе, тарихи ҡыйралыштар ҙа кешене матди нәфсенән тыя алмай. Ә бит бәндә йәненең рухи кимәлен камиллаштырыу маҡсатында ергә ебәрелә. Ни өсөн көслө был матдилыҡ инстинкты? Иленә, теленә, милләтенә, диненә, ата-әсәһенә тиклем хыянат итеүгә барып еткән, йәнен иблискә һатып булһа ла байлыҡ артынан ҡыуыусылар бар. Миңә аңлашылмай... Был хәлдәргә мин, нисек кенә гуманист булмайым, үҙ-үҙемдән адвокат таба алғаным юҡ әле.

**(Дауамы бар).**

*ҺАБАҠТАР*

# УМЫРЗАЯ ҒҮМЕРЕ ҠЫҪҠА...



Умырзаяны кем яратмаһын инде! Бигерәк тә ауылда тыуып үҫкәндәр өсөн яҡын ул. Йылының һыуыҡты еңеүен белдергән сәскәне күреү менән йыл һайын бала саҡтың бер көнө иҫкә төшә.

Яҙғы ҡояш нуры аҫтында ер ҡарҙан асыла башлау менән күршетирә ҡыҙҙар менән ауыл осондағы тау битләүенә күтәреләбеҙ. Ер-һыу кипкәнсе көн дә барабыҙ унда. Туп тибәбеҙ, баҫтырыш уйнайбыҙ, талпандан да, сысҡандан да ҡурҡмайбыҙ. Шулай бер көн уйнарға килһәк, тау битләүе тулы һары, зәңгәр умырзая. Уйыныбыҙҙы ла онотоп, сәскә йыя башланыҡ. Бәләкәс кенә устарыбыҙға һыймай башлағас, йүгерә-йүгерә ҡосаҡҡа йыябыҙ. Үәт, әсәй ҡыуанасаҡ, бәләкәй генә ҡыҙҙарым күпме сәскә алып ҡайтҡан, тип беҙҙе һөйәсәк. Тик ашҡынып ҡайтыуыбыҙ бушҡа булды. Әсәй беҙҙе шелтәле ҡараш менән ҡаршы алды. Улай ғына ла түгел, ғүмерҙә булмағанса ныҡ ҡына әрләне лә:

- Умырзаяның ғүмере былай ҙа бер көн. Һеҙ уға шуны ла тойорға бирмәгәнһегеҙ. Тәбиғәт үҙенең матурлығын бер кеше өсөн генә бирмәй. Ул яҡшыға өмөт бүләк итеп, бер көн генә йәшәп ҡала... - бала аҡылы аңламаған тағы бик күп нәмәләр әйтте.

Беҙҙең баштарҙан да нығыраҡ эйелгән умырзаяларыбыҙҙы ҡосаҡлап, бына хәҙер әсәй килер ҙә, сәскәләрҙе йолоп алып быраҡтырыр инде, тип баҫып торабыҙ. Юҡ, әсәй улай итмәне. Һаҡ ҡына алды ла, яртыһын күләгәгә киптерергә һалды, икенсе өлөшөн спиртҡа төнәтеп, ҡараңғы урынға ултыртты. Һуңынан ҡыш буйы уны төрлө сир-сырхауҙан ҡулланғаны, ауыҙҙы сайҡаттырғаны, аяҡ-ҡулға һөрткәне хәтерҙә.

Үҫә төшкәс, умырзаяның яҙ башын, көндәр йылыныуын белдергән, ысынлап та, өмөт бүләк иткән сәскә бүләк иткәнен аңланым. Шулай уҡ Ҡыҙыл китаптан уның егерменән ашыу төрө барлығын, үҫемлектәрҙән ҡиммәтле дарыуҙар эшләнгәнен уҡып белдем. Олоғая килә кеше ғүмере лә, сәскәнеке кеүек, күҙ асып йомған арала үтеүенә төшөндөм.

Әле лә умырзаяларға ғашиҡмын. Әммә уларҙы башҡаса бер ҡасан да өҙгәнем юҡ. Ҡарап ҡына, һоҡланып ҡына яратам...

**Лена СӘЛИХОВА.**

ӨФӨ БАШҠОРТО

**Моғайын, күптәрҙең иҫендәлер, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында баш ҡалала тик Өфө йәштәренән һәм Өфө башҡорттарынан торған "Аманат" төркөмө барлыҡҡа килеүе башҡорт милли эстрадаһында яңы күренеш булғайны. Улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә йәштәр мөхитендә генә түгел, тотош республикала һөйөү яулап өлгөрҙө. Йылдар үткәс, тәүге сирҡаныс алған егеттәр бер-бер артлы үҙҙәренең төркөмдәрен ойоштора башланы - "Ант", "Акйондоҙ", "Ҡурайсы"… Бөгөн редакция ҡунағы - "Ант" төркөмө етәксеһе Алмас ҒАФАРОВ менән башҡорт мәҙәниәте, уның үткәне һәм бөгөнгөһө тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ИЛҺӨЙӘРЛЕКТЕ...

## атай-әсәй балаһына күсерә



**➔ Гәзит уҡыусыларҙы Алмас Ғафаров менән таныштырып тороу кәрәкмәйҙер тип уйлайым, шулай ҙа, атай-әсәйегеҙ, ғаиләгеҙ тураһында бер аҙ һөйләп китһәгеҙ ҙә яҙыҡ булмаҫ. Ғөмүмән, ул ваҡытта ҡалала башҡорт мөхите бик булмаған да, шундай шарттарҙа телде нисек һаҡлап ҡала алдығыҙ?**

- Атайым Айрат Ғафаров та, әсәйем Сәбилә Сөләймәнова ла - сығыштары менән Баймаҡ районынан. Шулай булғас, Илдар ағайым менән ғаиләлә саф башҡортса тәрбиә алдыҡ тип әйтә алам. Сөнки ул ваҡыттарҙа башҡорт балалар баҡсалары юҡ, башҡорт мөхите бары тик ғаиләлә генә ине. Бәләкәй ваҡытымдан уҡ минә атайым иң көслө, бөтөн нәмәне белгән кеше булып тойола торғайны. Ауылда бесән ваҡытында уның көбән ҡойғаны әле лә күҙ алдында. Ул беҙҙе ир-егет эшенә өйрәтеп үҫтерҙе, шуға рәхмәтлемен. Ауылда ябай уҡытыусынан башлап баш ҡалала лицей директоры вазифаһына тиклем үрләне ул. Ә инде әсәйемде республикала белмәгән, хәҙерге йәштәр белмәйҙер, оло быуын уны яҡшы белә, заманында республиканың мәғариф министры булып эшләгән кеше ул.

1975 йылда баш ҡаланың 20-се башҡорт мәктәбенә уҡырға барҙым. Илдар ағайым шул уҡ мәктәптә уҡый ине инде. Ул заманда, дөрөҫөн әйткәндә, телгә ҡарата мөнәсәбәт бик ҡатмарлы ине, хатта урамда ла башҡортса һөйләшеүсегә әллә ҡайҙан икенсе планетанан килгән заттарға ҡараған кеүек ҡаранылар. Әммә атай менән әсәй телгә ҡарата һәр ваҡыт иғтибарлы, телһөйәр булдылар һәм беҙҙән дә шуны талап иттеләр.

**➔ 20-се мәктәп заманында Башҡортостандың баш ҡалаһында башҡорт мөхитле айырым бер утрау кеүек кенә булған…**

- Ысынлап та, шулай. Яңы йылдан һуң хөрмәтле уҡытыусыбыҙ Гөлкәй Сәлмән ҡыҙын һуңғы юлға оҙаттыҡ. Ул беҙҙе башҡорт теленән уҡытты, бик һәйбәт уҡытыусы булды. Уға ни тиклем ауыр булғанын аңлау өсөн бер дәлил килтереү ҙә етә: бөтә Өфөнән йыйылған башҡорт балалары күбеһенсә рус телендә аралаша ине, шул балаларға башҡорт телен өйрәтергә кәрәк. Әммә был белем усағын ойоштороусыларҙың ни тиклем аҡыллы һәм зирәк булғанлығын, алдан күрә белеүсәнлеген 20-се мәктәптең бөгөн, Рәми Ғарипов исемен йөрөткән 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты менән бер рәттән, оҙаҡ йылдар кадрҙар һандалы булып тороуы раҫлай. Тарих ҡабатлана, тиҙәр, әгәр мәктәп асылған ваҡытта башҡа мәктәптәрҙә уҡыусы балалар үҙ-ара русса аралашһа, бөгөн бөтөн ерҙә башҡорт мөхите булып та, мәктәптә балалар үҙ-ара русса аралаша. Бында уларҙың ғәйебе юҡ, сөнки тирә-яҡта булған бөтөн нәмә: интернет, телевидение һ.б. рус телендә. Телевидение-радиола башҡорт каналдары бар, һүҙ юҡ, әммә процент нисбәтенән ҡарағанда, улар ни бары 10 процент самаһы ғына килеп сыға, етерлек түгел. Тимәк, бөтә булған телгә мөнәсәбәт һәм иғтибар ғаиләгә ҡайтып ҡала. Тәү сиратта ул ғаиләлә булырға тейеш. Бөгөн балаларҙың фекерләүе бөтөнләй икенсе, ҡыҙым ҡайтып, русса һөйләй башлаһа, тиҙ генә башҡортсаға бороп ала һалам. Үҙем 20-се мәктәпте тамамланым һәм әле ҡыҙым да унда 1-се синыфта уҡый, шуға сағыштырыу мөмкинлегем бар. Хәҙерге ваҡытта минә мәктәптә күп нәмә оҡшай. Байрамдарҙа килеп инәбеҙ - ҡурай моно ағыла, башҡортса һөйләшәләр. Иртән дәрескә киләбеҙ - балалар биш минут һайын "Хәйерле иртә" тип әйтеп ебәрә. Бында бер миҫал ғына килтергем килә: Өфөлә Блюхер урамында йәһүдтәрҙең синагогаһы, унда үҙҙәренең мәктәптәре бар. Шул белем усағында дәрестәр араһында тәнәфесте белдереп ҡыңғырау шылтырау урынына халыҡ көйҙәре яңғырай. Быны бит беҙҙә лә эшләргә, балаларға һеңдерергә мөмкин. Шулай йәлап ҡына кирбестәрҙе өйөп барһаң, бер килеп ул ныҡлы өйгә әйләнә. Һәр кирбестең үҙенең әһәмиәте бар. Туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә лә шулай.

**➔ Әйтеп китеүегеҙсә, заманында башҡорт мәктәбенә балалар ҡаланың бер осонан икенсеһенә йөрөгән, бөгөн иһә эргәһендә торған мәктәптә башҡорт телен уҡыуҙан баш тарталар, тигән кеүек. Былдай күренештең сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ?**

- Ата-әсәләр менән дә һөйләшкәнем бар, башҡорт мәктәптәренә бирергә теләктәре бар, әммә конкурс ҙур, мәктәптең бөтөн балаларҙы ла уҡытыу ҡеүәте юҡ, ә башҡорт мәктәптәре бик аҙ, тиҙәр. Шуға был проблеманы ла хәл итергә кәрәк, тип уйлайым. Башҡорт балаһының башҡорт мәктәбенә нисәнсе класҡа килеүе мөһим түгел, шул мөхиттә ул тиҙ генә башҡортлоғона ҡайта. Таныштарымдың балаһы урыҫ мәктәбендә уҡыны, 7-се синыфта 20-се ҡала гимназияһына күсте. Мәктәпте тамамлағансы башҡортҡа әйләнде лә ҡуйҙы, сөнки бында икенсе аура, икенсе мөнәсәбәт. Кеше ниндәй мөхиткә эләгә, шунан тора күп нәмә. Шуға күрә ундай ата-әсәләр менән аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк. Һаҙлыҡҡа эләкһәң дә бит, кеше аптырана башлай, сөнки ҡайҙа ғына баҫма - аяҡ бата, һаҙ үҙенә һура. Шул ваҡытта кемдер килеп таяҡ һуҙып, ҡаты ергә тартһа, кеше шул яҡҡа китә лә бара.

**➔ Башҡорт мәҙәниәтендә, аныҡлап әйткәндә, эстрадала, 90-сы йылдарҙағы мөхит менән бөгөнгөһө араһында айырма һиҙеләме?**

- Ул ваҡыттар үҙгәртеп ҡороу башланған саҡ ине, бик матур йылдар булды тип һанайым, сөнки рух йәнһәтенән ныҡ күтәрелеш кисерҙек. Күпме төркөмдәр барлыҡҡа килде, күпме фестивалдәр ойошторолдо - "Аманат", "Урал моно", "Йәшлек-шоу". "Аманат"ты проект итеп 1989 йылда уҡ төҙөнөк, үҙгәртеп ҡороуҙарҙың башы ғына һәм сәхнәгә сығыу ҡатмарлы ине. Сөнки худсовет тигән нәмә булды, был комиссия ентекләп, етди тикшереп кенә сығарҙы. Шуға ҡарамаҫтан, энә күҙенән үтеп, иң беренсе составта Урал Иҙелбаев, Роберт Юлдашев, Ринат Ҡәҙимов, Илдар ағайым менән мин Нефтекама ҡалаһында "Ағиҙел - 90" Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашып, лауреат исеме алдыҡ. Хәҙер ундай исемде еңел генә алалар, ә элек бик ҡатмарлы ине. Шундай ҡаты һайлауға ҡарамаҫтан, ул замандарҙа инструменталь ансамблдәр, төркөмдәр күп ине һәм уларҙың һәр береһенең үҙ милли ижад йөҙө булды. Бөгөн ундай төркөмдәр юҡ, булғандары ла бер йүнәлештә - этно. Һәйбәт йүнәлеш, улар күберәк фольклорға тартыла. Ләкин төрлө жанрҙар буйынса эшләүсе төркөмдәр юҡ тиер инем.

Әйтеп китеүемсә, 90-сы йылдарҙа рухи күтәрелеш репертуар һайлағанда ла уйлап эш итеүҙе талап итте. Концертта 20 йыр икән, шуның 5-6-һы тыуған ер, тел тураһында ине, патриотик тема яңғыраны. Ул беҙҙең өсөн ҡанун була торғайны. Бөгөн патриотик тема юҡ. Быныһы - бер. Икенсенән, музыкаль яҡтан алғанда, оранжировкалар нисек эшләнә - ниндәйҙер билдәле көй, һүҙҙәрен генә башҡортса ҡуялар ҙа - быһа һинә яңы йыр, яңы көй. Хатта шуға барып етеләр - бер өлөшөн сит телдәге бер йырҙан, икенсе өлөшөн - икенсе көйҙән, бергә ҡуштылар ҙа яңы йыр килеп сыҡты. Былдай алым менән илһөйәрлекте күтәрә алмаясаҡбыҙ. Халыҡсанлыҡ, тимәк, ул халыҡ аҡылы, ул борондан килгән, башҡорт халҡының менталитеты ошо халыҡсан көйҙәрҙә ята. Уларҙы республика һәм күрше өлкәләрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙ радио-телевизор аша ишетә, шуға бында талапты һәм сифатты, һис шикһеҙ, күтәрергә кәрәк.

**➔ Күптәрҙе бөгөн "Ант" ҡайҙа булды, тигән һорау борсой…**

- Борсолоусылар булыуы һәйбәт, тимәк, беҙҙе онотмағандар, иҫләйҙәр. Бөгөн Ҡала мәҙәниәт һарайында күбеһенсә ҡала үткәргән сараларҙа сығыш яһайбыҙ. Шул сәбәпле, бәлки, телевидениеға бик күренмәйбеҙҙер ҙә. "Ант"тың хәҙерге составында минең улым Искәндәр ҙә бар. Быйыл төркөм ойошторолоуҙың 25 йыллығына арнап йәнле тауышлы юбилей концертын үткәрергә ниәтләйбеҙ. Шуға, осрашҡанға тиклем, тием.

**➔ Заманында БТВ-медиала ла эшләп киттегеҙ. Ни өсөн был эш тукталып ҡалды? Әллә халҡыбыҙ башҡортса дискыларға ихтыяж кисермәйме, уларға башҡортса йырҙар яҙылған дискылар кәрәкмәйме?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, башҡортса дискылар сығарып аҡса эшләп булмай. Бәлки, шуға күрәләр, телевидение был эште дауам итмәне. Ваҡытында ул файҙа килтермәһә лә эшләп килде. Бөгөн Өфөлә, ҡарап йөрөйөм, башҡортса компакт-дискылар юҡ тигәндәй. Хәҙер халыҡ интернеттан яҙҙырып ала ла, флешкаға туплап, шулай тыңлай. Ләкин дискылар сығарылыуҙы дауам итергә кәрәк, сөнки кибеттәрҙә башҡа телдәрҙә йырҙар дискыны һатыла, ә беҙҙеке булмаһа, был беҙҙең өсөн минус. Был да бик ҡатмарлы, шул уҡ ваҡытта көнүҙәк һәм кәрәкле тема. Компакт-дискылар ҙа китап һымаҡ. Алдың, ҡараның, бәлки, уны тыңламаһың да, яҙыуын уҡының, ундағы мәғлүмәт мейеңә һеңеп ҡалды. Дөйөм алғанда, алға китеш бар, шул уҡ ваҡытта проблемалар ҙа етерлек, һәм уларҙы хәл итергә кәрәк. Сөнки йылғала йөҙгәндә ҡулың, аяғың менән хәрәкәттәр эшләгәндә генә йөҙәһең, хәрәкәтте туҡтатһаң - батаһың. Тормошта ла шуның кеүек, батмаҫ өсөн һәр ваҡыт хәрәкәтләнеү зарур.

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА
әңгәмәләште.

ИНТЕРНЕТТАН



# ДАРЫУ ТӘЬҪИРЕН...

## музыка көсәйтә

■ Ҡан баҫымын нормала тотоп, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһындағы тайпылыштарҙы иҫкәртеп була. Лондондың Империя колледжы ғалимдары ҡан баҫымын нормала тотоуҙың яҡшы ысулын уйлап тапҡан. Был бигерәк тә ҡан баҫымы бер төшөп, бер күтәрелеп яфаланған кешеләргә файҙалы буласаҡ. Ҡан баҫымы вегетатив нервы системаһы менән көйләнә. Әммә ҡайһы бер кешеләрҙә уның эшмәкәрлеге боҙолған була. Ултырған ерҙәренән ҡапыл торһалар ҙа ҡан баҫымдары төшә, сөнки уларҙың нервы системаһы быны контролдә тота алмай. Ындай кешеләргә ҡан баҫымы түбәнәйгән һайын 480 мл һыу эсергә кәңәш итә ғалимдар. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был ысул бик файҙалы. Быға тиклем Уестмид институты ғалимдары бөйөр поликистозы менән сирлеләргә һыу ярҙам итәсәген асыҡлағайны. Тыумыштан килгән был ауырыуҙы әлегә дауалап булмай. Патологик процестар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән эсендә шыйыҡлыҡ булған хәүефһеҙ шештәр күбәйеп, бөйөрҙәң сәләмәт тукымаларын емерә һәм бөйөр яйлап эшмәкәрлеген юғалта. Белгестәр әйтеүенсә, ябай һыу бөйөрҙә ошондай шештәрҙең үрсеүенә юл ҡуймай. Әлеге мәлдә 240 кеше һынауҙарҙа ҡатнаша, уның һөҙөмтәләре 2020 йылға әҙер буласаҡ.

■ Сан-Паулу университетында үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, юғары ҡан баҫымын төшөрөү өсөн дарыу ҡабул иткәндән һуң бер сәғәт классик музыка тыңлаһа, ул кешенең йөрәк тибеше яйлана. Музыка дарыуҙың тәьҫирен көсәйтә, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа юғары ҡан баҫымы менән даими яфаланыусы 37 өлкән кеше ҡатнаша. Улар быға тиклем 6-12 ай дауамында гипертониянан дауаланған була. Табиптар үҙҙәренә тәғәйенләгән дарыуҙарҙы эскәндән һуң, улар 60 минут буйына инструменталь музыка тыңлаған. Уларҙың йөрәк тибеше йышлығын 20, 40, 60 минуттан һуң үлсәп ҡарағандар. Экспериментты 48 сәғәттән һуң тағы ҡабатлағандар. Сағыштырыу өсөн ҡайһы берҙә дарыу ҡабул иткәндән һуң музыка тыңламағандар, бары тик ултырып торғандар. Ғалимдар билдәләүенсә, музыка юғары ҡан баҫымынан булған дарыуҙарҙың тәьҫирен күтәргән. Ыңғай һөҙөмтә музыканы 15 минут тыңлағас уҡ күренгән. Был "гиҙеүсе нервы" - парасимпатик нервы системаһынының төп нервыһын әүҙемләштереү менән бәйле, ти белгестәр.

■ Ологая барған һайын күптәр йөрәк сәләмәтлеге тураһында уйлана башлай. Швед ғалимдары был мөһим аҡҙаны һаҡларға өйрәтә. Бактиһән, аҙнаһына бер нисә порция сәтләүек ашап, аритмия барлыҡҡа килеү хәүефен түбәнәйтеп була икән. Ә был киң таралған патология инфаркт менән йөрәк етешмәүсәнлегенә килтереүе ихтимал. Сәтләүектәр ғүмер оҙайлығына ла ыңғай тәьҫир итә. Һынауҙарҙа 61 мең кеше ҡатнашҡан, уларҙың йәше 45 йәштән 83 йәшкә тиклем. 17 йыл буйына ғалимдар уларҙың туҡланыу рационын һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сәләмәтлеге күҙәткән. Был туҡланыу менән йөрәк сирҙәре араһында бәйләнеште асыҡларға булышлыҡ иткән дә инде.

ЗАМАН КҮРЕНЕШТӘРЕ

# АҠСАҢ БУЛҺА...

## файҙалы эшкә йүнәлт



**Бөгөн муниципаль райондарҙа лайыҡлы тормош булдырыуға йүнәлтелгән федераль һәм республика программалары тормошҡа ашырыла, биләмәләрҙең социаль именлеге, иҡтисади үҫеше өсөн инвестициялар йәлеп итеү ҙә һөҙөмтәле алымдарҙың береһе булып һанала. Әммә инвесторҙарға бик үк ышанып етмәү, уларҙы үҙ кеҫәһен генә ҡайғыртыусылар тип иҫәпләү күренеше хөкөм итә әле йәмғиәтебеҙҙә.**

### Ауылды үҙ итәләрме?

Ә үҙидаралыҡ органдары инвестицияларҙы ниндәй юлдар менән йәлеп итә һуң? Мәҫәлән, инвесторҙар менән эшләү, ҡуйылған бурыстарҙы үтәү өсөн беҙҙең Белорет районында бөтә шарттар ҙа бар, бының өсөн ер участкалары ла, газ да, электр энергияһы ла, һыу ҙа етерлек, әммә барыһы ла улар менән дөрөҫ файҙалана беләмे? Бының өсөн уларҙың мөмкинлектәре бармы? Бөгөн ауыл хакимиәттәренең был йәһәттән әүҙемлек күрһәтергә тырышыуы әллә ни һөҙөмтә бирмәй, уңышлы инвестицион климат булдырыуҙы юғарыраҡ органдар ғына хәл итә тип тә аңлатырға тырышалар. Был, бәлки, ниндәйҙер дәрәжәлә дөрөҫтөр ҙә, сөнки ауыл хакимиәте башлыҡтарына халыҡтың етеш тормошо, һаулығы, белем алыуы, ял итеүе кеүек мәсьәләләр менән бергә, медицина, мәғариф, мәҙәниәт учреждениеларын тотоу, халыҡты ут-һыу, газ менән тәьмин итеү, көнкүреш ҡалдыҡтарын утилләштереү проблемаларын да ҡайғыртырға тура килә. Ошо социаль баҫым уларға инвестицион сәйәсәт алып барыуҙа ҙур ҡатмарлыҡтар тыуҙыра ла инде, сөнки былар ҙур сығымдар талап иткән мөһим мәсьәләләр. Уны хакимиәт йә үҙ кеҫәһенән сығарырға, йә булмаһа, башҡа ҙурыраҡ проекттарға тотонмайынса, тапҡан инвесторҙарҙы ошо эшкә йәлеп итергә мәжбүр. Бында шуныһы бер аҙ үкенесле: һалынған аҡса булғанды тәртиптә тотоуға ғына китә, ә уны үҫтереүгә, модернизацияларға түгел. Шуның өсөн дә хакимиәттәр башлыса көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтелгән проекттарға ғына инвесторҙар эҙләргә мәжбүр, ә ниндәйҙер йүнәлештә үҫешеү өсөн түгел. Әммә бының өсөн дә башты эшләтергә, кәрәкле кешеләр менән бәйләнеш булдырыу өсөн әллә ниндәй сүрәттәргә инергә тура килә. Ғөмүмән, бөгөн инвесторҙар менән бәйләнеш булдырыуҙың ниндәй дәрәжәлә файҙалы булыуы тураһында бәхәстәр күп. Ауыл хакимиәте башлыҡтарының күбеһе инвестициялар менән эшләүҙе килеменә ҡарағанда мәшәҡәте күберәк тип һанай. Бында, ҡайһы берәүҙәр әйткәнсә, мотивация булмау ғына сәбәп түгел, тәү сиратта, тәжрибә кәрәк. Шулай уҡ юғары власть һәм төрлө күҙәтеү органдарына аяҡ-ҡулдарҙың бәйле булыуынан да күп нәмә тора. Уңышлы инвестицион мөхит булдырыу өсөн урындағы властарҙың ысынлап та бер ниндәй ҙә көс-көҙрәте юҡмы ни?

***"Туҡтауһыҙ ярҙам һорап, кеше ҡурҡытмайык", тигән фекерҙә урындарҙа инвестициялар менән эшләү өлкәһендә етерлек тәжрибәһе булған Сермән ауыл хакимиәтенең элекке башлығы Айытбай Әйүпов:***

- Хакимиәттәрҙең кеҫәһе таҡыр булыуы хроник сир кеүек, шуға күрә ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн инвесторҙар йәлеп итеү иң уңышлы юл. Әммә был да барыһының да ҡулынан килерлек түгел, - ти Айытбай Зәбир улы. - Бының өсөн хакимиәт биләмәһенең аныҡ үҫеш планы булырға тейеш, биләмәнең географик урынын, демографик хәлен, тәбиғи-климатик торошон, ресурстар сығанағын да белеү мөһим. Был факторҙарҙы иҫәпкә алмайынса, әллә ни эш ҡырып булмай. Нимәнелер үҙгәртә алған хәлдә лә әллә күпме ваҡыт, сығым талап ителә. Оҙаҡ йылдар ауыл хакимиәте башлығы булып эшләү тәжрибәмдән сығып, халыҡ менән диалог булдыра, уларҙы ҡыҙыҡлы идеялар менән ҡыҙыҡтыра белеүҙең, инициативалы кешеләрҙе маҡсаттарын тормошҡа ашырырға ярҙам итеп ебәреүҙең дә мөһим фактор булыуын беләм. Кемдеңдер идеяһын тормошҡа ашырып, үҙенән дә ҡайһы бер проблемаларыңды хәл итеп ҡалыу өсөн бер туҡтауһыҙ ярҙам һорап, потенциаль инвесторҙарҙы ҡурҡытырға ярамай. Киреһенсә, уларға ҡыҙыҡһыныу күрһәтәләр, улар менән бер һүҙҙән булыу мөһим. Аяғына ныҡлы баҫҡан эшҡыуарҙар менән уртаҡ тел таба белеү ҙә кәрәк. Ауыл яҙмышын ҡайғыртҡанда уларҙы ошо ауылдың хужаһы, уның киләсәге өсөн яуаплы кешеләр итеп күрһәтә белергә кәрәк, ә бер туҡтауһыҙ теләнселәп ултырырға түгел. Етәксе булып эшләү дәүеремдә биләмә халҡына уңышлы шарттар булдырыу өсөн ситтән килгәндәрҙә лә үҙебеҙгә эйәләштерергә тура килде. 2000 йылдар башында Силәбенән мәрмәр карьеры асырға теләгән инвестор менән оҙаҡ ваҡыт бер ниндәй ҙә бәйләнеш булдырырға теләмәнем. Ул ваҡытта Урындағы инициативаларға ярҙам программаһы ла юҡ ине әле. Ауылда халыҡты эҫәр һыу менән тәь-

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

**Байығыуҙың беренсе ысулы: "Көшөлөктәге ун һумдың туғыҙ һумын ғына тотонорға өйрән".**

Эйе, беҙ, аҡса тураһында һөйләшеү - ул әҙәпһеҙлек, тигән рухта тәрбиәләнгән быуын. Ләкин бөгөн барыһы ла үҙгәрә: милләтебеҙҙең сәскә атыуы беҙҙең һәр беребеҙҙең финанс яғынан ныҡлы булыуына ла бәйләнгән икәнен әле килеп аңлап ултырыуыбыҙ. Беҙ уңышлы кеше булырға ынтылабыҙ, ләкин пландарыбыҙ һәм маҡсаттарыбыҙ "аҡсаһыҙлыҡ" тигән кәртәгә бара ла терәлә. Ошондай хәлдән нисек сығырға, нисек финанс азатлығына өлгәшергә? Һеҙгә тәҡдим ителә торған "Вавилондың иң бай кешеһе" исемле китаптан өҙөк ошо һорауҙарға яуап биргәндәй. Боронғо донъянын уңыш серҙәре сағылдырыла бында.

Боронғо Вавилон донъялағы иң бай ил була. Бының сере ябай: был ил кешеләре беренселәрҙән булып байлыҡҡа нисек ирешеү тураһындағы белемде өйрәнә башлай. Ул былай була.

Вавилон батшаһы Саргон яуҙан ҡайтып төшһә, ҡалаһындағы хәлдең үҙгәргәнен күрә. Эшселәр эшһеҙ ҡалған. Сауҙагәрҙәрҙең заказсылары аҙайған. Фермерҙар үҙ продукцияһын һата алмай. Халыҡтың был продукттарҙы һатып алырлыҡ аҡсаһы юҡ.

- Ҡайҙа булған һуң дәүләт эсендәге ул аҡсалар? - тип һорай шунда Саргон үҙенең вәзиренән.

- Ул аҡсалар ҡалалағы бер нисә бай кешенең мөлкәтенә әйләнгән, - ти вәзир.

- Ни өсөн ул аҡсаларға бер нисә кеше генә хужа була алған һуң?

- Сөнки улар байлыҡҡа өлгәшеү юлын белә, - ти вәзир. - Ләкин уларҙы бының өсөн генә ғәйепләп булмай бит. Кемдеңдер ғәҙел эшләп тапҡан аҡсаһын тартып алып, аҡсаһыҙҙарға биреү ғәҙелһеҙлек буласаҡ.

- Ә ниңә, бөтә кешеләр ҙә байығыу юлын белмәй ҙаһа!?

- Ләкин быға өлгәшеп була, - тип тағы ҡаршы төшкән вәзир. - Тик шул белемгә өйрәтеүсене табырға кәрәк.

- Беҙҙең ҡалала байығыу юлын кем яҡшыраҡ белә һуң?

- Аркад, әлбиттә. Вавилондың иң бай кешеһе.

- Әйт, ул иртәгә миңә килһен...

Икенсе көнөнә 70 йәштә булыуына ҡарамаҫтан үҙен йәштәрсә еңел тотҡан Аркад батша эргәһенә килә.

мин итеү өсөн скважина быраулауға булған аҡсаны ҡырып-һепереп, халыҡтан аҡса йыйып та эш сығара алмаған, киттем әлеге эшҡыуарға. Ябай ғына башҡорт егете булып сыҡты ул. Баҡтиһәң, әлеңге стереотип, йәғни ситтән килгәндәрҙе ҡабул итмәү, яңылыш фекер тыуҙыра икән. Шулай дуҫлашып, мин уға, ул миңә ярҙамлашып йәшәп алып киттек. Бөгөн унда беҙҙең ауылдан ғына түгел, хатта әбйәлилдәр ҙә вахта ысулы менән эшләй. Сермәндәге спорт инвентарҙары заводы етәксеһенә лә, ағас эшкәртеү менән шөғөлләнгән Юлай Татлыбаевҡа ла ваҡытында ярҙам ҡулы һуҙып, улар аяғына ныҡлап баҫып киткәнсе һоранып йөрөмәнем. Кемгәләр ваҡытында ярҙам итеп кенә ебәрергә кәрәк, аңлаған кеше был яҡшылыҡты барыбер кире ҡайтарасаҡ. Улар эш урындары ғына булдырып ҡалманы, ауыл тормошо ҡаҙанында беҙҙең менән бергәләп ҡайнаны. Бынан тыш, Белореттан, күрше ауыл-райондарҙан да дуҫтар ҙур ярҙам күрһәтте. Ошоға Сермәндәге мәсет төҙөлөшөн дә дәлил итеп килтерергә була.

Үкенескә ҡаршы, хакимиәт башлыҡтары йыш ҡына сүкеш менән һандал араһында йөрөй. Үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм, инициатива күрһәтеү гел генә яҡшы түгел, ҡайһы саҡта быныӊ өсөн башҡа ла һуғалар. Һәр һүҙең, эшең өсөн ауылдаштарың алдында яуап тоторға кәрәк. Мәҫәлән, миңә йәш ғаилә башлығын торлаҡҡа мохтаж кеше булараҡ исәпкә ҡуя алмауыма ныҡ оят булды. Ул ғаиләһе менән әсәһендә, бер кешегә 12,01 кв. м. майҙан тәшкил иткән өйҙә йәшәй ине. Ә ер биреү өсөн майҙан 12 кв. м.-ҙан артмаҫҡа тейеш. Беҙ бала саҡта тарих дәреслегендә үҙ биләмәһендә бер генә аяғында баҫып торған крәҫтиән төшөрөлгән һүрәт бар ине. 1 кв. дециметрға баҫып та, тороп та булмай ҙа баһа. Был ғаиләгә төҙөлөш башлауға ер участкаһы алыу өсөн икенсе баланы табырға тәҡдим итергә генә ҡалды. Балаһы үҙ мөйөшөн булдырһын өсөн ата-әсәһенең мотлаҡ насар йәшәүе кәрәк булып сыға түгелме? Парадокс, абсурд был. Бындай миҫалдарҙы әллә күпме килтерергә була. Әгәр хакимиәт башлығы ер мәсьәләһен хәл итергә ярҙам итә алмай икән, халыҡ алдында уның ниндәй абруйы булһын инде. Ауылда йәшәргә теләгән йәш ғаиләләр өсөн махсус рәүештә 5 йыл дауамында Иҙел ауылын ойошторорға өлгәштем. Ауыл Рәсәй хөкүмәте ҡарары менән 2012 йылда рәсми теркәлде. Әллә ни иҫ китерлек шарттар булдырып булмаһа ла, сифатлы электр уты менән тәьмин итергә өлгөрҙөк. Минеңсә, ошо ауылда йорт һалыу өсөн ауыл Советы депутаты тарафынан ер тәү сиратта йәштәргә бирелергә тейеш.

***"Кеше байыҡҡансы, эшеҙ ятам..." тигән ҡараш өҫтөнлөк итә бөгөн ауылдарҙа", - тине Асы ауыл хакимиәте башлығы Венер Йосопов һәм был тема буйынса үҙ фекерҙәрен белдерҙе:***

- Нимә генә тиһәң дә, ауылдарҙа лайыҡлы тормош булдырыу өсөн инвесторҙар йәлеп итеү иң отошло юл, - тине Венер Ғариф улы.- Әммә йәлеп итеү тип әйтеүе генә анһат, сөнки инвестор ҙа, тәү сиратта, үҙ мәнфәғәтен күҙ уңында тота. Бында өс таған булырға тейеш. Инвестор, хакимиәт һәм халыҡ. Тағандың бераүһе генә ситкә тартылғанда ла, уңышлы хеҙмәттәшлек булдырып булмаясаҡ. Уртаҡ фекер, аныҡ маҡсат һәм килешеп эшләү - бына ошолар уңышлы хеҙмәттәшлек нигеҙе. Биләмәбеҙҙәге Исҡушты ауылында Силәбе өлкәһе кешеһе буш торған иҫке бинаны аукцион аша һатып алып, турбаза асты һәм әҙме-күпме кешегә эш урыны булдырҙы. Ошо уҡ кешенең Мулдаҡайҙа таш сығарыу карьеры ла бар. Тик шуныһы ҡыҙыҡ, ҡыҙғаныс тиеү бәлки, дөрөҫөрәк тә булыр, ҡайһы бераүҙәр, килмешәктә байытмайым, тигән һылтау менән өйҙә ятыуҙы өҫтөн күрә. Шул арҡала күрше райондарҙан килгәндәр эшләп, мулдаҡайҙарға тейешле аҡсаны ала. Ғөмүмән, ауыл халҡы ситтән килгән эш биреүселәргә ҡырын ҡарап яңылыша, шул арҡала кеҫәһенә инәсәк аҡсаны ла юғалта. Бер кемде лә бер ҡайҙа ла ҡолас йәйеп көтөп тормайҙар. Ғаиләһен ташлап, Себер киткәндәр ҙә тоҡлап аҡса алып ҡайтмай. Әллә ҡайҙа - ер аяғы ер башына китеп, ҡырҡ ата балаһы йыйылған ерҙә, яҡындарыңдан айырылып, йөҙөн дә күрмәгән кешегә тир түккәнсе, ситкә китмәй генә, үҙе ауылыңа килеп эш тәҡдим иткән "килмешәккә" эшләүе күпкә отошлораҡ түгелме ни? Мәҫәлән, Береш ауылында таш сығарыу һәм эшкәртеү менән булышҡан эшҡыуарҙа ла ошо ауылдыҡылар түгел, башлыса ситтән килгән кешеләр эшләй. Бында ла шул бер үк сәбәп: байҙы байыҡҡансы, өйҙә ятам. Эш биреүселәр менән уртаҡ тел табып, булғанды файҙаланып йәшәргә өйрәнгәндә кеҫәгә лә бер аҙ аҡса инер, ниндәйҙер дөйөм проблемаларҙы ла хәл итеү еңелерәк булыр ине.

Әлеге ваҡытта беҙҙең ҙур хыял - Асыла тау саңғыһы үҙәге асыу. Етди генә инвестор килеп сыҡҡанда, был эште йәйға һалып ебәреү артыҡ ҡыйын да булмаҫ ине. Ҡасандыр әлек эшләп килгән тау саңғыһын тергеҙеү өсөн бөтә шарттар ҙа бар, ауылдың географик урыны ла бына тигән. Бары тик эште башҡарылыҡ кәрәкле кешенең килеп сығыуы ғына шарт. Бынан тыш, әлекке Асы минераль һыуын ҡойоу цехы буш тора. Ниндәйҙер сәбәптәр менән эшҡыуар эшен дауам итә алмай. Хәҙер бит магазиндарҙа ниндәй генә һыу һатмайҙар, ә Асы һыуының шифаһы күптәргә таныш. Цехты яйға һалып ебәргәндә, шифалы һыу ҙа һатырға, эш урындары ла булдырырға булыр ине. Бында бит эш урындарынан тыш, бюджетҡа әҙме-күпме һалым да инәсәк. Былар ниндәйҙер тишек-тошоҡто ямап ҡуйырға ярап ҡалыр ине...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бизнесты, инвестицияларҙы үҫтерергә, нисек байырға өйрәткән бик күп бестселлерҙар авторҙары Роберт Кийосаки менән Шэрон Лектер үҙ хеҙмәттәрендә, инвестиция өлкәһендә иң мөһиме - ябайлыҡ, өйөр артынан эйәрмәү, эмоцияларға бирелмәй генә ҡарар ҡабул итә белеү, тип яҙа һәм көнө-төнө эшләгән, аҡса йыйған кешеләрҙән дәүләт өсөн күберәк һалым түләттерергә кәрәк, тип тә билдәләй. Әгәр байырға уйлайһың икән, баш күтәрмәй тир түгеп аҡса йыйыу ғына әҙ, уны дөрөҫ итеп тотона белеү ҙә мөһим, ти улар. Ғөмүмән, ниндәйҙер эштә уңышҡа өлгәшергә теләһәң, башҡаларҙың нимә эшләүенә күҙ һал һәм улар эшләгәндең нәҡ киреһен эшлә, тигән кәңәш тә бирә улар. Ошоларҙан сығып фекер йөрөткәндә кеҫәләре ҡалындар менән бәйләнеш булдырып, ниндәйҙер ҙурыраҡ проекттарға тотонорға ла, кемдәлер байытыуҙан ҡурҡмаҫҡа өйрәнергә лә кәрәктер. Ауылдарҙың киләсәге инвесторҙарға ла бәйле булыуын яҡшы аңлағандарға һис шикһеҙ уңыш йылмаясаҡ.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет районы.**

---

- Аркад, һин байлығыңа нисек өлгәштең? - тип һорай унан батша.
- Мин беҙҙең ҡаланың һәр кешеһе өсөн асылған мөмкинлектәрҙе генә файҙаландым, - ти Аркад.
- Аркад, ҡалабыҙ халҡын байығыу ысулына өйрәтеп булямы?
- Бер кеше өйрәнгән нимәне икенсе кеше өйрәнә алырға тейеш.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң батшаның күҙҙәре янып китә.

- Аркад, һин мин ишетергә теләгән һүҙҙәрҙе әйттең. Һин ошо белемгә уҡытыусыларҙы өйрәтергә теләмәҫ инеңме? Улар аҙаҡ үҙ уҡыусыларын өйрәтер ине.
- Үҙем белгәндәр менән бүлешергә әҙермен, - ти Аркад. - Миңә 100 кешенән торған класс әҙерләтегеҙ, мин уларҙы кесәләктә нисек тултырырға өйрәтермен.

Ике аҙнанан һуң батша бойороғо менән Белем һарайында 100 кеше йыйыла.

- Мин үҙемдең байлығыма тиклем бик ярлы инем, - тип башлай үҙенең тәүге дәресен Аркад. - Туҙып бөткән буш кесәләгем генә бар ине. Мин уны тултырыу тураһында хыялландым, байығыу ысулдарын эҙләнем һәм шундай эте ысул таптым. Шулар хаҡында һеҙгә һөйләргә теләйем һеҙгә. Улар байлыҡҡа илтеүсе иң ябай алымдар. Беренсе ысул: кесәләгендә тултыра башла.
- Уҡыусыларым минең, - тип дауам итә Аркад, - һеҙҙең барығыҙ ҙа аҙмы-күпме аҡса эшләргә мөмкинлек биргән бер һөнәргә эйә. Тапкан аҡсағыҙҙың бер өлөшөн һеҙ үҙегеҙҙең кесәләктә тупларға тейешһегеҙ. Ул шулай эшләнә: ихтыяждарығыҙ өсөн эшләп тапҡан ун һумдың бары тик туғыҙ һумын ғына тотонорға өйрәнегеҙ, бер һумы кесәләктә ҡалһын. Һәр тапҡырҙа шулай эшләнәгеҙ, кесәләктәге теге бер һум янына башҡалары өҫтәлер, кесәләк яйлап ҡалыная барыр. Был һеҙҙең күңелегеҙгә ҡәнәғәтләнеү килтерер. Ошо ябай ғына һүҙҙәремдән көлмәгеҙ беруҡ. Хәҡиҡәт һәр ваҡыт ябай була. Мин үҙем байлыҡ туплауҙы шулай башланым.

Ә хәҙер мин һеҙгә тағы бер ғәжәп хәҡиҡәт асам. Мин үҙ ихтыяждарым өсөн эшләп тапкан бөтә ун һумымды ла түгел, ә туғыҙ һумды ғына тотона башлағас та тормошом шулай уҡ дауам итте, аш-һыуым да кәмемәне, ниндәйҙер мохтажлыҡ та өҫтәлмәне. Уның ҡарауы, кесәләгем ҡалынайғандан ҡалына барҙы. Бына Хоҙай Тәғәлә законы тиҙәр: кем эшләп тапкан аҡсаһының бер өлөшөн генә тотоноп, ҡалғанын запаста тота, уның байлығы ишәйә. Ә кем аҡса тота белмәй, уны байлыҡ урап үтә.

Һеҙ күберәк нимә теләйһегеҙ? Үҙегеҙҙең көндәлек ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндереү, төрлө биҙәүестәр, ҡиммәтле кейем һатып алыу, мул табынмы? Бәлки, һеҙҙең хыял алтын, ер, көтөүлек, сауҙа, төшөмлө инвестицияларҙыр? Кесәләгегеҙҙән алған аҡса һеҙҙең тәүге теләгегеҙҙе ҡандырыр. Кесәләгегеҙҙә ҡалдырған аҡса һеҙгә икенсеһенә өлгәшеү мөмкинлеге бирер. Үҙегеҙ һайлағыҙ. Ә минең байлыҡ ошонан башланды: "Кесәләктәге ун һумдың туғыҙ һумын ғына тотондом".

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**

---

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## "Йәшәртеүсе" алмалар: дөрөҫ ризыҡ тәнгә һәм мейегә ярҙам итә

Борондан кешеләр ҡартлыҡты өйрәнәйтеп, ғүмерҙе оҙайтыусы сара эҙләгән. Ҡартайыуҙың әсеү һәм елһеңеү теорияларына нигеҙләнеп, ғалимдар был процесты күҙәнәк кимәлендә, антиоксиданттарға һәм нутриенттарға бай, елһеңеүгә ҡаршы йөгонтоло аҙыҡ-түлек ҡулланып йайларға мөмкин, тип иҫәпләй. Хатта улар елһеңеү процесын көсәйтеүсе йәки кәметеүсе аҙыҡ-түлекте айыра. Елһеңеү процесына байытылған һәм трансмайҙар, шәкәр, крахмал йөгонто яһай. Уларҙы стресс, гормональ тайпылыштар, ультрафиолет нурланыу, иммунитет кәмеү фонында саманан тыш ҡулланыу ҡартайыуға килтерә. Антиоксиданттарға һәм елһеңеүгә ҡаршы компоненттарға бай аҙыҡ-түлеккә диңгеҙ балығы, ярмалар, төрлө төҫтәге йәшелсәләр, емеш-еләк, сәтләүектәр инә.

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы күрһәтмәләренә ярашлы, омега-3 майына бай һәм ялҡынһыныуға ҡаршы үҙенсәлектәргә эйә балыҡты аҙнаһына 2-3 тапҡыр ашарға кәрәк. Шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләктәрҙе көнөнә биш тапҡыр ҡулланыу фарыз.

Бөтәү ярмаларҙа иреүсе аҙыҡ-түлек сүсе бар. Улар холестерин кәмеүенә ярҙам итә, шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләктә булған кеүек үҫемлек ингредиенттарына эйә. Уларҙы көнөнә 3 порция ашау кәрәк.

Ҡуҙаҡлылар ҙа йәшелсә, емеш-еләктә булған нутриенттарға бай, аҙ калориялылар. Уларҙы аҙнаһына 3-4 тапҡыр ашарға мөмкин.

Йогурттарҙа һөт ризыҡтарында булған барлыҡ файҙалы матдәләр, шулай уҡ эсәктәргә файҙалы микрофлора барлыҡҡа килеүен тәьмин иткән пробиотиктар бар. Тере культуралар булған йогурттарҙы көндәлек 3 дозанан берәрләп ҡулланыу мөһим.

Сәтләүектәр - сәләмәтлек һәм баш мейеһенең нормаль эшләүе өсөн кәрәк булған В төркөмө витаминдарының мөһим сығанағы. Уларҙағы май тирегә структураһын тотоп тороусы эластин һәм коллаген эшләп сығарырға ярҙам итә. Калориялылығы күп булғанлыҡтан, сәтләүектәрҙе аҙләп ашарға кәрәк. Һыу тирене, мускулдарҙы, ҡан әйләнеше системаһын һәм тотош организмды дымлау өсөн кәрәк. Башҡа эсемлектәргә һәм шыйыҡ ризыҡҡа өҫтәмә рәүешендә 34 стакан таҙа һыу эсеү зарур.

## Ҡыҙыл йәшелсәләр йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан

Ликопин - томаттарға ҡыҙыл төҫ биреүсе пигмент. Ул йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, яман шештең ҡайһы бер төрҙәренең, 55 йәш һәм унан өлкән йәштәге кешеләрҙең һуҡырайыу барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Ликопин термик эшкәртелгән ризыҡтарҙан яҡшыраҡ үҙләштерелә, әммә эшкәртелмәгәндәренән дә баш тартырға ярамай. Грейпфрут, гуава, ҡарбуз, әсе ҡыҙыл борос та шундай уҡ үҙенсәлектәргә эйә. Белгестәр простата яман шеше үҫеше төҙәлеше буйынса ликопинға оҡшаған криптоксантин йөгонтоһонда кәмей, тип белдерә. Был хәүеф түбәндәге ризыҡтарҙы ҡулланғанда пропорциональ рәүештә кәмей: әүернә сәскәле йәшелсәләр, ноҡот борсағы, яҫмыҡ борсаҡ, сәтләүектәр, томаттар, йәшел йәшелсәләр.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 30 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.25 "Легкая жизнь". Худ. фильм (12+).
08.15 "Женитьба Бальзаминова". Худ. фильм.
10.15 "Георгий Вицин. "Чей туфля?" 
11.15 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Маргарита Назарова. Женщина в клетке" (12+).
14.10 "Полосатый рейс". Комедия (12+).
15.55 Юбилейный концерт Олега Иванова.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "По законам военного времени". 1-я и 2-я серии. Историко-драматический сериал (12+).
23.20 "Спящие". Сериал (16+).
01.25 "Линкольн". Худ. фильм (12+).
04.10 "Модный приговор".
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.40 "Варенька. И в горе, и в радости". Сериал (12+).
09.35 "Аншлаг и Компания" (16+).
11.50, 14.20 "Жемчуга". Мелодраматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
21.00 "Сын моего отца". Часть 1-я. Остросюжетный сериал (12+).
00.40 "Сердце матери". Остросюжетный сериал (12+).
02.40 "Заяц, жареный по-берлински". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Солан и Людвиг: сырная гонка".**
**09.30 "Наши годы" (12+).**
**10.00 "Исаев". Сериал (12+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**12.30 Фильм-концерт "Дарман".**
**13.15 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" - ФК "СКА-Хабаровск".**
**15.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**16.00, 23.30 "Вождь краснокожих". Худ. фильм (16+).**
**17.45 "Орнамент" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.00 Концерт заслуженного артиста РБ Вильдана Яруллина (12+).**
**20.30 "Йөрәк һүҙе" (12+).**
**20.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Золотая команда-2008" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 К.Кизи. "Пролетая над гнездом кукушки" (12+).**

## 1 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.40 "Полосатый рейс". Комедия (12+).
08.15 "Кубанские казаки". Худ. фильм.
10.20 "Королева бензоколонки". Худ. фильм.
12.00 Первомайская демонстрация на Красной площади.
12.45 "Играй, гармонь любимая!" Праздничный концерт.
14.00 Новости (с субтитрами).
14.10 "Весна на Заречной улице". Худ. фильм.
16.05, 18.15 Юбилейный концерт Иосифа Кобзона в Государственном Кремлевском Дворце.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.55 "По законам военного времени". 3-я и 4-я серии (12+).
21.00 "Время".
21.20 "По законам военного времени". 5-я серия (12+).
23.20 "Спящие". Сериал (16+).
01.25 "Французский связной". Худ. фильм (16+).
03.25 "Человек в красном ботинке". Худ. фильм (12+).
05.05 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.40 "Варенька. И в горе, и в радости". Сериал (12+).
09.35 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт (16+).
11.50, 14.20 "Жемчуга". Мелодраматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
18.00 "Привет, Андрей!" Вечернее шоу (12+).
21.00 "Сын моего отца". Часть 2-я. Остросюжетный сериал (12+).
00.40 "Сердце матери". Остросюжетный сериал (12+).
02.40 "Заяц, жареный по-берлински". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Спасая Шерлока".**
**09.30 "Наши годы" (12+).**
**10.00 "Исаев". Сериал (12+).**
**11.00 "Бизнес-проба" (12+).**
**11.15 Р.Кинзябаев. "Караул, тещу украли!" (12+).**
**12.30 "Кукушкин чай".**
**13.00 "Дарю песню" (12+).**
**14.00 "Чак-чак". Худ. фильм (12+).**
**15.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**16.00, 24.00 "Внук космонавта". Худ. фильм (12+).**
**17.30 "Дознание" (16+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00 "Zainetdin".**
**20.45 "Йөрәк һүҙе" (12+).**
**21.00 "В простоте - величие" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Современник" (12+).**
**22.15 "Замандаш" (6+).**
**23.00 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Ш.Камал. "Хаджи эфэнди женится" (12+).**

## 2 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.40 "Королева бензоколонки". Худ. фильм.
08.10 "Весна на Заречной улице". Худ. фильм.
10.15 "Александр Михайлов. Только главные роли" (16+).
11.15 "Угадай мелодию".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Приходите завтра..." Комедия.
15.00 "Трагедия Фроси Бурлаковой".
16.10 "Я хочу, чтоб это был сон...". Концерт Елены Ваенги (12+).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50 "По законам военного времени". 6-я и 7-я серии (12+).
21.00 "Время".
21.20 "По законам военного времени". 8-я серия (12+).
23.20 "Соломон Волков. Диалоги с Валерием Гергиевым".
00.20 "Спящие". Сериал (16+).
01.25 "Французский связной-2". Худ. фильм (16+).
03.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.40 "Варенька. И в горе, и в радости". Мелодраматический сериал (12+).
09.30 "Юмор! Юмор! Юмор!!!". Юмористическая программа (16+).
11.50, 14.20 "Жемчуга". Мелодраматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
21.00 "Сын моего отца". Часть 3-я. Остросюжетный сериал (12+).
00.40 "Сердце матери". Остросюжетный сериал (12+).
02.40 "Заяц, жареный по-берлински". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Плюк и его тягач" (12+).**
**09.30 "Наши годы" (12+).**
**10.00 "Исаев". Сериал (12+).**
**11.00 М.Буракаева. "Судьба, выбранная мной" (12+).**
**12.30 "Колонкай". Худ. фильм.**
**13.30 "Мир, труд, май!" Ретро-концерт (12+).**
**15.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**15.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**16.00, 24.00 "Жизнь одна". Худ. фильм (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башкорттар" (6+).**
**19.00 Концерт группы "Буреләр".**
**20.45 "Йөрәк һүҙе" (12+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Современник" (12+).**
**22.15 "Замандаш" (6+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Ф.Буляков. "Эх, холостяки, холостяки" (12+).**

## 3 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15, 04.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.10 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "По законам военного времени". 9-я и 10-я серии (12+).
23.30 "Спящие". Сериал (16+).
01.35 "Краденое свидание". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.40 "Жемчуга". Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
21.00 "Сын моего отца". Часть 4-я. Сериал (12+).
00.40 "Сердце матери". Остросюжетный сериал (12+).
02.40 "Заяц, жареный по-берлински". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Исаев". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Орнамент" (6+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Учим башкирский язык".**
**17.15 "Моя республика" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башкорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Зависть богов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Бәхетнамә" (12+).**

## 4 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15, 05.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55 "Модный приговор". Программа о моде и стиле.
12.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
17.05 "Угадай мелодию".
17.40, 18.15 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.10 Чемпионат мира по хоккею-2018. Сборная России - сборная Франции. Прямой эфир.
21.00 "Время".
22.00 "По законам военного времени". 11-я и 12-я серии (12+).
24.00 "Михаил Шемякин. Потом значит никогда". Док. фильм (16+).
01.05 "Спящие". Сериал (16+).
02.20 "Обратная сторона полуночи". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.40 "Жемчуга". Мелодраматический сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Привет, Андрей!" Вечернее шоу (12+).
21.00 "Сын моего отца". Сериал (12+).
23.50 Первая Международная профессиональная музыкальная премия "BraVo".
02.50 "Заяц, жареный по-берлински". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Ирина Скобцева. Мы уже никогда не расстанемся" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Т.Кильмухаметов. "Счастье" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сыйырсык".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байык-2018" (12+).**
**24.00 "Час пик". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 Е.Карпенко-Карий "Бесталанная" (12+).**

## 5 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.45, 06.10 "Смешная жизнь". Сериал (12+).
06.00, 10.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.15 "Людмила Гурченко. Карнавальная жизнь" (12+).
11.20 "Людмила Гурченко. Песни о войне".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Небесный тихоход". Худ. фильм.
13.50 "Маршал Рокоссовский. Любовь на линии огня".
14.45 "А зори здесь тихие..." Военная драма (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "По законам военного времени". 1-я и 2-я серии. Историко-драматический сериал (12+).
23.20 "Спящие-2". Сериал (16+).
01.15 "Полный пансион". Худ. фильм (16+).
02.45 "Дети Сэвиджа". Худ. фильм (16+).
04.50 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Срочно в номер!-2". Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "По секрету всему свету".
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт.
14.00 "Слезы на подушке". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Вечернее шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Приличная семья сдаст комнату". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Простить за все". Мелодрама (12+).
03.00 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Супертачка" (12+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (12+).**
**12.00 "Тэмле" (12+).**
**13.00 Замандаш" (6+).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Бай бакса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2018" (12+).**
**17.00 Концерт Зульфиры Фархутдиновой (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Имеш-мимеш" (12+).**
**21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 01.45 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**24.00 "Безумно влюбленный". Худ. фильм (12+).**
**02.30 А.Мирзагитов. "Матери ждут сыновей" (12+).**

## 6 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Смешная жизнь". Сериал (12+).
06.00, 10.00 Новости.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.05 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.10 "Вера Васильева. Секрет ее молодости" (12+).
11.15 "В гости по утрам с Марией Шукшиной".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 Концерт к Дню войск национальной гвардии РФ.
15.10 Чемпионат мира по хоккею-2018. Сборная России - сборная Австрии. Прямой эфир.
17.25 "Леонид Куравлев. Афоня и другие" (12+).
18.30 "Ледниковый период. Дети".
21.00 "Время".
21.30 "По законам военного времени". Сериал (12+).
23.30 "Спящие-2". Сериал (16+).
01.15 "Поймет лишь одинокий". Худ. фильм (16+).
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Срочно в номер-2". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается" (16+).
13.05 "Цветы дождя". 8 серий. . Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Данила Козловский. Герой своего времени". Док. фильм (12+).
01.30 "Поцелуев мост". Мелодрама (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сыйырсык".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учим башкирский язык" (6+).**
**13.30 "Үткән гүмер" (12+).**
**14.00 Б.Бикбай, З.Исмагилов "Сваха" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30, 01.00 "Детектив Ди и тайна призрачного пламени". Худ. фильм (16+).**
**18.45 Башкирская юниор-лига КВН-2018. Финал.**
**20.15 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**20.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҺУНАРҒА...

## талпандар сыға!

**Роспотребнадзор талпандар һөжүме һәм уларҙың тешләүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән инфекциялар миҙгеле башланыуы хаҡында иҫкәртә. Март һуңында Рәсәйҙең 24 субъектында медицина учреждениеларына талпан тешләгән 450 кеше, шул иҫәптән 220 бала мөрәжәғәт итә. Әлегә инфекция ауырыуҙары осрағы теркәлмәгән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә акарицид эшкәртеүҙәр үткәрелгән. Быйыл был сараны 93 мең гектар майҙанда үткәреү планлаштырылған. Вируслы талпан энцефалитынан 500 мең самаһы кеше прививка эшләткән.**



Вируслы талпан энцефалиты - киҫкен инфекциялы вирус сире. Ғәҙәттә, үҙәк нервылар системаһын зарарлай. Һөҙөмтәлә кеше тулыһынса һаулығырға ла, сәләмәтлеге боҙолорға ла, шулай уҡ инвалид булып ҡалырға ла мөмкин. Үлем осраҡтары ла юҡ түгел.

➔ **Кеше нисек зарарлана?**

Ауырыуҙы ҡуҙғытыусы кешегә вирус менән зарарланған талпан тешләгәндең беренсе минутында уҡ күсә. Был ваҡытта бөжәк ауыртыуҙы баҫыусы төкөрөк бүлеп сығара, шуға күрә кеше уның тешләгәнен тоймауы ла мөмкин. Зарарланыу тик урманда, урман парктарында ғына мөмкин икән тип уйларға ярамай, сөнки баҡса участкаларында ла талпан тешләүе ихтимал. Икенсе юл - талпандың кейемгә, сәскә гөлләмәһенә, ағас ботаҡтарына, малдарға ултырып, кеше йәшәгән урынға эләгеүе.

Инфекция талпандарҙың әүҙем һөжүме ваҡытында ҡайнатмай ҡулланылған кәзә (барыһынан да йышыраҡ), һарыҡ, һыйыр, буйвол һөтө аша ла күсә. Шуға күрә хәүефле территорияларҙа һөттө мотлаҡ ҡайнатырға кәрәк. Шулай уҡ ҡайнатылмаған һөттән айыртылған ҡаймаҡ, эшләнгән эремсек тә сир сығанағы була ала.

➔ **Сирҙең төп билдәләре?**

Инфекция бигерәк тә талпандарҙың активлығы осоронда, яҙғы-көҙгө миҙгелдә хәүефле. Инкубация осоро бик йыш 10-14 көн дауам итә, ҡайһы бер осраҡтарҙа 60 көнгәсә һуҙылыуы мөмкин. Сир киҫкен башлана, өшөтә, баш ныҡ ауырта, температура ҡапыл 39-40 градусҡа тиклем күтәрелә, ҡоҫтора. Муйын һәм ҡулбаш, арҡаның күкрәк һәм бил өлөшө, ҡул, аяҡ суҡтарының мускулдары ауырта. Сирлелең йөҙөндә гиперемия (ҡан тамырҙары тулыша) күҙәтелә, был күренеш тәнгә лә тарала.

➔ **Кемдәр хәүеф категорияһына инә?**

Талпан энцефалиты менән йөшенә һәм енесенә ҡарамайынса, барлыҡ кешеләр ҙә зарарланыуы мөмкин. Бигерәк тә урманда эшләүселәр - урман сәнәғәте хужалығы эшселәре, геология-разведка хеҙмәткәрҙәре, автомобиль һәм тимер юлдарын, нефть һәм газ торбаларын һалыусылар, электр энергияһы линияларын үткәреүселәр, топографтар, һунарсылар, туристар ҙа хәүеф аҫтында. Ҡала халҡы ҡала ситендәге урмандарҙа, урман парктарында, баҡса участкаларында зарарланыуы ихтимал.

➔ **Нисек һаҡланырға?**

Талпан муйын йәки ең аша тәнгә үтеп инмәһен өсөн махсус һаҡланыу костюмы кейергә кәрәк. Күлдәк оҙон енле булырға һәм беләҙектән резинка менән ныҡытылып ҡуйылырға тейеш. Күлдәк салбарға тығыла, ә салбар балағы - носкиға. Башты һәм муйынды яулыҡ йәки икенсе баш кейеме менән ҡаплау зарур.

Талпандарҙы ҡурҡытыу өсөн репелленттар ҡулланыла, улар менән тәндең асыҡ өлөшө һәм кейем эшкәртелә. Талпандарҙың актив миҙгелендә тәбиғәттә булған һәр кеше даими рәүештә кейемен һәм тәнен тикшереп, ҡарап торорға тейеш.

Белгестәр энцефалиттың эндемик усағында эшләүсе айырым һөнәр эйәләренә һәм ял итергә сығыусыларға прививка яһатырға кәңәш итә. Шулай уҡ тәненә ҡаҙалған талпанды алып дауалау учреждениеһына мөрәжәғәт итеүселәр ҙә вакцина ала.

➔ **Ҡайҙа прививка яһатырға?**

Рәсәйҙә вируслы талпан энцефалитына ҡаршы бер нисә вакцина теркәлгән. Прививка курсын табип менән кәңәшләшкәндән һуң, поликлиникаларҙа, медсанчастарҙа, уҡыу йорттарының здравпунктттарында хәүефле территорияға сығырҙан ике ай алда эшләтеп бөтөргә кәрәк.

➔ **Әгәр прививка эшләтмәгән булһағыҙ...**

Бындай категорияға серопрофилактика үткәрелә - талпан тешләгәндән һуң 96 сәғәт эсендә медицина учреждениеларына тәүге билдәләр күҙәтелгәндә талпан энцефалитына ҡаршы кеше иммуноглобулин индерелә.

➔ **Талпанды нисек алырға?**

Иң яҡшыһы - быны поликлиникала эшләргә. Әгәр ундай мөмкинлегегеҙ юҡ икән, талпанды пинцет менән йәки марля аша ауыҙына тиклем эләктереп, тешләнгән урынға перпендикуляр рәүештә тотоп, кәүҙәһен үҙәк буйынса борорға, уны тиренән сығарырға кәрәк. Тешләнгән урынды ҡул аҫтында булған саралар - 70 процентлы спирт, 5 процентлы йод, одеколон менән эшкәртергә. Талпанды алғас, ҡулды ентекләп йыуыу зарур. Талпандың үҙен лабораторияға алып барып тикшертергә кәрәк.

**Ғәлиә НӘБИЕВА.**

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Тәбиғәт ҡосағында ял иткәндә талпан ҡаҙалыуҙан һаҡланыу өсөн бер шәп ысул бар. Тәбиғәткә сығыр алдынан кейгән кейемдәрегеҙҙе эфирлы май һөртөлгән ябай валик менән таҙаларға кәрәк. Эвкалипт, лимон, бөтнөк (мята), ала миләүшә (лаванда) һәм ҡытай лимонниғы эфирлы майҙары талпанды ҡурҡытырға яраҡлы. Эвкалипт һәм лимонник эфирлы майҙарын бергә ҡушып, бөтә төрлө бөжәктәрҙе ҡыуыу өсөн ҡулланырға була. Ә бына лимон майы талпан, бөрсә һәм хатта беттәрҙе бөтөрөүҙә файҙалы. Бөтнөк майы бөжәктәр өсөн ағыулы һанала һәм уларҙы ҡыуыусы тәбиғи матдә булып тора. Бөтәһе лә яраҡлан ала миләүшә еҫенә талпандар түҙә алмай, себен-серәкәй ҙә был еҫтән ҡаса. Ҡытай лимонниғы майының еҫе аңҡып тора, ул бөрсә һәм талпандарҙан һаҡланырға ярҙам иткән тәбиғи матдә. Эфирлы майҙарҙы һыу менән бутап ҡулланырға ла мөмкин. Тик эҫе көндәрҙә, аллергия ҡуҙғыуын иҫкәртеп, эфирлы майҙарҙы тән тиреһенә һипмәскә кәңәш ителә.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# "БИРЕШМӘ"НЕҢ ДАУАМЫ...




**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы төшөргән йәнһүрәттәр, тапшырыуҙар, фильмдар һәр ваҡыт рәхмәтле тамашасыларын таба. Күптән түгел зәңгәр экрандарҙан күрһәтелгән "Бирешмә" сериалы ла күптәрҙең күңеленә ятты. Бик күптәр фильмдың дауамын өмөтләнеп көткән арала, сериалда төшкән йәштәр журналистар менән осрашыуҙа ҡатнашты.**

"Бирешмә" сериалы сығарылыш уҡыусылары алдында торған һынауҙар, быуындар араһындағы мөнәсәбәттәр, һөнәр һайлау, йәш кешенең ата-әсәһенең ҡурсаулы ҡанаты аҫтынан сығып, оло тормошҡа тәүге аҙым яһауы тураһында төшөрөлгән сериал. Уның төп геройҙары Данир Ғимаҙиев, Гөлсәр Байғусҡарова, Хәйҙәр Вәлиев һәм Гөлгәнә Баһауетдинова сериалды ҡараған тиҫтерҙәренән бик күп ыңғай яуаптар алыуы тураһында һөйләне. "Бәйләнештә" социаль селтәре аша бик күп яҙҙылар, сериалдың дауамы тураһында ла һорашалар, беҙгә матур теләктәрен дә еткерәләр, тормошта беҙ уйнаған геройҙарыбыҙға оҡшашмы, тип тә һорашалар. Бөтәһенә лә яуап ҡайтарырға, тиҫтерҙәребеҙ менән аралашырға тырыштыҡ, күптәр менән дуҫлаштыҡ, - ти Гөлсәр Байғусҡарова. Бына шулай тамашасылары менән аралашыу мәлендә "Тамыр" телеканалының фиҙаҡәр хеҙмәткәрҙәренә тағы бер үҙенсәлекле проектты тормошҡа ашырыу идеяһы килгән. Улар "Бирешмә" сериалын бик яратып ҡараған ихлас тамашасыһы, балалар церебраль фалижы менән сирләгән Руслан Шәрәфетдиновҡа дауаланырға ярҙам итергә ҡарар иткән. Алсаҡ, донъяға ғашиҡ был малай Ғафури районында әсәһе менән йәшәй.

- Кәңәшләштек тә, Русланға ярҙам итеү ниәтендә 16 майҙа "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ҙур концерт ойоштороға булдыҡ. Беҙҙең сериалдың сюжеты шулай итеп ысынбарлыҡта дауам итеп китте. Әлеге ваҡытта "Бирешмә"ләр ошо тамашаға әҙерләнә, унан һуң сериалдың дауамын төшөрмәһәк тә, "Бирешмә-Профи" тигән яңы тапшырыу сығарырға торабыҙ. Был тапшырыу сентябрь айынан башлап аҙнаһына бер тапҡыр күрһәтеләсәк. Ул төрлө һөнәрҙәр тураһында файҙалы мәғлүмәт биреүгә ҡоролған, "Бирешмә"нең төп геройҙары алып барыусы буласаҡ, - ти "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы етәксеһе Гөлназ Ҡолһарина.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 апрель "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**3 май "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+
**4 май "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**29 апрель "Акса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+
**3 май "Беҙҙең өйҙән йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. Башлана 15.00 6+
**4 май "Вспомним всех поименно"** музыкаль-шиғри композиция. Башлана 15.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**29 апрель "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+
**30 апрель "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+.
**1-2 май "Принцесса Крапинка"** (А. Шмидт) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Апрель - Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (14) дүшәмбе | 4:12 | 5:42 | 13:30 | 19:16 | 20:46 | 22:16 |
| 1 (15) шишәмбе | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 19:18 | 20:48 | 22:18 |
| 2 (16) шаршамбы | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 19:20 | 20:50 | 22:20 |
| 3 (17) кесе йома | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 19:22 | 20:52 | 22:22 |
| 4 (18) йома | 4:03 | 5:33 | 13:30 | 19:23 | 20:53 | 22:23 |
| 5 (19) шәмбе | 4:01 | 5:31 | 13:30 | 19:25 | 20:55 | 22:25 |
| 6 (20) йәкшәмбе | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 19:27 | 20:57 | 22:27 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

## ҒӘФҮ ИТӘ БЕЛ!

Тәкәбберлек, һауалы булыу, мин-минлек - кешеләге иң насар сифат. Бәндәне ул утҡа ғына алып бара. Аллаһҡа буйһона белмәү сәбәпле, Иблес таштар менән атылып йәннәттән ҡыуыла; Аллаһ тарафынан ғилем һәм мал менән йомарт бүләкләнеп тә Мусаға ҡарата көнсөл һәм әҙәпһеҙ булғаны өсөн Ҡарунды ер йота.

Мосолмандың төп сифаты - әҙәп һәм тыйнаҡлыҡ. Аллаһ үҙе лә әйтә бит: "Аллаһтың һинең күңелгә һалған рәхмәте менән һин уларға ҡарата миһырбанлы булдың, ғәфү итә белдең. Әгәр ҙә һин уларға ҡарата ҡырыҫ һәм ҡаты күңелле булған булһаң, һис шикһеҙ, улар үҙҙәре лә һинең эргәңдә ҡалмай, ташлап киткән булырҙар ине.

Үҙең дә ғәфү ит, Раббыңдан да уларҙы ярлыҡауын һора. Эштәрең кәңәшле булһын. Улар менән кәңәшләшеп кенә тор. Ныҡлы бер ҡарарға килгәндә иһә Аллаһтың үҙенә генә тәүәккәллә. Аллаһ ул үҙенә тәүәккәл булғандарҙы һөйә".

*"Әлү Ғимран" (Ғимран ғаиләһе) сүрәһе, 159-сы аят.*

*✓ Бөтә теләктәр ҙә бойомға ашыуҙан кешеләр бәхетлерәк булып китмәҫ ине.*

*(Гераклит Эфесский).*



## ЗАУЫҠ

Мәрйәм КҮСМӘЕВА

### Яҙ килә тип...

Ҡарлы донъяларҙан туйҙым,
Ҡыш үтмәҫ кеүек мәңге...
Йәш быҙауҙай,минең дә бит
Килә шул иркәләнге.

Наҙлы нурҙарҙа ҡойоноп,
Күнелде йылытаһы,
Һеңгәһе менән ҡояштың
Ҡалын боҙҙо онтайһы,

Ҡағыҙ карап йөҙҙөрәһе
Урамдағы йылғала.
Хыялда ғына еләһе
Зәңгәр диңгеҙгә табан.

Ҡуләүектәге күҙгелә
Йәш сағымды күрәһе,
Ҡолондар менән ярышып,
Болонда йүгерәһе...

### Мин - хыялый!

Ашҡынам да,
Ашығам яҙҙарыма.
Марттың әле күмәһе бар
Буранлап, ҡарҙарына.

Аҡман-тоҡман булаһы бар,
Йондоҙ сатнар һалҡындар.
Енел генә яҙ килмәй шул:
Унын үҙ ҡануны бар.

### Файҙа

"Хәйләһеҙ донъя - файҙаһыҙ", -
Тип нығып торһалар ҙа,
Һис кенә лә өйрәнмәнем
Хәйләгә донъяларҙа.

Алдап, хәйләләп йәшәүҙең
Һис күрмәйем файҙаһын.
Тураһын әйтеп туғанға,
Беләм, ярай алмамын.

Шаҡшыны яҡшы тиергә
Әйләнмәй һис тә телем.
Ҡойроҡ болғамам хужаға,
Ҡалһа ла уға көнөм.

Үтә ғорур башҡынайым
Сабылды ҡылыстарҙан.
Енел булманы тормошом,
Булманы тыныстарҙан.

Бер хәйләһеҙ йәшәгәнгә,
Артыҡ файҙа күрмәнем.

Халҡыма файҙа килтереү -
Булғандыр бар белгәнем.

### Кәрәк булһам

Батша булыуы ла ауыр -
Ағыулайҙар.
Тәхетеңдән төштө ниһәң,
Ҡайыҙлайҙар.

Һирәк хаким хуш киләлер
Кешеләргә.
Түрә булыу енелерәк
Бешеләргә.

Ябай ғына үлән булып,
Тапалһам да,
Һис үкенмәм, тыуған ерҙә
Мин ҡалғанға.

Кәрәк күрһә ихтыяжы
Үҙ халҡымдың,
Яҙҙар еткәс, йәш үләндәй
Мин ҡалҡырмын.

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БЕҘ БАРБЫҘ...



**Башҡортостандың баш ҡалаһында Татарстан Республикаһы башҡорттары мәҙәниәте көндәре саралары үтте.**

Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Татарстан делегацияһы "Рәсәй Федерацияһы төбәктәрендә башҡорттар: үткәнебеҙ, бөгөнгөбөҙ һәм киләсәккә пландар" түңәрәк өҫтәле эшендә ҡатнашты, экскурсия менән Башҡортостандың Милли музейында, Бал йортонда, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатында, Салауат Юлаев майҙанында булды, унда ҡунаҡтар милли батырыбыҙҙың һәйкәленә сәскәләр һалды. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә гала-концерт үтте. Республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова сарала ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов исеменән ҡотланы һәм ҡунаҡтарға рәхмәт хаттары тапшырҙы. "Был проекттың мөһим бурысы - башҡорт этносына иғтибар йәлеп итеү, башҡорттар күпләп йәшәгән Рәсәй төбәктәре араһында этник мәҙәниәтте үҫтереү һәм дуҫлыҡ бәйләнештәрен нығытыу", - тип һыҙык өҫтөнә алды Әминә Шафиҡова. Гала-концерт программаһын ике республика артистары әҙерләгәйне. Башҡорт туйының үҙенсәлектәре Татарстандың "Гөлнәзирә" һәм "Сал Урал" фольклор ансамблдәре башҡарған музыкаль-бейеү композицияһында сағылыш тапты. Концертта шулай уҡ башҡорт йырҙары, бейеүҙәре, шиғырҙары һәм йолалары башҡарылды.

2007 йылдан башлап, этномәҙәни акция сиктәрендә Башҡортостанда Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Һамар, Һарытау, Свердловск өлкәләре һәм Пермь крайы башҡорттары мәҙәниәте көндәре уҙғарылды. Киләһе йыл сарала Ханты-Манси автономия округы башҡорттары ҡатнашасаҡ.

"Татарстан Республикаһы башҡорттары ҡоролтайы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы советы рәйесе Ғәли Хәсәнов Ханты-Манси автономия округы - Югра башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Рәүҙәт Ҡолманбәтовҡа символик штандартты тапшырҙы.

# ТОРАТАУҘА - ТАМАША

**8-10 июндә Башҡортостанда "Урал моңо" төрки йәштәренең музыкаль ижады фестивале үтәсәк.**

"Урал моно" конкурс-фестиваленең төп маҡсаты - төрки йәштәрҙең заманса милли музыкаль ижадын пропагандалау, төрки халыҡтарҙың милли ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыу, төрки халыҡтары араһында мәҙәни милләт-ара бәйләнештәрҙе үҫтереү, йәш башҡарыусыларҙың ижади мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыу, йәштәрҙең ялын ойоштороу. Бәйгелә этник һәм эстрада йырҙарын башҡарыусы 18 йәштән 35 йәшкә тиклемге йәштәр ҡатнаша. Конкурс-фестивалдең еңеүселәре 3 номинацияла билдәләнәсәк: солист-вокалистар, вокаль һәм вокаль-инструменталь коллективтар, инструменталист солистар һәм инструменталь коллективтар.

8 июндә фестивалдең тәүге көнө Өфөлә үтә. Унда конкурс программаһы тәҡдим ителәсәк. Ҡатнашыусыларҙың башҡарыу оҫталыҡтарын һәм ижади ниәттәрен баһалама составына ингән Польша, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Алтай, Үзбәкстан, Якутстан, Тыва һәм Башҡортостан композиторҙары һәм сәнғәт оҫталары баһалаясаҡ. 9 июндә "Урал моңо" ҡатнашыусылары "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале барышында ойошторолған "UFA - Kuraifest" сағыу проектында сығыш яһаясаҡ. 10 июндә "Урал моңо" халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестивале Ишембай районының Торатау итәгендә ҙур гала-концерт менән тамамланасаҡ.

Бәйгене ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Рәсәй Федерацияһы Мәҙәниәт министрлығы, В.Д. Поленов исемендәге Рәсәй Дәүләт халыҡ ижады йорто, Республика халыҡ ижады үҙәге, Өфө ҡала округы хакимиәте, Ишембай районы муниципаль районы хакимиәте.

# ИЛДАРҘЫҢ ОҪТАЛЫҠ ДӘРЕСЕ



**З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының Шаляпин залына йәш йырсылар, педагогтар һәм мәҙәни йәмәғәтселек вәкилдәре Башҡортостандың халыҡ артисы, "Алтын битлек" милли театрҙар премияһы лауреаты, ике тапҡыр "Грэмми" премияһы лауреаты Илдар Абдразаҡовтың оҫталыҡ дәресенә йыйылды.**

Оҫталыҡ дәресендә яңғыҙ йырлау кафедраһы студенттары Дамир Таипов, Рим Рәхимов, Салауат Кейекбаев, Илья Морозов, Артур Хисамов, Сергей Еромченко ҡатнашты, улар башҡарыуында операларҙан ариялар тыңлағандан һуң, Илдар Әмир улы уларға профессиональ кәңәштәр бирҙе, нескәлектәр өҫтөндә эшләргә, йөкмәткеһе хаҡында уйланырға һәм фразаны күнел аша үткәрергә өйрәтте. "Һурәт төшөр, рәссам бул!", "Беҙ һинең йөрәгеңде күрергә теләйеш", "Мин штамптарҙы ярат-майым", "Беҙ, йырсылар, кемдең нисек йырлағанын тыңлайбыҙ һәм янылыш хәтерҙә ҡалдырабыҙ, шуға күрә әҫәрҙе нотала нисек яҙылған, шулай атларға кәрәк", "Залға ҡара, уға һөйлә, унын иғтибарын йәлеп ит!" - тәжрибәле артист яңы сәнғәт юлына аяҡ баҫҡан йәштәрҙе ошондай һүҙҙәр менән дәртләндерҙе, студенттарҙың һәр береһе менән иғтибарлы эшләне, уларҙың тауыштарын маҡтаны.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйләреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕЛӘР БУЛМАҒАНДА ЛА...

## кеше булып ҡал

Буш хәбәр һөйләүселәр ахмаҡ түгел, нимә һөйләгәндәрен үҙҙәре аңламағандар ахмаҡ.

**(Осип Брик).**

Аллаһ кешене үҙ һыны, үҙ ҡиәфәтенә оҡшатып яратһа, беҙ ҙә уға шунын менән яуап ҡайтарғанбыҙ.

**(Вольтер).**

Азатлыҡҡа хаталаныу хоҡуғы инмәһә, азатлыҡ бер тин дә тормай.

**(Махатма Ганди).**

Намыҫ - ул изге юлды яҡтыртыр лампа, насар юлда ул ярыла.

**(Фридрих Гегель).**

Ир-егет өсөн бәхет - ул кисен ҡайтып килгәндә ниндәйҙер ҡатын-ҡыҙҙың һинең атлау тауышын тыңлап тороуын белеү.

**(Кларк Гейбл).**

Ҡатын-ҡыҙҙың нәфрәте - ул шул уҡ мөхәббәт, тик кирегә боролған мөхәббәт.

**(Герних Гейне).**

Бөтә теләктәр ҙә бойомға ашыуҙан кешеләр бәхетлерәк булып китмәҫ ине.

**(Гераклит Эфесский).**

Тыныс тормошта улдар аталарын күмә, һуғышта - аталар улдарын.

**(Геродот).**

Балалар беҙ теләгәнсә һәм көткәнсә генә үҫһә, бөтәһе лә гений булыр ине.

**(Иоганн Гете).**

Аҡсағыҙҙы һанап бөтә алаһығыҙ икән, тимәк, һеҙҙең миллиард доллар аҡсағыҙ юҡ.

**(Пол Гетти).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бай кеше Сенгай тигән аҡыл эйәһен саҡырып алған да унан үҙ ғаиләһе быуындан-быуынға, гел бәхетле йәшәһен өсөн берәй нимә яҙырға ҡушҡан. Сенгай ҙур ҡағыҙ бите алған да, шулай тип яҙған:**

**"Атай үлгән, улы үлгән, ейәне үлгән".**

**Бай асыуланған:**

**- Мин ғаиләмдең бәхете өсөн берәй нәмә яҙырға һораным. Ниңә һин шулай әҙәпһеҙ итеп шаяртаһың?**

**- Мин шаяртырға уйламағайным да, - тип яуап биргән Сенгай. - Улың һинән иртәрәк үлһә, һин нык бәхетһеҙ буласаҡһын. Ейәнең улыңдан иртә вафат булһа, икегеҙҙең дә йөрәгегеҙ ярыласаҡ. Әгәр ҙә ғаиләндә быуындан-быуынға бөтәһе лә мин яҙған тәртиптә донъя ҡуйһа, был ғүмерҙең тәбиғи хәрәкәте буласаҡ".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 747/04